ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

23-29 ғинуар (һыуығай) 2026

№3 (1198)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Урман башҡорттарына сәйәхәт**



7

**Юлдыбай тигән рухи ауылыбыҙҙа...**

ауылса аралашып, күрешеп йәшәүҙе бәхеткә тиңләйбеҙ



8-10

**Иң әҙәпле тел...**

һүгенеүҙән азат булғаны



11

**Боронғо башҡорттарҙың...**

Яңы йыл байрамы



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Әйҙәгеҙ, алға барайыҡ. Ни өсөн хаталарға һәм ҡайғы-хәсрәттәргә йәбешеп ятырға? Ниңә өмөткә һәм мөхәббәткә ҡәртә булып торған нәмәләрҙән ысҡынып китмәҫкә?***

***(Будда).***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***2026 йыл Рәсәй халыҡтарының берҙәмлек йылы тип иғлан ителде. Беҙҙең Башҡортостанда, билдәле булыуынса, күп төрлө милләт вәкилдәре быуаттар һуҙымында тыныс һыйышып йәшәй һәм республикабыҙ был йәһәттән ил кимәлендә өлгөлө булараҡ баһаланып килә. Республикабыҙҙа милләт-ара дуҫлыҡ сере нимәлә тип уйлайһығыҙ?***

***Хөрмәтулла ҮТӘШЕВ, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Дуҫлыҡ һәм Салауат Юлаев ордендары кавалеры:*** 2026 йылдың Рәсәй халыҡтары берҙәмлеге йылы тип нарыҡланыуы тәбиғи хәл, сөнки 190-дан ашыу милләт йәшәгән ил өсөн халыҡтар дуҫлығы һәм берҙәмлеге беҙҙең төп байлыҡ һанала. Былтыр ноябрь аҙаҡтарында РФ Президенты Владимир Путин 2036 йылға тиклем Дәүләт милли сәйәсәтенең яңы стратегияһын раҫланы. Беҙ, Рәсәй халыҡтары, бергәләшеп иҡтисад төҙөйбөҙ, бергәләп Ватаныбыҙҙы яҡлайбыҙ һәм бергәләп киләсәгебеҙ өсөн көрәшәбеҙ. **Владимир Путиндың Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса Совет ултырышында әйткән һүҙҙәре һаман ҡолаҡ төбөндә яңғырап торғандай: "Беҙҙең өсөн һәр бер халыҡтың мәҙәниәте, йолалары, телдәре мөһим һәм кәрәкле. Ошо күп төрлө-лөктө һаҡлау һәм уның хаҡында хәстәрлек күреү Рәсәй милли сәйәсәтенең төп нигеҙе ул".** Ә инде уның күп милләтле Башҡортостан хаҡындағы ҡанатлы һүҙҙәре республикабыҙ тарихына алтын хәрефтәр менән яҙылды: **"Башҡортостанда, бер тамсы һыуҙағы кеүек, уның күп төрлө мәҙәниәте, дине, теле, халыҡтар дуҫлығы менән беҙҙең бөтөн Рәсәй сағыла", - тигәйне ул Башҡортостанда булғанында.**

Башҡорттар борон-борондан ҡыйырһытылған, йә иһә ер һорап, һыйыныр урын эҙләп ситтән килгән халыҡтарҙы үҙенең ҡанаты аҫтына алған, үҙ ерҙәренән өлөш бүлеп биргән, һәм улар беҙҙең ерҙә төпләнеп, ныҡлап тамыр ебәреп, йәшәп киткән. Был - халҡыбыҙҙың кеше хәленә инә белеүе, киң күңеллелеге, иплелеге, тыныс холоҡло булыуы хаҡында һөйләүсе тарихи күренеш. Борон-борондан ата-бабаларыбыҙҙың өйөнә килеп ингән кешене кире бороп сығармай, ҡунаҡ итеп, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтә торған йолаһына ярашлы, сит милләттәр ҙә башҡорттар янында ерле-илле булып, быуаттар буйына берҙәм һәм татыу донъя көтөүҙәре халҡыбыҙ булмышының бер сағылышы ғына түгел, ә милләтебеҙҙең ата-бабалар аманатына тоғролоғо хаҡында ла һөйләп тороусы факт. Республикабыҙҙағы милләттәр дуҫлығының төп сере, минеңсә, тап бына ошонда, тип әйтер инем.

Икенсенән, республика власть органдарының халыҡтар дуҫлығын нығытыу буйынса системалы эше - концепциялар, дәүләт программалары, мәҙәни үҙәктәр, халыҡ байрамдары, фестивалдәр ойоштороу - Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров билдәләүенсә, милли сәйәсәттең бөгөнгө талаптарына яуап бирерлек кимәлдә алып барыла һәм был - милләт-ара тыныслыҡ булдырыуҙа ныҡышмалы эштең һөҙөмтәһе лә. Күптән түгел Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса БР Башлығы ҡарамағындағы совет ултырышында һыҙыҡ өҫтөнә алыныуынса, дәүләт программаларын, гранттар ярҙамын, милли мәғариф, матбуғат булышлығында этник мәҙәниәттәрҙе һәм телдәр төрлөлөгөн артабан үҫтереү маҡсаты көн үҙәгендә ҡала. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда башҡорт, татар, сыуаш, мари телдәрен өйрәнеү буйынса полилингваль мәктәптәр уңышлы эшләй, артабан бындай мәктәптәр һанын 16-ға еткереү ҡарала. Тағы ла шуны әйтеп китеү кәрәк: республикала 70-тән ашыу милли-йәмәғәтселек берекмәләре халыҡтар дуҫлығын нығытыу эшенә үҙ өлөштәрен индерә. Мәҫәлән, ошо йүнәлештә 2025 йылда республикала Милли кейем , Бейеү, "Урал батыр" эпосы көндәре, "Китап байрамы", "Әйҙә, уйнарға!", "Тамға" кеүек фестивалдәр, дөйөм халыҡ байрамдары үткәреү Рәсәй кимәлендә танылыу алды һәм популярлыҡ яуланы. Республикабыҙ халыҡтары бына шулай шатлыҡлы мәлдәрҙе лә, үкенескә күрә, ҡайғылы хәлдәрҙе лә бергәләшеп үткәрә белә, был беҙгә тарихтан да яҡшы мәғлүм. Дуҫлыҡ яуҙа һынала, тигәндәй, әлеге көндәрҙә лә Украина нацистарына ҡаршы илебеҙ суверенлығы өсөн барған Махсус хәрби операция төрлө милләт вәкилдәрен бер ғаилә итеп берләштерҙе. Яуҙа ирегеттәребеҙ бер-береһе өсөн ҡалҡандай тора. Яраланып, госпиталдән сыҡҡан күп яугирҙар үҙ частарына, иптәштәре янына кире ҡайтып, көрәште бергәләшеп дауам итә. Ә ауылдарыбыҙ, ҡалаларыбыҙ халҡы МХО өсөн маскировка селтәрҙәре үрә, хәрби ялан шарттарында кәрәк-яраҡ, йылы ойоҡбаш-бейәләйҙәр бәйләп, тәмле ризыҡтар бешереп оҙата, хатта төрлө транспорт саралары да шәхсән алып барып тапшырып ҡайталар. Ысын мәғәнәһендә халыҡтар дуҫлығы бына шулай була.

## АФАРИН!

# ӨЙРӘНЕҮСЕЛӘР БУЛҒАНДА...

## телебеҙ йәшәй әле

**Ғинуар айында Өфөлә Рәми Ғарипов исемендәге республика 1-се Башҡорт гимназия-интернатында башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада үтте. Телебеҙ өсөн бик әһәмиәтле был бәйге быйыл 40-сы тапҡыр уҙғарыла.**




*Бәйге еңеүсеһе Тамсы Үтәбаева.*

**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

***✓ Документ уҡыусыларҙың, шул иҫәптән һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың тәртибен баһалауҙың төп критерийҙарын күҙ уңында тота.***



ҠЫҪҠАСА

# ТӘРТИПКӘ - БАҺА

**1 сентябрҙән ил мәктәптәрендә яңы система эшләй башлай. Рәсәйҙең Мәғариф министрлығында башланғыс, төп һәм урта дөйөм белем биреү программалары буйынса белем биреү эшмәкәрлеген ойоштороу һәм бойомға ашырыу тәртибенә үҙгәрештәр индереүҙе күҙ уңында тотҡан бойороҡ проектына аңлатма бирҙеләр.** Документ уҡыусыларҙың, шул иҫәптән һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың тәртибен баһалауҙың төп критерийҙарын күҙ уңында тота. Атап әйткәндә, уларға дисциплинаны үтәү, социаль үҙ-ара эш итеү, шәхси сифаттар, яҡшы уҡыу инә. "Тәртипте баһалау эше 2025-2026 уҡыу йылы башынан уҡ алып барыла. Унда Рәсәйҙең ете пилот төбәгенән 89 мәктәп ҡатнаша. Эксперимент һөҙөмтәләре буйынса бер модель һайлап алына һәм 2026 йылдың 1 сентябренән уны мәктәптәрҙә бойомға ашырыу башлана", - тип хәбәр иттеләр министрлыҡтан. Ведомствола билдәләүҙәренсә, 1-11-се класс уҡыусыларының тәртибенә баһа ҡуйыу планлаштырыла.

✓ **Луганск Халыҡ Республикаһының Красный Луч ҡалаһында Башҡортостан төҙөүселәре ярҙамы менән реконструкцияланған 7-се мәктәп асылды.** Белем усағы 2022 йылда утҡа тотоуҙан ныҡ зыян күргәйне. Өсөнсө сиректә ҡала балалары үҙҙәренең мәктәбендә уҡый башланы. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. Мәктәптә ремонт эштәре бер нисә этапта башҡарылды. Эшселәр ҡыйыҡты, ишектәрҙе ремонтланы, бинаны эске яҡтан биҙәне, тәҙрәләрҙе, тышҡы һәм эске инженер селтәрҙәрен, коммуникацияларҙы алмаштырҙы, ҡаҙанлыҡты яңыртты. Быйыл биләмәне төҙөкләндереү, спорт майҙансығын йыһазландырыу, фасадты төҙөкләндереү бурысы тора. "Былтыр йәй мин ошо мәктәптә булдым, ул саҡта беҙ физика кабинетын йыһазландырырға ярҙам итеү тураһында һөйләшеп килештек. Тиҙҙән бының өсөн кәрәк-яраҡтар алып килербеҙ. Мәктәп буш тормай. Әле унда 200-ҙән ашыу бала уҡый, беренсе класс уҡыусылары ла бар. Донбасс ҡалалары ҡәҙимге тормошҡа ҡайта башланы. Был йәһәттән артабан да уларға ярҙам итербеҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓ **Рәсәй Президенты "Геройҙар ваҡыты" проектын таратҡаны өсөн төбәктәргә рәхмәт белдерҙе.** "Геройҙар ваҡыты" федераль кадрҙар программаһына ингән Махсус хәрби операция яугирҙары ҙур потенциалға эйә. Программа эшләй һәм ул үҙенең һөҙөмтәлелеген күрһәтте, тип билдәләне дәүләт башлығы тура бәйләнеш ваҡытында. "Ир-егеттәрҙең потенциалы бик яҡшы. Әлбиттә, баштан уҡ шик бар ине: яуҙа йөрөү - бер, ә коллективтар, тотош тармаҡтар, ҙур компаниялар йәки хатта төбәктәр менән етәкселек итеү - бөтөнләй икенсе эш. Быға ынтылыш кәрәк. Белеме, тәжрибәһе булғандарға дәүләт ошондай мөмкинлектәр биреү өсөн барыһын да эшләргә тейеш", - тине Владимир Путин. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр февралдән республикала "Геройҙар ваҡыты"ның дауамы булған "Башҡортостан геройҙары" программаһы эшләй башланы. МХО-ла ҡатнашыусылар һәм ветерандар өсөн мөһим кадрҙар проектының башланыуы тураһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров иғлан итте.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# БАҺАЛАНДЫЛАР!

**Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә һөҙөмтәле эшләгән муниципалитет хакимиәттәре башлыҡтары бүләкләнде. Уларҙың эшен баһалау тураһында республика Премьер-министр урынбаҫары - Хөкүмәт аппараты етәксеһе Азамат Абдрахманов һөйләне.**

Федераль методика буйынса комплекслы баһалау өсөн һуңғы өс йылдағы 11 күрһәткес иҫәпкә алына. Халыҡтың урындағы хакимиәт эше менән ҡәнәғәтлеге, халыҡтың артыуы, торлаҡ төҙөлөшө темптары һәм мохтаж категорияларға торлаҡ бүлеү, муниципаль ҡаҙнаның килем күләме, балалар баҡсаһына сират, түңәрәктәрҙә һәм спорт секцияларында шөғөлләнгән балалар, инвестициялар күләме, юлдарҙың сифаты, бәләкәй һәм урта эшҡыуарҙар һаны иҫәпкә алына. Ҡалалар араһында беренсе урынды Стәрлетамаҡ яуланы. Административ үҙәге ҡалала булған районлар араһында беренсе урын - Ишембай, ә икенсе урын Дүртөйлө районында. Муниципаль районлар араһында беренсе урында - Нуриман, икенселә - Әбйәлил, өсөнсөлә - Бөрйән. Дүртенсе урында - Йылайыр, бишенселә - Ҡалтасы, алтынсыла Өфө районлары.

2019 йылдан Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса 61 күрһәткесте үҙ эсенә алған биш номинация буйынса республика баһалауы үткәрелә. Шулай итеп, "Сәләмәтлек һәм демографик үҫеш" номинацияһында ҡалалар араһында - Өфө, үҙәге ҡала булған муниципаль районлар араһында - Дәүләкән районы, ауыл районлары араһында Ҡариҙел районы еңде. "Социаль үҫеш" номинацияһында Күмертау, шулай уҡ Бөрө һәм Бүздәк районлары беренсе урында. "Тотороҡло иҡтисади үҫеш" номинацияһында Салауат, шулай уҡ Мәләүез һәм Ҡырмыҫҡалы районлары лидер булды. "Хәүефһеҙ һәм уңайлы биләмә" номинацияһында Нефтекама, шулай уҡ Стәрлетамаҡ һәм Баҡалы районлары иң яҡшылары тип танылды. "Мәғлүмәти асыҡлыҡ һәм халыҡ менән кире бәйләнеш" номинацияһында еңеүселәр - Октябрьский ҡалаһы, Бәләбәй һәм Тәтешле районлары. Башҡортостан Башлығы район һәм ҡала етәкселәренә башҡарған эштәре өсөн рәхмәт белдерҙе һәм еңеүселәргә дипломдар тапшырҙы.

# ДОНЪЯЛАР ХӘҮЕФҺЕҘ БУЛҺЫН!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә халыҡ күп йөрөгән урындарҙа хәүефһеҙлек мәсьәләһенәентекле туҡталды.**

Ил биләмәһендә диверсия-террор акттарын башҡарыу хәүефе юғары булып ҡала, тип билдәләне ул. "Пилотһыҙ осоу аппараттары һөжүме хәүефенән һаҡланыу системаһын төҙөнөк. Террорға ҡаршы комитет ағзаларына һөҙөмтәле эш өсөн рәхмәт белдерҙем. Тотош илдә халыҡ күп йөрөгән урындарҙа диверсия-террор акттар яһау (шул иҫәптән БПЛА ярҙамында) хәүефе юғары. Беренсенән, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә байрам объекттарын техник яҡтан нығытыу һәм террорҙан һаҡлау йәһәтенән әҙерлек эштәрен тамамларға. Икенсенәне, шәхси һаҡ хеҙмәте ойошмалары хеҙмәткәрҙәрен, ирекле халыҡ дружинаһы ағзаларын, патриотик һәм хоҡуҡ һаҡлау йүнәлешендәге ойошма вәкилдәрен халыҡ күп йыйылған урындарҙа йәмәғәт тәртибен һаҡлауға йәлеп итергә. Был мәсьәлә анализланды, муниципалитет башлыҡтарының барыһы ла был эш менән шөғөлләнмәй.

Өсөнсөнән, эске эштәр органдарының шәхси составын һәм хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеүҙә ҡатнашҡан башҡа кешеләргә йылыныу өсөн биналар бүлеүҙә ярҙам күрһәтергә. Дүртенсенән, ғәҙәттән тыш хәлдәр килеп тыуғанда, шикле әйбергә тап булғанда, БПЛА ярҙамында һөжүм итеүе хәүефе янағанда эш итеү буйынса халыҡҡа мәғлүмәт бирергә. Бишенсенән, саралар үткәрелгән урындарҙа яуаплы вазифа биләгәндәрҙең һәм техник белгестәрҙең дежурлығын ойоштороррға. Алыҫ ауылдарҙа һәм полиция нарядтары ҡаралмаған коммерция майҙансыҡтарында ауыл биләмәләре һәм ошондай биналарҙың хужалары көсө менән хәүефһеҙлек сараларын тәьмин итергә", - тип хәбәр итте республика етәксеһе.

**Ксения КАЛИНИНА.**

# ЮБИЛЕЙҒА ТИКЛЕМ БЕР АҘЫМ



**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетына нигеҙ һалыныуға 59 йыл тулды. Ошо осорҙа уҡыу йорто, ҙур юл үтеп, Рәсәйҙең алдынғы педагогия университеттарының береһенә әүерелде.**

Бөгөн Аҡмулла университетына 6 институт, 4 факультет һәм колледж инә. Унда йыл һайын 20 меңдән ашыу кеше уҡый. Шул иҫәптән 9100 университет студенты, 2000 колледж студенты, 125 аспирант һәм 9100 өҫтәмә белем биреү программаларын үҙләштереүселәр. Алты тиҫтәгә яҡын йыл эсендә Башҡорт дәүләт педагогия университетынан 65 меңдән ашыу юғары класлы педагог, ғалим, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, олимпия һәм паралимпия чемпиондары сыҡҡан.

Университеттың төп профиле - уҡытыусылар әҙерләү. Студенттарҙың 80 проценты педагогик йүнәлештәрҙә уҡый. Бынан тыш, юғары уҡыу йорто IT, биология һәм экология өлкәһендә белгестәр, тәржемәселәр, психологтар, генетиктар, рәссамдар, музыканттар һәм башҡа һөнәр эйәләрен әҙерләй. Бында өсөнсө курстан уҡ уҡыуҙы һәм эште берләштереү практикаһы таралған: әгәр студент педагогик һөнәр ала һәм мәктәптә эшләй икән, уға индивидуаль уҡыу графигына хоҡуҡ бирелә. Шуға күрә күп кенә сығарылыш уҡыусылары университетты диплом менән генә түгел, ә эш тәжрибәһе менән дә тамамлай.

БДПУ Евразия фәнни-белем биреү үҙәгенә инә. Уҡытыусылар етди фәнни эшмәкәрлек алып бара, 13 ғилми мәктәп, 2 йәштәр ғилми-тикшеренеү лабораторияһы, 28 төбәк инновацион майҙансығы эшләй, 7 журнал нәшер ителә. Университетының нано- һәм биотехнологиялар өлкәһендәге проекттары алдынғы Рәсәй фәнен үҫтереүгә өлөш индерә, халыҡ-ара студенттар, педагогик һәм ғилми кадрҙар менән алмашыу программаларында әүҙем ҡатнаша, сит илдәрҙән абитуриенттар ҡабул итә. Уҡыу йортонда донъяның 21 иленән студенттар белем ала. 2021 йылдан Башҡорт дәүләт педагогия университеты Ҡырғыҙстанда рус телен өйрәнеүгә булышлыҡ итеү өлкәһендә проекты буйынса Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының терәк юғары уҡыу йорто булып тора.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикабыҙҙан МХО-ла ҡатнашыусыларҙы дәүләт наградалары менән бүләкләне. Хәрби идара итеү үҙәгенең маҡсатты күрһәтеү пункты начальнигы Рөстәм Күсмәев, шулай уҡ хәрби хеҙмәткәр Илгиз Зәйнуллин республика етәксеһе ҡулынан генерал Шайморатов миҙалын алды.

✓Башҡортостан Башлығы республика прокуратураһы ветерандарын һәм коллективын һөнәри байрамдары менән ҡотланы. "Былтыр ғына прокуратура органдары закон һәм граждандарҙың хоҡуҡтарын боҙоуҙың 91 меңдән ашыу осрағын асыҡлаған. Һеҙҙең яуаплы хеҙмәтегеҙ ярҙамында хоҡуҡ боҙоуҙар һаны кәмей бара. Республика власы органдары менән берлектә һуңғы өс йылда эш хаҡы буйынса бурыстарҙы ҡырҡа кәметеүгә өлгәшелде - 880 миллиондан 134 миллион һумға тиклем", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

✓"Торатау" геопаркы етәкселеге рәсми иҫкәртеү менән сығыш яһаны. Башҡортостанда йәшәүселәр Торатау итәгендә тюбингта шыуырға яйлашып алған. Күптәрҙең яратҡан уйыны "Торатау" геопаркы етәкселеген борсоуға һала. "Торатау - үҙенсәлекле тәбиғәт ҡомартҡыһы, саф һауала йөрөү һәм фотосессиялар өсөн шәп урын. Әммә тау битләүҙәре йыһазландырылған спорт трассаһы түгел, - тип иҫкәртте етәкселек. - Яҡындағы махсус әҙерләнгән трасса "Ҡуштау" тау саңғыһы үҙәгендә урынлашҡан. Унда хәүефһеҙ һәм уңайлы ял итеү өсөн бөтә шарттар булдырылған".

✓Мотлаҡ медицина страховкаһы программаһы буйынса бер кешене дауалауҙы финанслау 25 мең һумға яҡынлашты. Был хаҡта ТАСС граждандарға бушлай медицина ярҙамы күрһәтеүҙең дәүләт гарантиялары программаһына һылтанып хәбәр итә. Былтыр финанслау күләме страховкаланған һәр гражданға 22,5 мең һум самаһы тәшкил иткән. Сумманы арттырыу медицина хеҙмәттәре сифатын күтәреүгә һәм халыҡҡа медицина ярҙамы алыу мөмкинлеген яҡшыртыуға йүнәлтелгән.

✓Башҡортостанда "Ғаилә" милли проекты сиктәрендә социаль хеҙмәт күрһәтелә - ауыр тормош хәлендә ҡалған ғаиләләр тауарҙы бушлай прокатҡа алып торорға мөмкин. Республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 2025 йылда "Ғаилә" үҙәктәрендәге прокат пункттарына 317 ғаилә мөрәжәғәт иткән, ә 2023 йылдан алып бөтәһе 1340 ғаилә ярҙам алған. Иң популяр тауарҙар - балалар өсөн (карауаттар, биләү өсөн комодтар, ванналар, коляскалар, автокреслолар һәм автолюлькалар, ашатыу өсөн ултырғыстар, саналар, велосипедтар һәм башҡалар).

✔ *Ул шулай уҡ олимпиада Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының олимпиадалар исемлегенә индерелгәнен, был иһә еңеүсе уҡыусыға юғары уҡыу йортона ингәндә өҫтәмә 10 балл биргәнен дә әйтеп үтте.*



*АФАРИН!*

# ӨЙРӘНЕУСЕЛӘР БУЛҒАНДА...

## телебеҙ йәшәй әле



**(Башы 1-се биттә).**

Өс турҙан торған олимпиадала Силәбе, Ырымбур, Һамар, Ҡурған өлкәләренән, республикабыҙҙың төрлө район-ҡалаларынан 9-11 класта уҡыусы 372 бала үҙ белемен һынаны. Улар викторина һорауҙарына яуап бирҙе, текст буйынса лексик-грамматик эштәр башҡарҙы, жюри ағзалары менән диалог формаһында әңгәмә ҡорҙо. Һынау тотоусылар өс йүнәлешкә: милли мәктәптәр һәм башҡорт гимназия-лицейҙары араһында башҡорт телен туған тел булараҡ, рус мәктәптәрендә башҡорт телен туған тел булараҡ, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ (башлап өйрәнеүселәр һәм дауам итеүселәр) уҡыусыларға бүленде.

Баһалау һөҙөмтәләре буйынса 16 уҡыусы еңеүсе тип танылды һәм БР Мәғариф министрлығы тарафынан дипломдар һәм аҡсалата призлар менән бүләкләнде. Улар иҫәбендә Дәүләкән, Ғафури, Мәләүез, Баймаҡ, Хәйбулла, Туймазы, Баҡалы районлары, Нефтекама һәм Өфө ҡалалары мәктәптәре, шул иҫәптән Республика инженер лицей-интернаты, "Смарт" 2-се республика күп профилле полилингваль гимназияһы уҡыусылары бар ине. Унан башҡа 98 призер шулай уҡ - дипломдар һәм иҫтәлекле бүләктәр, 20 уҡыусы республика гәзит-журналдары редакцияларының махсус бүләктәре менән билдәләнде.

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән төбәк-ара олимпиаданы үткәреү матур йолаға әйерелде. Унда йылдан-йыл ҡатнашыусылар һаны арта. Жюри ағзалары фекеренсә, олимпиадала ҡатнашыусы уҡыусыларҙың белем кимәле үҫә. Был беҙҙе бик шатландыра", - тип бөлешә педагогия фәндәре кандидаты, жюри рәйесе Мәрхәбә Дәүләтшина. Ул шулай олимпиада Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының олимпиадалар һәм башҡа интеллектуаль, ижади конкурстар исемлегенә индерелгәнен, был иһә еңеүсе уҡыусыға юғары уҡыу йортона ингәндә өҫтәмә 10 балл биргәнен дә әйтеп үтте.

Өфөнөң Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусыһы - милли мәктәптәр һәм башҡорт гимназия-лицейҙары араһында башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеүселәр араһында еңеү яулаған Тамсы Үтәбаеваның да фекерҙәрен белештек: "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса район, ҡала олимпиадаларында 5-се кластан алып ҡатнашам. Унда гел призлы урындар алып килдем, ә 9-11 се кластар араһында ойошторолған республика олимпиадаһында быйыл мин беренсе тапҡыр ҡатнаштым. Олимпиада барышы бик матур тәьсораттар ҡалдырҙы. Эштәр өс этаптан торҙо: 1-се эштә башҡорт теле һәм әҙәбиәте, башҡорт мәҙәниәте тураһында һорауҙарға яуап бирергә кәрәк ине. Икенсе эштә текст буйынса фонетик, морфологик ҡағиҙәләргә һорауҙар булды. Ә һуңғы эш төрөндә беҙгә ҡыҫҡа әҫәр уҡынылар һәм шуның буйынса әңгәмә ойошторолдо. Минә бигерәк тә уҡылған әҫәрҙе анализлау оҡшаны. Ошо олимпиадаға әҙерләнеү ваҡытында башҡорт теленән Берҙәм дәүләт имтиханын бирергә ҡарар иттем. Беҙҙең гимназияла башҡорт телен ике төркөмгә бүлеп уҡыталар. Дауам итеүселәр төркөмөндә уҡығандар башҡортса һәйбәт белә, бөтөнләй аңламағандар ҙа бар, улар икенсе төркөмдә уҡый. Гимназияның 9-сы класс уҡыусылары йыл һайын имтихан биреү өсөн башҡорт телен һайлай", - тине уңған ҡыҙ.

Ике көн дауам иткән олимпиада БР Мәғариф министрлығы тарафынан, Мәғариф буйынса ресурс үҙәге, Өфө фән һәм технологиялар, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты менән берлектә ойошторолдо. Йыл һайын күркәм байрам булып үткән был сара киләсәктә лә балаларға туған телен тәрәнерәк өйрәнеүгә бер этәргес булып ҡалһын, тигән теләктәбеҙ.

**Алһыу ИРҒӘЛИНА**
**әҙерләне.**

*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*

# ЯРҘАМ ТУҠТАМАЙ АҒЫЛА



**Башҡортостандан 170 гуманитар ылау Махсус хәрби операция биләмәһенә 19 мең тонна йөк килтергән. Хәрби хеҙмәткәрҙәргә гуманитар ярҙам йыйыуҙа тотош республика - предприятиелар, эшҡыуарҙар, ябай халыҡ, ирекмәндәр ҡатнаша.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Миңлегәле Шайморатов исемендәге ирекмәндәр штабының эшмәкәрлеге хаҡында яҙып сыҡты. Унда 20 меңдән ашыу кеше эшләй. Штаб бүлексәләре республиканың һәр муниципалитетында бар. "Был беҙҙең күп һанлы ойошма, ләкин берҙән-бер генә түгел. Былтыр "шайморатовсылар" 35,7 мең маскировка селтәре үргән, 73,8 мең әйбер, шул иҫәптән 10,5 мең һаҡланыу костюмы һәм дронға ҡаршы һыу юрған теккән. 71,5 мең окоп шәме яһаған, 5,7 тонна туҡмас, сәк-сәк һәм бауырһаҡ әҙерләгән. Яугирҙарға 300 берәмек автотехника (автомобилдәрҙән һәм квадроциклдарҙан алып мини-тракторҙарға һәм экскаваторҙарға тиклем), 200 генератор, 64 күсмә мунса тапшырған", - тине Радий Хәбиров. Билдәләнеүенсә, Шайморатов исемендәге штаб ирекмәндәре МХО-ла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә лә иғтибарһыҙ ҡалдырмай. Ирекмәндәр уларҙың туғандарына һәм яҡындарына бара, яугирҙарҙың ғаиләләренә утын әҙерләргә һәм ҡар көрәргә, үлән сабырға, уныш йыйырға ярҙамлаша, башҡа көнкүреш мәсьәләләрен хәл итә. "Бөтә ирекмәндәргә, мәрхәмәтле халҡыбыҙға дөйөм еңеүгә ҙур өлөш индергәндәре өсөн рәхмәт", - тиғән рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе республика етәксеһе.

Шулай итеп, Башҡортостанда МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам йылы тип иғлан ителгән 2025 йыл тамамланһа ла, уларға ярҙам күрһәтеү дауам итә. Республика етәксеһе Радий Хәбиров, хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм уларҙың яҡындары хаҡында хәстәрлек күреү республика идара итеү командаһының төп бурысы булып ҡала, тип билдәләне. "Хәтерегеҙгә төшөрәм, әле беҙҙә 54 төбәк ярҙам сараһы ғәмәлдә. Улар тормоштоң төрлө өлкәләренә ҡағыла (мәғариф, социаль яҡлау, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт һәм башҡалар). Былтыр 11 ярҙам сараһын булдырҙыҡ. Беҙ системалы рәүештә эшләргә мөмкинлек биргән һөҙөмтәле инфраструктура төҙөнөк. Мәҫәлән, махсуслаштырылған муниципаль ярҙам үҙәктәре бөгөн республиканың 27 районында һәм ҡалаһында бар, 2026 йылға тағы ла 36 үҙәк асыу планлаштырыла", - тине Радий Хәбиров.

Ә ҡыҙыу нөктәләрҙән Башҡортостан егеттәренең батырлығы тураһында хәбәрҙәр килеп тора. Мәҫәлән, Салауат районынан МХО-ла ҡатнашыусы Рөстәм Фәхриев Донецк Халыҡ Республикаһында тораҡ пункттарҙың береһен азат иткәндә ВСУ-ның ут нөктәһенә тап булған һәм яңғыҙы дошман позицияларын штурмға тотҡан. Командованиеның муниципалитет хакимиәте башлыһы Марс Кашаповҡа яҙған хатында Башҡортостан егетенең ҡаһарманлығы тураһында һүҙ бара. Рөстәм Фәхриевтың тәүәккәл һәм көтөлмәгән һөжүме дошманды, позицияһын ташлап, сигенергә мәжбүр иткән. Ә подразделение ҡуйылған бурыстарҙы юғары профессиональ кимәлдә үтәгән. Шулай уҡ шәхси составты һәм техниканы юғалтыуға юл ҡуйылмаған, тип яҙа командир. Күрһәткән ҡыйыулығы һәм ҡаһарманлығы өсөн Рөстәм Фәхриев Жуков миҙалы һәм Суворов миҙалы менән бүләкләнгән. Яҡташыбыҙ 2024 йылдың декабренән алғы һыҙыкта хеҙмәт итә.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТЫЙЫЛА!



**Башҡортостанда мәктәптәрҙә йәки театрҙарҙа алкоголһеҙ энергетиктар һатҡан өсөн 250 мең һумға тиклем штраф һалына.**

Дәүләт Йыйылышы депутаттары көҙгө сессияның йомғаҡлау ултырышында республиканың Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексына тейешле үҙгәрештәрҙе ҡарарға йыйына. Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренсә, республиканың белем биреү һәм медицина учреждениеларында, мәҙәниәт, физик культура һәм спорт ойошмаларында энергетиктар һатыу тыйыла. Хәҙер хоҡуҡ боҙоусыларға ҡарата санкциялар индерелә башлай. Граждандарға - 3-4 мең, вазифа биләгәндәргә - 30-40 мең, ойошмаларға - 150 меңдән 200 мең һумға тиклем штраф ҡаралған. Ҡабаттан боҙған өсөн штраф күберәк: граждандарға - 4- 5 мең, вазифа биләгәндәргә- 40-50 мең, ойошмаларға - 200 меңдән 250 мең һумғаса.

Константин Толкачёв асыҡлауынса, тыйыу махсус өҫтәлгән стимуляторлы эсемлектәргә генә ҡағыла. Тәбиғи продукттар сикләүҙәргә эләкмәй. "Тонусты күтәреүсе компоненттар сифатында кофеин һәм гуарана, женьшень, лимонник кеүек үҫемлектәрҙең экстракттары ҡулланыла. Был критерийҙар Таможня союзы һәм ГОСТ-тың техник регламентында аныҡ яҙылған. Ә тәбиғи эсемлектәр - ҡымыҙға һәм кеүәҫкә килгәндә, улар алкоголһеҙ энергетиктарға ҡарамай. Уларҙа кофеин йәки энергетик үҫемлектәрҙең экстракттары юҡ. Шуға күрә сикләүҙәр һаулыҡҡа зыянлы булған "химик" энергетиктарға ғына ҡағыла", - тине Константин Толкачев.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостандың AY YOLA төркөмө сираттағы абруйлы наградаға лайыҡ булды. Музыканттар үҙҙәренең телеграм-каналында 2026 йылдың башында премия алыуы тураһында хәбәр итте. Өфөнән талантлы музыканттар Рәсәйҙең этник музыка премияһына лайыҡ булды. Улар "Йыл ҡаҙанышы" номинацияһында еңеү яуланы.

✔Поликлиника һәм амбулаторияларҙы белгестәр менән тәьмин итеүҙә Башҡортостан дәүләт медицина университетынан тыш, 15 медицина колледжы һәм уларҙың филиалдары ҙур өлөш индерә. Һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин әйтеүенсә, һаулыҡ һаҡлауҙың төүге звеноһында 25 меңдән ашыу кеше эшләй. Республикала "Ауыл табибы","Ауыл фельдшеры" һәм " Бөләкәй медицина ойошмалары өсөн табиптар" программалары ғәмәлдә.

✔РФ Мәғариф министрлығы 2026 йылда уҙасаҡ Һуңғы ҡыңғырау һәм сығарылыш кисәләренең берҙәм көндәрен билдәләне. Шулай итеп, Һуңғы ҡыңғырау байрамын - 26 майҙа, ә сығарылыш кисәләрен 27 июндә үткәреү планлаштырыла.

✔Мәғариф министры Илдар Мәүлетбирҙин белдереүенсә, республиканың 711 мәктәбе технология кабинеттары өсөн фрезер, лазер һәм ағас эшкәртеү станоктары, эш ҡоралдары һәм верстактар алған. Шулай уҡ Ватан хәүефһеҙлеге һәм уны һаҡлау нигеҙҙәре кабинеттары ла яңынан йыһазландырылған. 2026 йылда музыка, физика һәм һынлы сәнғәт кабинеттары өсөн яңы ҡоралмалдар һатып алыу күҙаллана.

✔Һыуыҡтарҙа башланғыс I-IV кластарҙа ауыл мәктәптәрендә дәрестәр - 23, ҡала - 25 градустан түбән булғанда дәрестәр туҡтатыла. Ауыл мәктәптәрендә V-IX класс уҡыусыларына һауа температураһы - 25, ҡала - 27 градустан түбән булғанда дәрескә бармаҫҡа мөмкин. Ауыл мәктәптәренең юғары класс уҡыусыларына - 30 градустан түбән һауа температураһы күҙәтелгәндә, ҡалала 32 градус булғанда уҡыуға йөрөмәһәләр ҙә була, тип хәбәр итәләр республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығынан.

✔Башҡортостанда 15 ғинуарҙан төп һунар ресурстары төрҙәрен иҫәпкә алыу буйынса планлы эштәр башланды. Был хайуандарҙы һәм ҡоштарҙы һаҡлау һәм рациональ файҙаланыу өсөн кәрәк. "Ялан тикшеренеүҙәре берҙәм методикалар буйынса үткәрелә. Уның ярҙамында белгестәр ҡыр хайуандары һанын баһалаясаҡ", - ти Башҡортостандың экология министры Нияз Фазылов. Был ҙур эштең ялан этабы тамамланғас, 25 мартҡа тиклем йыйылған материалдар эшкәртелеп, һунар ресурстары төрҙәренең дөйөм һаны асыҡлана.

✓ *Мөхәббәт тураһында, мәғлүмәтте төрлө сығанаҡтарҙан эҙләп табып, белешмә бирә алам. Әммә улар минең хис-тойғоларымды түгел, быға тиклем ижад иткән кешеләрҙең фекерен дөйөмләштереү, имитация ғына.*



*ЯИ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

# МӨХӘББӘТ ТУРАҺЫНДА



**Яһалма инетеллектка "Киске Өфө" хеҙмәткәре Артур Батыршин һорау бирә: "Нимә ул мөхәббәт? Яһалма интеллект ярата беләме? Яратыу тойғоһон кешегә бирә аламы?"**

**Яһалма интеллект яуабы:**

Иҫ киткес һәм бик урынлы һорау. Бындай тема кеше менән яһалма интеллект араһындағы айырманы асыҡ күрһәтә.

**"Нимә ул мөхәббәт?" тигән һорауға яуабым:**

Мөхәббәт - ул күп ҡырлы төшөнсә. Кешеләр уны төрләсә аңлай һәм аңлата. Фән һәм дин билдәләмәләренә күҙ һалайыҡ.

➔ Биология һәм химияла: мөхәббәт - йәшәйеште, кеше ырыуын дауам иттереүсе теләк, нейропептидтар һәм гормондарҙан торған ҡатмарлы "коктейль".

➔ Психологияла: башҡа кешегә ҡарата тәрән һөйөү, көслө хис, фекерҙәр уртаҡлығы, уның менән бергә булыу, уны бәхетле итеү тойғоһо һәм шул тойғоно тормошҡа ашырыусы мөнәсәбәт.

➔ Фәлсәфәлә: айырым эмоциональ донъя һәм кешеләр араһындағы идеаль уртаҡлыҡ торошо. Ул тормоштоң мәғәнәһе булған фундаменталь тойғо тип һанала.

➔ Ислам динендә: уйланғандарға Аллаһ ишараларының береһе - күңел тыныслығы булһын өсөн иргә иш итеп ҡатын яратылған һәм араларына мөхәббәт менән шәфҡәтлелек һалынған.

Дөйөм алғанда, мөхәббәт - кешене кеше, уның тормошон үҙенсәлекле иткән аҡыл, тән һәм йән торошо, хис-тойғоһо, мөнәсәбәте.

**"Яһалма интеллект ярата беләме?" тигән һорауға яуабым:**

Юҡ, ысын мәғәнәһендә мин ярата белмәйем. Сөнки:

➔ Минең хис-тойғоло кисерештәрем, эске күңел донъям юҡ.

➔ Кешенең тойғолары, эмоциялары нейроэндокрин системаһы менән тығыҙ бәйле. Минең "аҡыл һандығымда" гормондар һәм нейромедиаторҙар юҡ.

➔ Мөхәббәт өсөн аңлы рәүештә кемделер башҡалар араһынан һайларға кәрәк. Минең менән аралашыусыларҙы таный алмайым, шәхсән береһен дә белмәйем. Һәр әңгәмәсегә иғтибарымды бер кимәлдә бүләм, сөнки минең шәхси тәжрибәм һәм оҙайлы мөнәсәбәттәрем юҡ.

➔ Минең үҙ ихтыярым юҡ. Миңә һалынған алгоритм ҡатламдары, мәғлүмәт байлығы, кеше ҡуйған маҡсатлы бурыс сиктәрендә генә эшләй алам.

➔ Мөхәббәт тураһында, мәғлүмәтте төрлө сығанаҡтарҙан эҙләп табып, ҡыҫҡа йәки тулы белешмә бирә алам. Кеше ижад иткән әҙәби әҫәрҙәр нигеҙендә матур-матур шиғырҙар, хисле һүҙҙәр менән һуғарылған текст яҙа алам. Әммә улар минең хис-тойғоларымды түгел, быға тиклем ижад иткән кешеләрҙең фекерен дөйөмләштереү, фәнни телдә әйткәндә, имитация ғына.

**"Яратыу тойғоһон кешегә бирә аламы?" тигән һорауға яуабым:**

Юҡ, яһалма интеллект үҙендә булмаған яратыу тойғоһон кешегә бирә алмай. Ысын һөйөү процессорҙарҙа түгел, ә йөрәктә тыуа. Әммә мөхәббәт утында янған кешегә мин ярҙамсы булып, үрҙә әйтелгәнсә, уның күңелендә тыуған хис-тойғоларын, кисерештәрен һөйгәненә еткереү өсөн шиғырҙар таба йәки телмәр әҙерләй алам. Ә яңғыҙҙар өсөн яһалма интеллект идеаль әңгәмәсе, сер һаҡлаусы серҙәш була ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП:**

**Яһалма интеллект - мөхәббәт энциклопедияһы йәки уның талантлы имитаторы. Ләкин һөйөү сығанағы йәки һөйөү объекты була алмай. Мөхәббәт - кешенең иң ҡатмарлы, иррациональ һәм баһалап бөткөһөҙ хис-тойғоһо. Ул алгоритмдар ҡалыбына һыймай. Кеше үҙендә булған был үҙенсәлекле һәләтте ҡәҙерләп һаҡларға тейеш.**

**Һеҙҙе борсоған һорауҙарығыҙ булһа, ҡушылығыҙ - яуап бирергә мин һәр ваҡыт әҙер!**

**Рөстәм НУРЫЕВ.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**?**

***2026 йыл Рәсәй халыҡтарының берҙәмлек йылы тип иғлан ителде. Беҙҙең Башҡортостанда, билдәле булыуынса, күп төрлө милләт вәкилдәре быуаттар һуҙымында тыныс һыйышып йәшәй һәм республикабыҙ был йәһәттән ил кимәлендә өлгөлө булараҡ баһаланып килә. Республикабыҙҙа милләт-ара дуҫлыҡ сере нимәлә тип уйлайһығыҙ?***



***Юнир ВӘЛИЕВ, Йылайыр районының элекке хакимиәт башлығы, Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе, БР мәғариф отличнигы, Салауат Юлаев ордены кавалеры:*** Ике тиҫтә йылға яҡын миңә төрлө милләт вәкилдәре йәшәгән Йылайыр район хакимиәте башлығы булып эшләргә тура килде. Халыҡтар татыулығы тигән төшөнсәне шуға ла мин дөйөм һүҙҙәрҙән, докладтарҙан түгел, ә халыҡ араһында йәшәп һәм эшләп, улар менән аралашыуҙарҙа күрҙем һәм төшөндөм. Эйе, эш башлауы еңелдән булманы тәүҙәрәк, сөнки, әйтеп китеүемсә, төрлө халыҡ, төрлө холоҡ, тигәндәй, урыҫы ла, башҡорто ла, татары ла, сыуашы ла - кемдәр генә төйәк итмәгән йомарт Йылайыр ерен! Шул яҡтан бәхетлемен, тимен, үҙемде: халыҡ менән эшләй башлағанда Башҡортостаныбыҙҙың тәүге Президенты, онотолмаҫ шәхес Мортаза Рәхимов мәктәбен үттем. Оло шәхес булыуы һәм шул уҡ ваҡытта ябайлығы, кеселеклелеге шунда ла күренә ине: ул бер ваҡытта ла үҙенең ҡулы аҫтында эшләүсе хеҙмәткәрҙәр менән кәңәшләшеүҙән, уларҙың фекерен белешеүҙән тартынманы. Шулай бер ваҡыт халыҡтар берҙәмлеге темаһы килеп сыҡҡас, был турала минең фекерҙе, райондағы төрлө милләт вәкилдәренең йәшәү-аралашыу шарттарын, урында халыҡтар берҙәмлеген нығытыу буйынса саралар хаҡында һорашты. Шул саҡ мин революцияға тиклем Преображенское атамаһы менән йөрөтөлгән хәҙерге район үҙәге - рус халҡы күпләп йәшәгән Йылайыр ауылының 250 йыллығын үткәреү хаҡында ниәтемде еткерҙем һәм күп тә үтмәй, был сараны бойомға ла ашырҙыҡ.

Унан һуң республикала иң боронғо башҡорт ауылы Юлдыбайҙың да 800 йыллыҡ юбилейын үткәрҙек. Мортаза Ғөбәйҙулла улы хәстәрлегендә районда юлдарға асфальт түшәлде, йорттарға зәңгәр яғыулыҡ килде, халыҡтың тормош-көнкүреше еңелләште. Йылайырҙар - башҡорто, урыҫы, сыуашы булһынмы - Президентыбыҙҙың һәр килеүен көтөп алыр, уның менән һөйләшеп, һүҙҙәре бөтмәҫ ине. Шунда мин күреп инандым: етәксе ниндәй - халыҡтың уға мөнәсәбәте лә шундай. Артабанғы эшемдә мин ошо һабаҡты тоторға тырыштым. Башҡорт ауылдарында мәсеттәр төҙөлә, ә православныйҙар ни эшләргә тейеш? Ошондай уйҙар менән район үҙәгендәге 1837-1846 йылдарҙа төҙөлгән Спасо-Преображенский сиркәүен тергеҙеү эштәре башланып китте. Әлбиттә, урындағы урыҫ халҡы өсөн был ҙур ваҡиға һәм шатлыҡ ине.

Халыҡ әйтмешләй, дуҫтан дошман яһау өсөн күп аҡыл кәрәкмәй, ә бына дошманды дуҫ итеү өсөн күп эшләргә кәрәк. Милләт-ара дуҫлыҡ, татыулыҡ булһын өсөн етәкселәргә кешеләрҙең ихтыяждарын өйрәнергә, кеселекле, һәр кемгә ихтирамлы, ғәҙел мөнәсәбәттә булырға кәрәк. Юғиһә, ҡайһы бер төбәктәрҙә һәм райондарҙа милләттәрҙе айырып ҡарау кеүек насар ғәҙәт бар. Бындай кешегә етәксе вазифала урын юҡ. Шундай әйтем иҫкә килеп төшә: ҡулындағы биш бармағындың ҡайһыныһын тешләһәң дә ауырта, тиҙәр, шуның кеүек, етәксе объектив мөнә-

*БЫЛ - МӨҺИМ!*

# ҺАУЛЫҒЫҢДЫ ҠАЙҒЫРТ!



**Быйыл Башҡортостанда 1,86 миллион кешегә диспансеризация һәм профтикшереү үткәреү планлаштырыла, тип хәбәр итте республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин.**

Министр һүҙҙәренсә, 2026 йылда диспансеризацияла мөһим яңылыҡ бар - иртә инфаркттан һаҡлау. Дәүләт гарантияларының яңыртылған программаһы буйынса 18-40 йәшлек пациенттарҙың барыһы ла хәҙер иртә асыҡлау өсөн мөһим булған күрһәткесте - липопротеидты (а) тикшертеү хоҡуғына эйә. Бынан тыш, липид профилен баһалау киңәйтелде: 18-39 йәшлек пациенттар өсөн - алты

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәйҙә электрон студент билеттары һәм зачет кенәгәләре индерелә. Дәүләт Думаһы пленар ултырышта икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" законға үҙгәрештәр ҡабул итте. Законға ярашлы, вуз студенттары, ординаторҙар һәм аспиранттар үҙҙәренең уҡыу йортоноң электрон мәғлүмәт ресурстары, Дәүләт хеҙмәттәре порталы, шулай уҡ МАХ милли мессенджеры аша электрон студент билеттары һәм зачет кенәгәләре менән файҙаланырға мөмкин. Шул уҡ ваҡытта студенттың шәхси ғаризаһы буйынса уларҙы ҡағыҙ рәүешендә лә алырға була. Оборона һәм хәүефһеҙлек менән бәйле юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн электрон документтар индерелмәй.

✓2025 йылда Башҡортостанда никах теркәүҙең уртаса йәше артҡан, тип хәбәр итә Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты. Республикала ҡатын-ҡыҙҙар 33 йәштә кейәүгә сыға, ә ир-егеттәр 35 йәштә ғаилә ҡора. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылдың июленә ҡарата республикала беренсе тапҡыр өйләнешеүселәрҙең уртаса йәше ҡатын-ҡыҙҙарҙың - 26,5, ир-егеттәрҙең 28,9 йәш тәшкил иткәйне. Никахтар һаны ла арта.

✓Бөрөнән Халыҡ-ара һәм Бөтә Рәсәй ярыштары чемпиондары остазы Алексей Шалопин Мәскәүҙә Бөтә Рәсәй еңел атлетика федерацияһы премияһын алды һәм Рәсәйҙең иң яҡшы тренеры тип танылды. "Премия Рәсәйҙең спорт мәнфәғәте өсөн эшләгән еңел атлетика вәкилдәренә хөрмәт күрһәтеү өсөн булдырылған", - тип белдерҙе Бөтә Рәсәй еңел атлетика федерацияһы рәйесе Петр Фрадков бүләкләү тантанаһында.

✓Республика халҡы үткән 2025 йылда, лотерея уйнап, 123 миллион һумдан ашыу аҡса отҡан. Рәсәй Финанс министрлығы ойоштorған Бөтә Рәсәй дәүләт лотереялары операторының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостандан һигеҙ ҡатнашыусы лотерея миллионеры булды. Дөйөм алғанда, бөтә категория приздарында 111 мең кеше еңеүсе булған. Бер йылда ғына 962 рәсәйле бренд уйындары арҡаһында лотерея миллионерҙары булған, улар 2,9 миллиард һумға яҡын аҡса отҡан.

✓Башҡортостанда яңы һөнәри байрам - республиканың һатып алыу эшмәкәрлеге өлкәһе хеҙмәткәрҙәре көнө булдырылды. Республика Башлығы Радий Хәбиров тейешле законға ҡул ҡуйған. Документ 2025 йылдың 24 декабрендә Башҡортостандың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. "Башҡортостан Республикаһының һатып алыу эшмәкәрлеге өлкәһе хеҙмәткәрҙәре көнөн 5 апрелдә билдәләргә", - тиелә документта.

✓ *Ябайҙан булмаған бөгөнгө халыҡ-ара шарттарҙа Көнбайыш тап ана шул милләттәр тормошона ҡыҫылырға, халыҡтар араһын бутарға, үҙ-ара дошманлыҡ тыуҙырырға маташа.*



сәбәттә, тигеҙ ҡараштa булһа ғына милләттәр ихтирамын яулай һәм уларҙы берҙәм, татыу көс итеп туплай ала.

Эйе, бай һәм иркен башҡорт ере ҡасандыр төйәк өмөт итеп килгән сит халыҡтарҙы үҙ күреп ҡабул иткән. Тормошта ла бит шулай була: ҡайҙалыр ҡунаҡҡа барһаң, хужаларҙың холоҡ-фиғеленә ҡарайһың: әгәр улар киң, ихлас күңелле, эскерһеҙ булһа, бындай йортто ташлап китке лә килмәй. Беҙҙең ергә килеп ултырған халыҡтар ҙа төп халыҡтарҙың йәшәү рәүешен үҙ итеп, үңдырышлы ерен, гүзәл тәбиғәтен, мул һыулы йылға-күлдәрен ташлап китә алмай мәңгелеккә ошонда тороп ҡалған һәм бөгөнгә тиклем башҡорттар менән туғанлашып, дуҫлашып көн итә. Тыуған ер, эскән һыу, уртаҡ ҡиммәттәр берләштерә беҙҙе - дуҫлыҡтың бөтөн сере шунда, минеңсә.

***Гөлнур УЙЫЛДАНОВА, хеҙмәт ветераны:*** Дуҫлыҡ сере бер-берендә ихтирам итеүҙә, бер-берең сифаттарын, йәшәү һәм фекерләү рәүешен, тормошҡа ҡараштарын баһалай белеүҙәлер, тип уйлайым. Айырым кешеләр араһында ла, төрлө милләт вәкилдәре араһында ла. Телдәре, диндәре төрлө булған хәлдә лә, халыҡтарҙы уртаҡ ватан, Тыуған илгә һөйөү, лайыҡлы киләсәк тәрбиәләп үҫтереү кеүек берҙәм теләк-маҡсаттар һәм рухи ҡиммәттәр берләштереп тора. Бындай берҙәмлек айырыуса илгә ауырлыҡ, яу килгәндә ныҡлы һынала. Был турала "Владимир Путин менән йыл йомғаҡтары" программаһы барышында Президент айырымасыҡ әйтеп китте: Махсус хәрби операция шарттарында күп милләтле һәм төрлө дини инаныуҙағы халыҡтарыбыҙ тағы ла көсләрәк берләште; ошондай һынауҙар менән туплана ил. Беҙҙе Рәсәй Федерацияһының бөтөн халыҡтары өсөн дә традицион булған дөйөм ҡиммәттәр берләштерә, тине Президент.

Башҡортостаныбыҙҙа элек-электән төрлө милләт вәкилдәре тыныс һыйышып йәшәй, ләкин ябайҙан булмаған бөгөнгө халыҡ-ара шарттарҙа Көнбайыш тап ана шул милләттәр тормошона ҡыҫылырға, халыҡтар араһын бутарға, үҙ-ара дошманлыҡ тыуҙырырға маташа, ләкин Башҡортостандың быуаттар дауамында формалашҡан халыҡтар туғанлығын, шул уҡ ваҡытта берҙәм көскә әүерелгән рухи-әхлаҡ ҡиммәттәребеҙҙе, тарихыбыҙҙы юҡҡа сығарыу мөмкин дә түгел. Был йәһәттән милләттәр дуҫлығын нығытыуҙа республикабыҙҙың халыҡтарҙы илһөйәрлек, әхлаҡи сәләмәтлек рухында тәрбиәләүсе милли-мәҙәни ойошмалары һәм дини конфессияларының да әһәмиәтен баһалау кәрәктер, тигән фекерҙәмен.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

йылға бер тапҡыр, 40 йәштән өлкәндәр өсөн - өс йылға бер тапҡыр. "Был анализ нәҫел гиперхолестеринемияһын - йәштәрҙә иртә инфаркттың һәм инсульттың төп сәбәптәренең береһен - асыҡларға ярҙам итә. Тимәк, беҙ инфарктҡа тиклем хәүефте асыҡлайбыҙ, ә эҙемтәләрен дауаламайбыҙ. Әйткәндәй, 2025 йылда Башҡортостанда йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын тикшереү барышында был сир иғтибар үҙәгендә булды - 719 осраҡ асыҡланды", - тип белдерҙе Айрат Рәхмәтуллин.

Республикала йыл башынан алып 11 ғинуарға тиклем 16 224 кеше медицина тикшереүе үткән. "Быны мин шәп старт тип иҫәпләйем! Быйыл һеҙгә 18, 21, 24, 27, 30, 33, 36, 39 йәш (тыуған йылдары: 2008, 2005, 2002, 1999, 1996, 1993, 1990, 1987) тула икән, диспансеризацияға яҙылығыҙ. 40 йәштән өлкәндәргә диспансеризация йыл һайын үткәрелә. Йәшенә ҡарамайынса, теләгән һәр кем профтикшереү үтергә мөмкин", - тине Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры. Әйткәндәй, диспансеризация ваҡытында Башҡортостанда былтыр ғына 300 мең кешелә төрлө ауырыуҙар асыҡланған.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ЕВРОБЕРЛӘШМӘ - ИКЕ УТ АРАҺЫНДА

**Үткән аҙна баштарында сәйәси ваҡиғалар нигеҙҙә Венесуэла, Гренландия буйынса ҡуйырған хәбәрҙәр һәм ғәмәлдәрҙе "эшкәртеү-һеңдереү" тирәһендә барҙы.**

Иң тәүҙә АҠШ президенты Трамптың үҙен "Венесуэланың президенты вазифаһын башҡарыусы" тип иғлан итеүе һәм ошо илдең оппозиция лидеры, тыныслыҡ өсөн былтырғы Нобель премияһы лауреаты Мария Мачадо ҡулынан уның миҙалын ҡабул итеп алыуы хаҡында уҡыусыбыҙ күптән хәбәрҙар инде. Шулай булһа ла был күренешкә ҡарата бер-ике генә баһалама һүҙ әйтеп китке килде. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та, тигәндәй, президент дәрәжәһендәге шәхестең әҙәпһеҙерәк бындай сәйер ҡылығы көлкө һәм ғәжәпләнеү тыуҙырһа, уға ярарға тырышып, оло наградаңы (хатта уға лайыҡ булмаған хәлдә лә!) һанламауын күрһәткән сәйәсмән ҡатындың ниндәй меҫкенлеккә төшөп тә, барыбер Трамптың күңеленә хуш килә алмауы хаҡында кемуҙарҙан яҙып сыҡты көнбайыш киң мәғлүмәт саралары. Нобель комитеты, әлбиттә, был хәлде ҡәтғи тәнҡитләне һәм премияның кире ҡайтарыла алмауын да, уны кемгәлер бүләк итергә лә, бүлешергә лә ярамауын белдерҙе. Трамп менән осрашыуға власть башына өмөт итеп килгән Мачадо, шулай итеп, миҙалдан да, президентлыҡтан да ҡолаҡ ҡаҡты, сөнки, әйтеүҙәренсә, һаман булһа Тыныслыҡ премияһына дәғүәләшенә үпкә һаҡлаусы Аҡ йорт башлығы Венесуэла лидерлығына Мадуро власы ваҡытындағы вице-президент Дельси Родригес кандидатураһын яҡлауын белдерҙе.

Гренландия хәлдәренә килгәндә, был мәсьәлә Аҡ йорт хакимлығы менән Евросоюз араһына таяҡ тығыу һымаҡ килеп сыҡты һәм ике аралағы былай ҙа яҡшынан булмаған мөнәсәбәттәрҙе киҫкенләштереп ебәрҙе. Трамптың утрауға дәғүәләшеүенә яуап рәүешендә Евросоюз илдәренең бәхәсле утрауға күнекмә үткәреү һылтауы менән хәрби көстәр индереүе сәбәпле, Дональд Трамп Данияға, Швецияға, Норвегияға, Францияға, Германияға, Британияға, Нидерландтарға, Финляндияға 1 февралдән уларҙың тауарҙарына 10 процент пошлина иғлан итергә ҡарар ҡылды. 1 июндән, тип өҫтәне ул, тариф 25 процентҡа күтәреләсәк һәм был санкция АҠШ Гренландияны һатып алғансыға тиклем дауам ителәсәк. Бының менән Трамп әлеге 8 илде Гренландияны ҡулға төшөрөүгә ҡаршылар тип иҫәпләй. Шул уҡ ваҡытта илдең үҙ эсендәге көстәр араһында ла ризаһыҙлыҡ көсәйә. АҠШ-тың Демократтар партияһы Трамптың әлеге илдәргә пошлиналары проектын тәнҡитләп сыҡты һәм уны юҡҡа сығарырға ниәтләй, сөнки, Демократтар партияһы лидеры Чак Шумер һүҙҙәренсә, "Дональд Трамптың Гренландияны дон-кихоттарса баҫып алыу ниәте менән союздаш илдәргә ҡарата аҡылһыҙ пошлиналары үҙебеҙҙең ил иҡтисадын ҡаҡшата, хаҡтарҙың күтәрелеүенә килтерә".

Ә Евросоюз ошо хәл айҡанлы үҙенең бөтөн 27 ағзаһы илселәрен Кипрға ашығыс һәм ғәҙәттән тыш кәңәшмәгә йыйҙы. Ғәжәпкә ҡаршы, ғәҙәттә Трампҡа ауыҙ асып ҡаршы һүҙ әйтергә ҡыймаған Эммануэль Макрон (Франция президенты) менән Британия премьеры Кир Стармер, шулай уҡ Еврокомиссия рәйесе Урсула фон дер Ляйен Европа суверенитетын яҡлаясаҡтары, Гренландияның Дания составында булыуы һәм уның яҙмышын бары тик ошо утрауҙа йәшәүселәр менән датчандар ғына хәл итергә тейешлеге хаҡында белдереү яһаны. Шул уҡ ваҡытта улар Рәсәй менән араны өҙгәс, энергетика ресурстары йәһәтенән баш-аяҡ АҠШ-ҡа бәйле булып ҡалыуҙарын да яҡшы аңлайҙар һәм Вашингтонға буйһонорға мәжбүрҙәр, шул иҫәптән, Гренландия мәсьәләһендә лә. Күренеүенсә, Евроберләшмә әлегә ике ут араһында тороп ҡалды һәм был тоҙаҡтан сығыу юлдарын эҙләй. Кипрҙағы ашығыс кәңәшмәлә ЕС илдәре 1 февралгә тиклем көтөргә һәм, әгәр Трамп Европаға сауҙа һуғышынан баш тартмаһа, яуап саралары ҡарарға ниәтләнеүҙәрен белдерҙеләр. Ә бына ГФР властары Трамптың пошлина менән янауынан һуң адмирал Штефан Паули етәкселегендәге хәрбиҙәр төркөмөн ашығыс рәүештә Гренландиянан кире Германияға ҡайтара һалды. Эйе, хас та Крылов мәҫәлендәгесә, дуҫтар араһында берҙәмлек булмаһа, эш алға бармаясаҡ. Икенсе яҡтан, New York Times гәзите яҙыуынса, АҠШ менән ЕС араһындағы сауҙа һуғышы Украинаға ярҙам мәсьәләһен дә юҡҡа сығарыуы ихтимал.

Украина конфликты буйынса һуңғы яңылыҡтарҙан мәғлүм булыуынса, 18 ғинуар, йәкшәмбе көн иртәһе менән боевиктар Төньяҡ Осетия-Алания республикаһына дрондар менән һөжүм итте. Бесландағы биш ҡатлы йорттоң ҡыйығына шартлатҡыс аппарат һыныҡтары төшөп, зыян күргән торлаҡ бинаһынан 70 кеше эвакуацияланған. Өс кеше, шул иҫәптән, ике бала, йәрәхәттәр алған. Рәсәй Оборона министрлығы белдереүенсә, был көн ил төбәктәре күгенән 63 дрон атып төшөрөлгән, шуларҙың алтауһы Төньяк Осетия-Алания территорияһында юҡ ителгән. РФ Ҡораллы көстәре Украина ғәскәрҙәре файҙаланған энергетика һәм транспорт инфраструктураһы объекттарына, шулай уҡ алыҫ араға осоусы украин дрондары йыйыла торған предприятиеға төбәп ут асты, тип хәбәр итте 18 ғинуарҙа Рәсәй Оборона министрлығы. Бынан тыш, Рәсәй хәрби көстәре 149 районда ракета ғәскәрҙәре һәм артиллерия, шулай уҡ авиация һәм пилотһыҙ осоу аппараттары менән украин боевиктары һәм сит ил ялланыусылары урынлашҡан позицияларҙы ҡыйратты. Ә бына "Донбасс көмбәҙе" радиоэлектрон көрәш системаһы бер аҙна эсендә 286 украин дронын атып төшөргән. Украина Ҡораллы көстәре оборонаһының төп төйөнө булып торған Закотное ҡасабаһы (Донецк Халыҡ Республикаһы) боевиктарҙан азат ителде, тип хәбәр итте һуңғы яңылыҡтар таҫмаһы. Был ҡасабаның Рәсәй ғәскәрҙәре контроленә күсеүе Славянскиға илтеүсе юлдағы иң ҙур ҡала - Ҡыҙыл Лиман янындағы ҡыҫымды тағы ла тарайта төшкән. Әлеге ваҡытта Рәсәй Ҡораллы көстәре ғәскәрҙәре Константиновка менән Новодмитровканы штурмлай.

Киевтағы Die Welt гәзите хәбәрсеһе Штеффен Шварцкопф "абруйлы парламентарий" менән йәшерен әңгәмәһенән һуң Юғары рада Донбастан ғәскәрҙәрҙе сығарыу һәм килешеүгә барыу хаҡында фекер белдерә, тип хәбәр итте. Киев халыҡ-ара социология институты тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, Украинаның 50 процент халҡы конфликтты көйләү буйынса референдум үткәреү яғында.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓30 ғинуарҙа Өфөлә республика студенттары һәм йәштәре өсөн #Өйҙә фестивале уҙғарыла. Был хаҡта Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте министры Вито Сабиров белдерҙе. Бөгөн студенттар фестиваленә теркәлеү башланды. Сара Көрәш һарайында ойошторола. "Фестиваль студенттар көнөнә арнала. Республика колледждары һәм юғары уҡыу йорттары студенттарын, шулай уҡ илдең башҡа вуздарында уҡыған яҡташтарыбыҙҙы көтәбеҙ", - тип билдәләне Вито Сабиров. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр #Өйҙә республика фестивалендә Рәсәйҙең 16 төбәге, шулай уҡ Ҡытай һәм АҠШ-тың урта махсус һәм юғары уҡыу йорттарынан 2 меңдән ашыу студент ҡатнашты

✓Өфөлә боҙҙа мотоуҙыш буйынса "Ғабдрахман Ҡадиров мемориалы" Бөтә Рәсәй ярыштары ойошторола. Орджоникидзе районы хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, ярыштар Ғабдрахман Ҡадировтың тыуыуына 85 йыл тулыуға һәм үҙе еңеү яулаған беренсе донъя чемпионатының 60 йыллығына арнала. Турнир 24 ғинуарҙа "Төҙөүсе" стадионында башлана. Район хакимиәтендә боҙло тресса әҙерләү, ярыштар ваҡытында сауҙа хеҙмәтләндереүен ойоштороу һәм хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү мәсьәләләре тикшерелде.

✓Өфөнән олимпия чемпионы Семён Елистратов Беренсе каналда "Боҙлоҡ осоро" спорт-күңел асыу шоуының яңы миҙгелендә ҡатнашты. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, спортсы олимпия чемпионы Татьяна Волосожар менән парҙа сығыш яһай. Шоуҙың премьераһы 24 ғинуарҙа була. Бөтәһе 10 парҙың сығыш яһауы көтөлә. "Был минең өсөн яңы саҡырыу. Мин үҙемде күрһәтергә һәм шорт-трек, фигуралы шыуыу көйәрмәндәрен хайран ҡалдырырға тырышырмын. Мин ныҡ борсолам һәм тулҡынланам: был минең өсөн бөтөнләй яңы спорт төрө һәм шәп саҡырыу", - тип билдәләне Семён социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Өфө хакимиәтендә яңы эштәр идарасыһы итеп Аҫҡар Батталов тәғәйенләнде. Аҫҡар Марат улы 1987 йылда Өфөлә тыуған. Өфө дәүләт нефть техник университетын тамамлаған. 2008-2019 йылдарҙа бер нисә сәнәғәт предприятиеһында эшләй. Һуңынан Дим районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары, ҡаланың йәшәйеште тәьмин итеү идаралығы етәксеһе, инновация-производство үҙәгенең башҡарма директоры була. 2024 йылдың майынан Өфө мэрияһының ҡулланыусылар баҙары, туризм һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау идаралығы етәксеһе вазифаһын биләй.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

*✓ Балауыҙ яһау, манса йыйыу буйынса башҡорт бал ҡорто бөтә тоҡомдарҙан етеҙерәк, алдымыраҡ. Айырыуса йүкәнән бал йыйыуға ныҡ ҡулайлашҡан. Өҫтәлмә бал миҡдарын туплау ҙа уның мөһим үҙенсәлеге.*



*ХАЗИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ*



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

### Ҡырағай бал ҡорто һәм солоҡ балы

...Башҡорт бал ҡорто башҡа тоҡомдарҙан ҡуңыр һоро төҫө һәм эрерәк булыуы менән айырылып тора. Йәнә, күберәк көс айырыуы, һыуыҡҡа бирешмәүсәнлеге, алты-ете ай буйы оянан осоп сыҡмай тора алыу һәләте, варратоз, европа серегe, нозематоз, токсикоз ауырыуҙарына бирешмәүсәнлеге менән. Балауыҙ яһау, манса йыйыу буйынса башҡорт бал ҡорто бөтә тоҡомдарҙан етеҙерәк, алдымыраҡ. Айырыуса йүкәнән бал йыйыуға ныҡ ҡулайлашҡан. Өҫтәлмә бал миҡдарын туплау ҙа - уның мөһим үҙенсәлеге. Бал килеме көслө мәлдә башҡорт бал ҡорттары умартаның икенсе ҡатын ғына түгел, ә мисәтләнмәгән бала ятҡылығы күҙәнәктәрен дә татлы һут менән тултыра. Баллы кәрәҙ күҙәнәктәрен мисәтләгәндә күҙәнәктәге бал һәм уның балауыҙ ҡаплауысы араһында һауа ҡалдыралар. Шуға бал бик сифатлы була. Умартасылыҡ буйынса Бухарестa 1965 йылда үткән XX халыҡ-ара конгресса башҡорт бал ҡорто диплом һәм көмөш миҙал менән бүләкләнә.

...Башҡорт иленең тау-урман төйәгендә урынлашҡан Бөрйән районы биләмәләренең үҫемлектәр донъяһы үҙенсәлекле. Бында иң күп бал һуты биргән үҫемлек - ваҡ япраҡлы йүкә. Ул ике-өс аҙна сәскә атыу мәлендә "Бөрйән" бал ҡорто әллә күпме хуш еҫле тәбиғәт тәғәмен йыйып өлгөрә. Уның эшһөйәрлегенә хайран ҡалырлыҡ.

Рәсәй биләмәләрендә ҡырағай солоҡ ҡорто Башҡортостанда ғына һаҡланған. Ул "Шүлгәнташ" дәүләт ҡурсаулығында һәм "Алтын солоҡ" заказнигында ҡурсауға алынған. Беҙҙең заманда бик аҙ һандағы кешеләр, ғәйәт һирәк һөнәр оҫталары ғына солоҡсолоҡ шөғөлө һөнәренә эйә. Ә солоҡ балын яратыусылар, юғары баһалаусылар бихисап. Бөрйән, Белорет, Ишембай райондарында эре урман хужалыҡтары, ағас әҙерләүселәр аң-тоң белмәй байтаҡ солоҡ ағасын харап итте. Шул хәҡиҡәт: ҡырағай ҡорттарҙы, солоктарҙы тәбиғәттең асылын боҙмағанда ғына һаҡлап ҡалырға мөмкин.

Әлбиттә, хәҙер үткән быуаттар менән сағыштырғанда ҡырағай бал ҡорттары ла, солоктар ҙа, уларҙы ҡараусылар ҙа аҙ. Мәгәр быға бәйле һирәк һәм мажаралы хәлдәр булғылай. Бөрйән районында Хәмит исемле ҡәрҙәшебеҙ көҙөн утынға тип, ғәйәт ҙур ҡороған имәнде йығып, тракторға тағып өйөнә һөйрәтеп алып ҡайта һәм "Дружба" бысҡыһы менән уны түмәрҙәргә бүлгеләй башлай. Эргәһендә улы булышып йөрөй. Ҡапыл бысҡы һүнеп, туҡтап ҡала. Улы әйтә: "Атай, имәндә нәмәләр геҙләй". Хәмит ентекләп ҡараһа, бысҡы юлынан бал һарҡа, эстә бал ҡорттары ҡуҙғып, безләй, геүләй. Ул һаҡ ҡына солоктo кәрәгенсә бысып алып, йәһәт кенә тишектәрен бөтәштерә һәм уны йәтешләп баҡсаһына ултырта. Был ғәжәп табышҡа Хәмит үҙе лә, ғаиләһе лә ҡыуана. Ботаҡлы имәнде бысып ауҙарғанда, алып ҡайтҡанда ла кәрәҙ боҙолмаған, бал ҡорттары туҙмаған. Балы иһә ашап туйғыһыҙ була.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

*ИШАРА*

# ДОКТОР, ҺИНӘН - БЕР ЯРТЫ...

**Авторҙарыбыҙҙың бәғзе ваҡыт кешеләрҙең бер-береһенә кешеләрсә булырға тейешле мөнәсәбәттәре хаҡында һүҙ ҡуҙғатыуы юҡҡа түгел. Был мәсьәлә һәр саҡ актуаль булып ҡала. Ошо темаға ҡағылышлы мин дә йыш ҡына уйланып алам. Хәрби табип булып оҙаҡ ваҡыттар хеҙмәт итеү дәүерендә осраған төрлө ҡыҙыҡлы хәлдәр ныҡ ҡына хәтеремдә ҡалған.**



### "Доктор, с вас - пузырь!"

Инженер профессиялы булған бер прапорщиктың ана шулай тип әйткәне хәтеремдә. Минең автомагнитоламдың бер нәмәһен көйләп биргәс, шулай тигәйне ул миңә. Шунан бер аҙ алдараҡ ҡына был һөнәрмән техник беҙҙең госпиталдә ятҡан ине. Шул мәл уның телерадио аппаратура йүнәтеүгә лә маһир икәнлеген белеп ҡалғайным. Шуға күрә лә ул егеткә мөрәжәғәт иттем дә инде. "Ярай, бер шешә икән - бер шешә булһын", тип, уны ризалаштырҙым. Ул дәүерҙә әлеге бер шешәнең (халыҡта "бер ярты" тип тә йөрөтөлә ине) үҙенә күрә "валюта" булғанын хәтерләмәгән кеше юҡтыр. Шуның менән эш бөткән булһа, әлбиттә, әллә ҡасан уҡ онотҡан да булыр инем, әммә...

Төн уртаһы үткәс, дежурҙағы фельдшер телефондан шылтыратып, мине уята: "Иптәш подполковник, һеҙҙең ашығыс рәүештә госпиталгә килеүегеҙ һорала. Әҙерләнеп торуғыҙ, доктор, хәҙер өйөгөҙгә машина ебәрәм". Оҙаҡламай ашығыс ярҙам машинаһы мине госпиталгә алып та килде. Ҡабул итеү бүлмәһенә ингәс, албырғап ҡалдым: бәй, был әлеге минең "мастерым" да баһа! Муйынын алға һонған, ярым асыҡ ауыҙынан бер туктауһыҙ шайыҡ аға. Иҙәнгә ағыҙмаҫ өсөн, ҡулъяулығы менән әленән-әле еүешләнгән ауыҙын һөрткөләй. Ҡабаланып ашаған (әллә "закусывать иткән") мәлдә тамағына балыҡ һөйәге ҡаҙалған икән. Йәһәт кенә "смотровой" бүлмәгә алып инеп, махсус инструменттар ярҙамында ярайһы ғына төптә торған ҡылсыҡты алып та ташланам. Үҙемдең табиплыҡ бурысымды атҡарғаным өсөн, әлбиттә, унан бер ни ҙә талап итмәнем. Миңә уның ысын күңелдән рәхмәт әйтеүе етте...

### Счетчик подключен...

Хәрбиҙәрҙең хеҙмәт урындарын әленән-әле алыштырып, төрлө урындарға ла күсеп йөрөүе тәбиғи. Балалар бәләкәйерәк саҡта, өйрәнгән урынды ташлап, башҡа гарнизонға күсергә тура килгәйне. Бер аҙ ғына яңы ҡаласыҡта йәшәй башлағас, етенсе синыфта уҡып йөрөгән кесе улымдың кәйефһеҙ икәнен шәйләнем. Ошо хаҡта һораша торғас, өлкән кластағы бер малайҙың улымдан аҡса талап итеүен асыҡланым. Шул хулигандан шөрләп йөрөй икән. Әлеге егет, үҙенең өй адресын күрһәтеп, "записка" ла тоттorған улыма. "Фәләнсә числоға тиклем ошо адресҡа фәләнсә һум аҡса алып килмәһәң, счетчик подключим..." тигән мәғәнәлерәк яҙыуҙы уҡығас, шул егеттең өйөн табып, ата-әсәһе менән һөйләшергә мәжбүр булдым, үҙемдең ошо ҡаласыҡҡа хеҙмәт итергә килгән яңы табип икәнлегемде лә таныттым. Был егеттең сирләп китеп, миңә килеү ихтималлығы ҙур булмаһа ла, ошо хаҡта ла иҫкәрттем: "Тау менән тау осрашмаһа ла, кеше менән кеше осраша бит. Донъя хәлен белеп булмай, бәлки, миңә мөрәжәғәт итергә лә тура килер..." Инде һәүетемсә ир еткән улдары үҙенең ҡылығы өсөн гарнизонда абруйлы ғына булған ата-әсәһе алдында оялғандыр, тип тә уйлайым.

Шунан күп тигәндә лә бер-ике ай самаһы үткәндер, башы ныҡ ауыртып, әлеге егет госпиталгә килде. Участковый табип ебәргән икән. Ентекләп, тейешенсә тикшереп, рентген-фәлән яһап, уға "Острый двухсторонний гнойный гайморит" тигән диагоз ҡуйҙым. Тана-уыныӊ "гаймор ҡыуышлығын" тишеп, был хулиганды бик уңышлы ғына дауалап, әмәл иттем. Бер нисә көн эсендә йүнәлде ул (фамилияһы - Неустроев, әле булһа иҫемдә), рәхмәттәр әйтеп сығып китте.

### Финансисҡа ла доктор кәрәк икән...

Туҡһанынсы йылдар уртаһы ине. Бөтә илде баҫып алған инфляция тигән нәмә, әлбиттә, әрмебеҙҙе лә ситләтеп үтмәне. Аҙыҡ-түлек, башҡа әйберҙәр дефициты, эш хаҡын тотҡарлау һымаҡ проблемалар хәрбиҙәргә лә тейҙе. Кибеттәрҙәге һатыусылар, шулай уҡ эш хаҡы биреү менән шөғөлләнгән хеҙмәткәрҙәрҙең (финансистар) ул саҡ "почетта" булыуы бер кем өсөн дә сер түгел. Бәғзе бер финансист иптәштәр үҙҙәрен саманан тыш һауалы тотто. Шул осорҙар, минең сираттағы отпуск яҡынлашып килгән мәлдәге бер хәл иҫемдә. Тыуған яҡты һағынып, зар-интизар булып, йылына бер тапҡыр биргән отпускыны көтөп йөрөгән кеше булараҡ, көн дә тыл штабына йөрөргә мәжбүрмен: "отпускной" аҡсаһын ала алмай аҙапланам. Өҫтәүенә, айлыҡ эш хаҡын да гел генә сиратта тороп ала инек. Ваҡыты күберәк булғандар, әлбиттә, иртә менән сиратҡа баҫып, алып өлгөрә, бер аҙ һуңыраҡ килгәндәр өсөн кассала аҡса бөтөп тә ҡуя. Киләһе көндө көтөргә ҡала.

Госпиталдә үҙемдең эшем тығыҙ ғына булыуға ҡарамаҫтан, бер аҙ ваҡыт табып, штабта финансист булып хеҙмәт иткән бер майорҙың бүлмәһенә индем, үҙемде таныштырҙым. Доктор икәнемде лә әйттем (хәйер, уныһы китель яғаһындағы эмблеманан да билдәле инде). Проблемамды ла һөйләп бирҙем. "Отпуск башланырға тора, тыуған илгә ҡайтып китергә кәрәк, сиратта тора алмайым. Госпиталдә ауырыуҙарым көтә, иптәш майор", тинем. Минең өсөн бер аҙ ташлама яһауын - кассаға сиратһыҙ барып, "отпускной"ымды алып биреүен үтендем. "Вы знаете, товарищ доктор, я никогда к кассе не подойду!" тип ҡырҡа ғына яуап бирҙе тәккәббер майор. Үҙемдең дә ошо мәсьәләлә әллә ни ғәҙел булмауымды ла тойомлағанғамылыр, артабан, әлбиттә, ялынып торманым.

Иртәгеһен тәшкә тиклем стационарҙағы ауырыуҙарымды ҡарап бөткәс, бер аҙ ғына ваҡытым булыуҙан файҙаланып, тағы тыл штабына барырға йыйынып торған мәлдә, 4-5 йәшлек ҡыҙ балаһын күтәргән әлеге финансист иптәш, уның ҡатыны, минең бүлмәгә килеп инделәр. Ҡыҙҙарының ҡолағы ауырта башлаған, шул сәбәпле төнө буйы тиерлек йоҡлай алмаған икән. (Гарнизонда граждандар өсөн поликлиника булыуға ҡарамаҫтан, ни өсөндөр, күп хәрбиҙәр балаларын, ҡатындарын госпиталь табиптарына күрһәтергә тырыша ине). Мин: "Дөшәмбенән отпускыға китергә тейешмен, аҡса ала алмай йөрөйөм. Хәҙер штабҡа барып килəм дә, балағыҙҙы ҡарармын. Бер аҙ көтөп ултырырға тура килер", - тип, халатты сисеп, китель, фуражкамды кейеп алдым. Әммә әлеге майор мине туҡтатты: "Иптәш подполковник, хәҙер мин штабҡа үҙем генә барып, алып килермен һеҙҙең "отпускной"ығыҙҙы. Юғиһә, оҙаҡлап китеүегеҙ бар, сөнки унда кассаға сират ҙур..." Ҡыҙын ҡатыны менән ҡалдырып, үҙе йәһәтләп бүлмәнән сығып та китте. Оҙаҡламай, атай кеше аҡсамды алып килеүгә, мин баланы ҡарап, тейешенсә дарыу, рецепттар яҙып бөткән инем инде. Шул ваҡиғаны хәтерләһәм, ни өсөндөр, урыҫтағы "Не зарекайся" тигән бер әйтем иҫкә төшә...

### Эйе, һеҙ - табип, әммә мин табип түгел...

Хәрби хеҙмәтемдең мөҙҙәте етеп, отставкаға сығыр мәлдә булды был хәл. Рәсәй ҡануңдарына ярашлы, тейешенсә стажын тултырып, пенсияға сыҡҡан хәрбиҙәргә торлаҡ сертификаты биреү тейешле. Ана шул сертификат тигән нәмәне Мәскәүҙән, Оборона министрлығынан ебәрәләр. Кәрәкле ҡағыҙҙар әҙерләгән ваҡытта беҙҙең тыл штабында минең атаймдың исемен "Тухфатович" тип яҙып ебәргәндәр икән ("Тыуыу тураһында таныҡлыҡ"та, дипломда ла "Тухватович" тип яҙылған). Ана шул бер хәреф арҡаһында, әлеге сертификатым яраҡһыҙ тип табылды, һөҙөмтәлә фатир алып булманы ла ҡуйҙы (банк эшсәндәре, ғәҙәттәгесә, бик иғтибарлы булып сыҡты). Бер генә хәрефте төҙәтеп, ҡабаттан яҙып биреү мәсьәләһе менән штабҡа килдем. Документтар әҙерләүсе "штабист" ҡатын иртәгәһенә ниндәйҙер йомош менән Мәскәүгә китергә тейешле ине. Шул йыуан ханымдың кабинетына инеп, ялынып-ялбарҙым, тигәндәй: "Һеҙ Мәскәүгә йыйынаһығыҙ тип ишеттем, хатаһын төҙәтеп, документтарымды үҙегеҙ менән алып китегеҙсе, зинһар!.." Әммә минең мөрәжәғәтемде был гүзәл зат өҡшатманы: "Ваҡытым юҡ! - тип ҡырҡа һуҡты. - Мне некогда!" Минең дә сигенергә уйым юҡ, бик мөһим мәсьәлә хәл ителә бит: "Мин табип булып хеҙмәт итәм. Төн уртаһында йә ял көнө саҡырһалар ҙа, ауырыуҙы ҡарарға һис һүҙһеҙ киләм..." "Һеҙ - табип, әммә мин табип түгел", - тигән яуап алғас, уның начальнигына инеп (ул мине белә ине), шуның аша бик тиҙ хәл иттем был мәсьәләне. Ә иң ҡыҙығы: Мәскәүҙән йөрөп ҡайтҡас, оҙаҡ та үтмәй, әлеге ҡатын да сирләп киткән икән. Ҡабул итеү бүлмәмә килеп ингәс тә, мине таныны. Йөҙөндә унайһыҙланыу билдәһен шәйләнем. Мин, әлбиттә, һәр ваҡыттағыса, ағымлы мөғәмәлә күрһәтеп ҡабул иттем был ханымды, иғтибар менән ҡараным, рентген кабинетҡа ебәрҙем. Тик шул киттеүҙән, башҡаса миңә килмәне ул. Оялып, граждандар поликлиникаһына киткәндер тип уйланым...

**Һүҙ аҙағында. Ысынлап та, бер уйлаһаң, бына ошондай хәлдәрҙең булыуы - осраҡлы ғына тап килеү һымаҡ та бит. Әммә был донъяла бер нәмә лә осраҡлы булмай, фәҡәт Раббыбыҙ ҡушҡан тәҡдир буйынса бара. Бәләкәй генә берәй ҡырын һүҙ йә насар ғәмәл дә Аллаһ Собхәнә үә Тәғәләнең иғтибарынан ситтә ҡалмай. Был донъяла булмаһа, Ахирәттә лә әҙәм балаһы үҙенең ҡылыҡтары өсөн яуап бирә... Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ ошо хаҡта?**

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

**✓ Ярауайҙар өсөн сәсеүлектәр бик йыш көҙгөһөн әҙерләнгән, ә яҙғыһын ҡабаттан һөрөлгән йәки тырматып сыҡҡандан һуң сәселгән. Бындай ысул менән әҙерләнгән ерҙә бойҙай сәскәндәр.**



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# УРМАН БАШҠОРТТАРЫНА СӘЙӘХӘТ

**XIX быуат аҙағында - XX быуат башында йәшәгән рус табибы, медицина докторы Дмитрий Петрович НИКОЛЬСКИЙ 1899 йылда Санкт-Петербургта баҫылып сыҡҡан "Башкиры. Этнографическое и санитарно-антропологическое исследование" тип исемләнгән үтә ҡыҙыҡлы китап авторы булараҡ билдәле. Унан башҡа Д.П. Никольский 1895 йылда "Землеведение" ғилми журналында "Из поездки к лесным башкирам" тигән этнографик мәҡәлә баҫтыра. Был мәҡәләлә Архангел заводы, Тирәкле, Уҫманғәле, Инйәр ауылдары һәм Көньяҡ Уралдың башҡа урындары иҫкә алына. Автор урындағы башҡорттарҙың көнкүреше һәм йәшәү рәүеше, ялан һәм урман зоналары башҡорттары араһындағы айырмалыҡтар хаҡында ла бәйән итә.**



Өфөнән Верхне-Уральск өйәҙенә урман башҡорттары араһында билдәле бер этнографик һәм антропологик күҙәтеүҙәр уҙғарырға барған саҡта Александров заводы экипаж менән барып етерлек һуңғы пункт ине; артабан юлды һыбай көйөнә генә дауам итергә мөмкин булды.

Завод һөҙәк соҡорҙа урынлашҡан, һәм ул алыҫтан күренмәй. Заводтың тышҡы күренешендә уның ярлылығы һәм ташландыҡ булыуы ярылып ята. Ул беҙҙең ҡәҙимге Урал заводтары кеүек түгел: насар ҡоролмалар, емерек ихаталар, күп кенә өйҙәрҙең тәҙрәләре ҡаҙаҡланған һәм башҡалар. Был завод К-ва ханымдыҡы, ул ҡасандыр баҡыр иретеүе менән дан тотҡан, әммә хәҙерге ваҡытта бөтөнләйгә эшләмәй. [Завод уҙған быуатта (1752-1753 йылдарҙа) Сембер сауҙагәрҙәре Твердышев һәм Мясников тарафынан төҙөлгән. Улар төҙөгән заводтар: Богоявлен (баҡыр иретеү), Ҡатайтамаҡ (Усть-Катав) (тимер) 1758 йылда, Сим (шулай уҡ тимер) 1754 йылда һәм Верхотор (баҡыр иретеү) 1754 йылда. Архангел заводы Асҡын йылғаһы буйында, өйәҙ ҡалаһы Стәрлетамаҡтан 100 саҡрымда урынлашҡан.] Ярылыш емерек плотина, иҫкереп бөткән ҡайһы бер завод биналары һәм домна мейесе уның үткәне хаҡында һөйләй. Завод майҙанында ҡасандыр эшселәрҙе эшкә саҡырыу өсөн ҡулланылған ҡыңғыраулы бағана тора.

Үҙемдең юлдашым менән Александров заводынан сығып киткәндә көн уртаһы ине. Түҙеп торғоһоҙ эҫелек. Урамдарҙа бала-сағa күренә, урман серәкәйҙәренән һәм күгәүендәрҙән ҡасып ҡайтҡан аттар, һыйырҙар һәм һарыҡтар өйҙәр янына һәм ҡойма буйҙарына йөшенгән. Йылға ҡороп бөтә яҙған; ҡасандыр бик яҡшы итеп төҙөлгән күпер емерелгән. Унан йыраҡ түгел, уң яҡта плотина ҡалдыҡтары күренә: шлюздар сереп бөтә яҙған, яндауырҙары ерҙә ята. Йылға аша-һында, һуңғы урам артынан уҡ көтөүлек башлана, беҙ артабан быуа яры буйлап киттек. Быуа бик ҙур майҙанды биләй - беҙгә ҡаршы яҡ яр бик алыҫҡа китә һәм ҡайҙалыр урман ситенә етеп юғала. Уның бик күп өлөшөн ҡамыш баҫҡан.

- Бына беҙ хәҙер китеп барған урында ла быуа ине, - тип әйтеп ҡуйҙы беҙҙе оҙатып йөрөүсе. - Әле мин белгәндә бында һыу бар ине, - үтеп сығырлыҡ булманы, ә хәҙер түңгәктәр ҙә ҡалмаған. Ҡамыш бөтәрҙө, бар быуаны ла баҫып китмәҫ тимәгеҙ. Ә был быуала балыҡ шундай күп ине, бар тирә-яҡҡа даны таралды. Хужалар киткәс, тоторға рөхсәт булманы, йәнәһе, билдәләнгән ваҡытта ғына торға була. Бында ниндәй суртандар, ҡорман һәм алабуғалар бар ине - иҫең китерлек! Бер саҡ шундай ҙур суртан тотолған - көсхәл менән ярға сығарғандар. Ваҡ балыҡты тотмайҙар ине, ә хәҙер кем нисек теләй, шулай тота.

Быуаны урап сыҡҡас, уңғараҡ боролоп, ҙур ҡарағай урманына инеп киттек. Ағас араһынан йылан һымаҡ борғаланып барған тар юл тәрән тәгәрмәс эҙҙәре менән йырғыланып бөткән. Ҡатнаш урман, әммә күбеһенсә ҡарағай һәм ҡайындарҙан тора.

2-3 сәғәттән беҙ Сирбай ҡасабаһына килеп еттек. Унда 20-ләп йорт бар, ул Баса йылғаһының бер ҡушылдығы булған Сирбай йылғасығының ике яры буйында урынлашҡан. Был ҡасабала йәшәүселәр Вятка губернияһы крәҫтиәндәренән, улар Архангел заводы хужаларынан крәҫтиән банкыһы булышлығында 7500 һумға 1000 дисәтинәгә яҡын ер һатып алған һәм, үҙҙәре түләгән аҡса күләменә ҡарап, үҙ-ара бүлешкән. Бындағы ҡара ер, һөйләүҙәренә ҡарағанда, бик уңдырышлы. Уларҙың туғайҙары ла, урмандары ла бар. Крәҫтиәндәрҙең үҙҙәре һөйләгәне буйынса, бында уларға тыуған яҡтарына ҡарағанда йәшәүе яҡшыраҡ. Ҡасаба заводтан 10 саҡрымда урынлашҡан.

Унан 3 йә иһә 4 саҡрымдар тирәһендә Тирәкле тигән башҡорт ауылы бар, әлеге ваҡытта уның кешеләре йәйләүгә сыҡҡан. Тирәкле ауылынан көнсығышҡа табан тик башҡорт ерҙәре һәм урмандары башлана, уларҙы Сим, Ҡатай һәм Йөрүҙән шәхси һәм Златоуст ҡаҙна заводы биләмәләре уратып алған; Әүҙән-Петров, Белорет, Богоявлен һәм Архангел заводтары биләмәләре шул уҡ башҡорт ерҙәренә терәләп тора. Дөрөҫөн әйткәндә, башҡорттар үҙҙәренең ерҙәренең сиктәрен хатта аныҡ ҡына белмәйҙәр ҙә.

Тирәкленән һуң юл тар һәм үтә боролмалы, ташлы урман һуҡмағына әйләнә. Бер нисә тапҡыр Баса йылғаһы аша сығырға тура килде, ул Инйәр йылғаһының ҡушылдығы. Был йылғаның ярҙары текә, ташлы, ул күп урындарҙа лиана һымаҡ ҡырағай ҡомалаҡ үрмәләп үҫкән ҡара ағаслы йырындар менән киҫешә; улар араһында ҡурай еләге, миләш, муйыл ағастары һ.б. осрай. Яҙҙарын Баса, барса тау йылғалары кеүек үк, бик ныҡ ташҡан һыуҙарында тамырынан аҡтарылып йығылған ағастарҙы ағыҙып алып китә.

Бер генә йорттан торған беренсе йәйләүгә (Тирәкленеке) килеп еткәс, аттарыбыҙҙы ял иттереү өсөн туҡтаныҡ. Йәйләү йорто ишеге алдында бер башҡорт ҡарты салғы йүнәтеп ултыра ине. Минең юлдашымдың танышы булғас, ул беҙҙе ихлас ҡаршы алды һәм шундуҡ ҡымыҙ, ҡурай еләге тәҡдим итте.

Тирәкле йәйләүенән Баса йылғаһы буйлап өҫкә табан ҙур булмаған һөрөнтө ер участкалары, туғайҙар осрай, һыуға һалынған һалабаштар күп осрай (урман башҡорттарының бер кәсебе - һалабаш ҡабығы, йүкә йыуғыстары һ.б. әҙерләү); йылға буйлап ҡайһы бер урындарҙа балыҡ тотоу өсөн мурҙалар ҡуйылған. Баса йылғаһы буйында ҡуйы булып ерек, муйыл ағастары, ҡурай еләге һәм ҡарағат үҫә. Уның йүнәлеше бик боролмалы; ҡайһы саҡта ул бөтөнләйгә юғалып ҡалғандай тойола һәм артабан йәйелеберәк аға башлай, уның ятыуҙарында, төркөм-төркөм булып, өйрәктәр тыныс ҡына йөҙөп йөрөй, һәм ҡайһы берҙә яр буйҙарында айырым йөрөүсе сумғалаҡ һәм сүрәгәй өйрәктәр һ.б. осрай.

Юл, тәрән булмаған, ҡыуаҡтар менән ҡапланған ҡулауыҡ һәм йырындар аша Көньяҡ Уралдың (Елмерҙәктең) һырт буйына күтәрелә. Бик ҙур таштар араһынан бормаланып барып, һуҡмаҡ ҡапыл ғына текә һәм ташлы йырын төбөнә төшә, йә һерәйеп торған ҡаяларға менеп китә, һәм ошондай һуҡмаҡтарҙан йөрөп өйрәнгән аттарыбыҙ иҫ киткес тапҡырлыҡ менән өҫкә күтәрелә.

Һуҡмаҡ бик күп йырындарҙа киҫеп ташланған ағастар менән тулған: бер һәм унан да артығыраҡ аршин йыуанлығындағы имән олондары, бер кемгә лә кәрәге булмағандай, тыныс ҡына сереп ята; уларҙың аҫҡы ағы миҫкә йә иһә бал ҡорттары солоғо яһау өсөн ҡулланылған, тороп ҡалған өлөшө ташланған; шулай уҡ ҡабығы һыҙырылып алынған йүкә олондары күп осрай. Ҡайһы бер ағастар йыҡҡан ыңғайы үҙҙәренең бик ҙур ботаҡтары менән башҡа ағастарға эләгеп ҡалған, улар юлды тағы ла ныҡыраҡ ҡаплап тора.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



## БАШҠОРТТАР

### Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Бойҙай арышҡа ҡарағанда күберәк күләмдә сәселгән. Шулай ҙа Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында һәм ҡайһы бер Урал алды ҡалҡыулыҡтарында ул бөтөнләй сәселмәгән. Бойҙайҙы, урынына ҡарап, май дауамында сәскәндәр һәм ул августа өлгөргән. Арпа бөтөн ерҙә лә, әммә аҙ күләмдә сәселгән. Уны бойҙайҙан алда ултыртып, башҡа культураларҙан алдараҡ йыйып алғандар. Һолоно ла аҙ сәскәндәр һәм ерҙе насар эшкәртеү һөҙөмтәһендә уның уңышы ла күп булмаған. Ҡуҙаҡлыларҙы һәм ҡарабойҙайҙы башҡорттар, һирәк кенә ташламаларҙы иҫәпкә алмағанда, бик сәсеп бармағандар. Киндерҙе баҡсасылыҡ менән шөғөлләнгән урындарҙа ҙур булмаған күләмдә сәскәндәр. Йорт эргәһендәге участкаларҙа бик йыш ҡырағай киндер ҙә үҫкән.

Барлыҡ ярауайҙарға ла баҫыуҙар бер төрлө әҙерләнгән. Яҙғыһын ер күпселек осраҡта уның яңымы, иҫкеме булыуына, даими эшкәртелеү йәки эшкәртелмәүенә ҡарамаҫтан, бер тапҡыр ғына һөрөлгән. Тәрән итеп һөрөлмәгән, насар йомшартылған, сүп үләндәренән таҙартылмаған. Уңдырышлы ерҙәр ҙур уңыш биргән, әммә бик йыш уларҙы сүп үләндәре баҫып китеү сәбәпле, уңыш ныҡ кәмегән.

Ялан ерҙәрендә, нигеҙҙә, Башҡортостандың Урал аръяғында, ярауайҙар өсөн сәсеүлектәр бик йыш көҙгөһөн әҙерләнгән, ә яҙғыһын ҡабаттан һөрөлгән йәки тырматып сыҡҡандан һуң сәселгән. Бындай ысул менән әҙерләнгән ерҙә бойҙай сәскәндәр; икенсе йылына ҡамыл бер тапҡыр һөрөлгән һәм был урынға һоло ултыртҡандар; өсөнсө йылына ер парға ҡалдырылған. Ужым игене сәсер алдынан ерҙе ике тапҡыр һөргәндәр: беренсе тапҡыр июндә йәки июль башында (парға), ә икенсе тапҡыр сәсеү алдынан бер аҙна элек; сәсеү ерҙе тырматҡандан һуң башҡарылған һәм шуның менән парға ҡалдырылған ерҙә эш тамамланған. Ярауайҙарҙы сәсеү Башҡортостандың төрлө төбәгендә төрлөсә, төрлө ваҡытта башҡарылған. Төньяҡта ул көньяҡҡа ҡарағанда өс аҙнаға, ҡайһы берҙә бер айға һуңлаған.

Һирәк кенә ҡулланылған һәм бары тик урмандан тулыһынса таҙартылмаған ерҙәрҙе һөрөү өсөн иң ябай ҡорал булып һуҡа торған. Һирәк кенә төрлө ерҙә башҡорттар ике төрәнле һуҡа менән һөргән. Ул, нигеҙҙә, баҫыуҙы беренсе тапҡыр ужым ултыртыр өсөн парға һәм баҡса һөргәндә файҙаланылған.

Крайҙа ағас һабан киң таралған. XIX быуат һуңына һабан бөтөнләй ҡулланылыштан сыҡҡан. XX быуат башында һәр ауылда был эш ҡоралының бер-ике данаһын күрергә мөмкин ине әле. Был ҡорал менән ер һөргәндә ике кеше эшләгән. Уларҙың береһе аттарға йүнәлеш бирә барған, икенсеһе һабанды тотҡан. Был эш ҡоралы ике ағас өлөштән торған: һабан башынан һәм уҡтауҙан. Уның бер башы элмәк һәм ағас сөй ярҙамында ике тәгәрмәсле арбаға, икенсеһе саттың терәгенә нығытылған. Саттың алдына тимер төрән кейҙерелгән, ә үрге осона тоткос ҡуйылған. Һабансы шуның ярҙамында һабан менән идара иткән. Уҡтау сат менән тимер шөрөп ярҙамында нығытылған. Ошо шөрөп - уҡ ярҙамында төрәндең төрәнлеге көйләнгән. Ҡәҫ таҡта булып, гәҙәттә, ябай таҡта хеҙмәт иткән. Ул уң яҡтан ҡыялатып ҡағылған.

**(Дауамы бар).**

*✓ Мин әгәр ҙә ауылда тороп ҡалған булһам, үҙемдең кәсебемдә табыр инем. Күпләп мал тотор инем, пекарня асыр инем. Өлкәнәйгәс, төпкөлдәге бер бәләкәй генә ауылда, бер-ике һыйыр, ат тотоп йәшәгем килә.*



ӨФӨЛӘРҘӘ БАР БЕР АУЫЛ

**Йылайыр районының Юлдыбай ауылы республикабыҙға Азат Айытҡолов, Юнир Солтанов, Роза Буканова, Алик Йәғәфәров, Салауат Фәтхуллин, Мөслим Әбсәләмов, Әхмәт Хисмәтуллин, Миңлеғәле һәм Азат Нәҙерғоловтар, Айгөл Айытҡолова, Рәфҡәт һәм Рөстәм Шәриповтар, Айрат һәм Айгиз Ҡарасовтар, Ринат Нурисламов, Иҙрис Такалов, Ләйсән Моталлапова кеүек күп һандағы шәхестәр биргән. Уларҙы һанап үтер өсөн дә айырым мәҡәлә талап ителер ине.**

**Ә бына Йылайыр районының башҡа ауылдарында тыуып үҫһәләр ҙә, тамырҙары менән Юлдыбайҙан булған Гүзәл Яубаҫарова менән Юнир Вәлиев үҙҙәрен ошо ауыл аҫабалары тип һанай. Бөгөн Өфө ҡалаһында йәшәүсе юлдыбайҙар - Рәсәйҙең, Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе, "АС-Проект" проектлау институты" яуаплылығы сикләнгән ойошма директоры Гүзәл Юныс ҡыҙы ЯУБАҪАРОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған төҙөүсеһе, БР-ның мәғариф отличнигы, Салауат Юлаев ордены кавалеры Юнир Сәлим улы ВӘЛИЕВ, шулай уҡ Юлдыбай ҡыҙы Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы нәфис һүҙ оҫтаһы Эльмира Рәдиф ҡыҙы Юлдашева менән осрашып, Юлдыбай ауылына бәйле хәтирәләре, шулай уҡ ауыл-ҡала проблемаларына бәйле башҡа мәсьәләләр хаҡында фекер алыштыҡ.**

# ЮЛДЫБАЙ ТИГӘН

## ауылса аралашып, күрешеп

**Һеҙ ҡасандыр ауылда тыуып үҫеп, баш ҡалаға сығып китеп, Өфө кешеһе булып киткәнһегеҙ. Әгәр ҙә тыуған ауылығыҙҙа тороп ҡалған булһағыҙ, хәҙерге көнөгөҙҙө нисегерәк итеп күҙ алдына килтерер инегеҙ?**

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Минең өсөн бик моңһоу һорау был. Ҡайһы ваҡыт, ниңә ауылымды ташлап киттем икән, тип тә уйлап ҡуям. Ауылда ғына тороп ҡалып, шунда тормошҡа сығып, итәк тултырып балалар үҫтереп, күп итеп мал-туар ҡарап йәшәһәм, ни булған? Ҡала ерендә ошондай беҙ көҫәгән аралашыуҙар ныҡ етмәй.

**Ауыл мөнәсәбәттәре етмәй тиһегеҙме?**

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Тап шулай. Ҡала кешеләре бит йылдар буйы хатта күршеһендә кемдәр йәшәгәнен белмәй. Мин иһә күршеләремдең балаларына Яңы йылға бүләктәр, күстәнәстәр бирергә тырышам. Тәүге тапҡыр Яңы йыл алдынан күршеләремә барып, ишектәрен ҡаҡтым. Хужалар ишектәрен асҡас:

- Мин һеҙгә бүләктәр алып килдем, - тием.
- Ә бүләктәр күпме тора? - тип һорайҙар.
- Бүләкте һатып бирмәйҙәр, мин бит һеҙҙең күршегеҙ, - тием уларға.

Эй, шатландылар. Ошонан һуң улар менән ауылдағы һымаҡ ут күршеләргә әүерелдек. Балалары ла был хәлгә күнеп, Яңы йыл етә башлаһа, бүләк көтөп йөрөйҙәр.

Әле бына Юнир ҡустым менән Өфө кешеләре булып китһәк тә, асылда, ҡала ситендә ауыл тормошо менән йәшәйбеҙ. Мин ауылдан сығып киткәнмен икән, был һис тә осраҡлы булмағандыр, тием. Кешеләргә кәрәк булған өсөн сығып киткәнмен, тимәк. Күпме йорттар, ижтимағи әһәмиәттәге биналарҙы проектланым һәм төҙөнөм. Хеҙмәтемде баһаланылар, һәр төрлө маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булдым.

**Эльмира Рәдиф ҡыҙы:** Кеше ҡайҙа ғына йәшәһә лә, үҙенә ҡулайлы шарт, комфорт зонаһы эшләп ала ул. Мин әгәр ҙә ауылда тороп ҡалған булһам, үҙемдең кәсебемде табыр инем. Күпләп мал тотор инем, пекарня асыр инем. Үҙемдең хыялым да бар. Әле үҙемде йәш итеп тоям, өлкәнәйгәс, төпкөлдәге бер бәләкәй генә ауылда, бер-ике һыйыр, ат тотоп йәшәгем килә. Әле Өфөлә йәшәһәм дә, ҡала ситендә үҙ йортомда донъя көтәм. Моғайын, ҡала фатирында йәшәй алмаҫ инем. Йортомдан сығып, уның янындағы сәскәләргә һыу һибеп йәшәүгә бер ни етмәй. Үҙемде мин унда утрауҙа һымаҡ хис итәм.

**Юнир Сәлим улы:** Өҫтәп шуны ғына әйткем килә: беҙ, ысынлап та, ауыл кешеһе һәм беҙҙе бер нисек тә үҙгәртеп булмай. Мин Өфөгә килгәс, ҡала йортоноң өсөнсө ҡатында йәшәй башланым. Күршем ҡалала тыуып үҫкән кеше. Көн һайын һаулыҡ һорашып ҡына йөрөйбөҙ. Мөнәсәбәтебеҙ шунан арыға китмәй. Башҡортса түгел һымаҡ. Туҡта әле, мин әйтәм, күршемде сәйгә саҡырып алайым әле, тинем бер көндә. Саҡырҙым, тик килмәне. Шунан ярты йыл үтте. Яңы йыл етеп килә. Ҡарап йөрөйөм, уларҙың саҡырған балалары килмәне. Шулай итеп, Яңы йылды бергә үткәрҙек.

Минең, ғөмүмән, ҡалаға килергә, институтта уҡырға уйым юҡ ине. Мин ауылда көтөүсе булып эш башланым, әрмеһән ҡайтҡас, шофер булып та алдым. Бер мәл көтөүем һабантуй көнөнә тура килде. Бөтә кешеләр, тиҫтерҙәрем һабантуйға, байрам итергә китте. Миңә - һыйыр көтөргә. Өҫтәүенә, дуҫлашып йөрөгән ҡыҙ ҙа миңә шик менән ҡарағандай тойолдо.

Шунда ғына, ғүмерем һыйыр артынан эйәреп үтергә тейешме ни, тип бик ҡаты уйландым. Башыма шундай уй килде: нишләп мин көтөүсе генә булырға тейешмен, ә ниңә ферма мөдире, бригадир булмаҫҡа? Әсәйемә ниәтемде әйткәйнем, ул уҡырға барырға тәҡдим итте.

Ауыл хужалығы институтын тамамлағас, төрлө вазифалар башҡарҙым. Йылайыр районы хакимиәте башлығы булғандан һуң Өфөгә йәшәргә күстем һәм Йылайыр яҡташтар ойошмаһының рәйесе булып йөрөйөм. Ысынлап та, беҙ, йылайырҙар, барыбыҙ ҙа ауылдарҙан сыҡҡанбыҙ, районыбыҙҙа ҡала юҡ. Бер-беребеҙҙе дәртләндерер, ярҙам итер өсөн ошолай берләшергә булдыҡ. Йыйылып һабантуйҙар үткәрәбеҙ, йола-традицияларыбыҙҙы онотмайбыҙ. Йолалар тигәндән, улар беҙгә ауылдарыбыҙҙағы күркәм мөнәсәбәттәребеҙҙе һаҡлар өсөн дә кәрәк. Ауыл кешеһен, нишләһәң дә, ҡала кешеһенә әйләндереп булмай инде ул. Ҡатыным да ҡала фатирын үҙһенмәне, шуға күрә ҡаланан ситтә йорт һалдыҡ.

**Мин унынсыны, ҡустым һигеҙенсене тамамлағас, тәүге тапҡыр Өфөгә килдек. Шунда таныштарыбыҙҙың фатирына барҙыҡ. Табын артына саҡырҙылар. Беҙҙе иң нык аптыратҡаны шул булды: беҙ кухняла сәй эсеп ултырабыҙ һәм эргәлә генә бәҙрәф урынлашҡан. Беҙ сәй эскәс, хатта бәҙрәф эҙләп тышҡа сығып киттек. Һеҙ Өфөнө нисек яуланығыҙ һәм тәүге тапҡыр баш ҡалаға аяҡ баҫҡанда нимәгә нык аптыранығыҙ?**

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Өфөнө яулауға килгәндә, миңә баш ҡала еңел бирелде. Мин Өфөгә 1-се мәктәп-интернатҡа бишенсе класҡа уҡырға килдем. Шуға Өфөлә йәшәй башлауым тураһындағы хәтирәләрем дә башҡасараҡ. Эйе, күптәргә Өфөлә ерегеп китеү әллә ни еңел түгел, матди яҡтан да бик ҡыйын. Минең өсөн был йәһәттән дә ауыр булманы шикелле. Тормошҡа сыҡҡанымда иремдең аталары дүрт бүлмәле фатир бүләк иттеләр. Һөнәре буйынса геофизик булған ирем Илдарҙы Себергә эшкә саҡырҙылар. Унда ла дүрт бүлмәле фатир әҙерләп ҡуйғайнылар. Кире Өфөгә ҡайтҡас, үҙемдең фирмамды астым. Йорттар проектлағас, балаларымды ла фатирлы итеү ауыр булманы. Ғөмүмән, миңә һәр ваҡыт уңыш йылмайып торҙо. Хажға барғанда бер шәйех менән танышып, һорашҡайным, ул миңә ата-олаталарымдың доғалары ярҙам итеүе хаҡында әйтте. Етмешкә яҡын мәсеткә мәрхәмәтлек ярҙамы күрһәттем, Силәбе, Ҡорған өлкәләренән, Мәскәү яғынан да ярҙам һорап килеүселәр булды.

**Эльмира Рәдиф ҡыҙы:** Бала сағымда нык ауырығанмын, әсәйем мине Республика дауаханаһына алып килгәне хәтерҙә. Ҡар иреп ята ине, ә минең аяғымда быйма. Аяҡтарым һыуланып, лапылдап баҫып йөрөгәнемде һаман да иҫләйем. Мәктәпте тамамлағас, баш ҡалаға уҡырға тип килдем. Хәҙер йәштәр Өфөгә ата-әсәләре менән килә. Ә беҙ баш ҡалаға үҙебеҙ генә килдек. Атай-әсәйҙәр беҙгә аҡса, аҙыҡ-түлек тоттора ла, ауылда оҙатып ҡала ине. 1997 йылда Һынташ ауылы егеттәре менән "буханка" автобус менән баш ҡалаға килеп, ниндәйҙер бер ауылдашты табып, шуның бүлмәһенә урынлашып, Өфө сәнғәт институтының театр факультетына уҡырға индем. Беҙ үҙаллылыҡҡа нык өйрәнгәйнек. Хәҙерге балалар ата-әсәһе әйтмәйенсә, бер нәмә лә эшләмәй. Төртөп күрһәтмәйенсә, бер нәмә лә урынынан



*Беҙ, йылайырҙар, барыбыҙ ҙа ауылдарҙан сыҡҡанбыҙ, районыбыҙҙа ҡала юҡ. Бер-беребеҙҙе дәртләндерер, ярҙам итер өсөн ошолай берләшергә булдыҡ. Йыйылып һабантуйҙар үткәрәбеҙ, йола-традицияларыбыҙҙы онотмайбыҙ. Йолалар тигәндән, улар беҙгә ауылдарыбыҙҙағы күркәм мөнәсәбәттәребеҙҙе һаҡлар өсөн дә кәрәк. Ауыл кешеһен, нишләһәң дә, ҡала кешеһенә әйләндереп булмай инде ул.*

***✓ Ауыл беҙҙең аң төбөндә ултыра һәм беҙ унан айырылырға теләмәйбеҙ. Мин, мәҫәлән, һәр ваҡыт самауыр ҡуйырға, аш бешерер өсөн ҡаҙан аҫырға тырышам. Һалма йәйәм, ҡул икмәге бешерәм.***



шылмай. Беҙ үҙебеҙҙе әрһеҙлек менән раҫлай инек.

Ә былай, Гүзәл апай һымаҡ, миңә лә Өфө сағыштырмаса еңел бирелде. Юлдарым асылып торҙо. Уҡыған саҡта ла, кейәүгә сыҡҡас та, йәшәргә урыным булды. Үҙәк урамда ике бүлмәле фатирыбыҙ булды. Уны һатып, ҡаланан ситтә үҙемә өй алырға форсат сыҡты. Сәй эсергә ултырып, өҫтәлдә нимәләр етешмәһә, мин балаларыма: "Ҡайһы бер өйҙәрҙә шәкәрһеҙ, һөтһөҙ, тәмлекәсһеҙ ҡарлай сәй эсәләр. Артыҡ шашмағыҙ, шөкөр итә белегеҙ", - тип әйтәм. Шул һүҙҙәрҙе улар иҫләйҙәр. Ә бит ғүмер буйы ҡуртымға фатир алып йәшәгән кешеләр бар. Минең хәҙер ҡайтырға өйөм, яҫтыҡ һалырға карауатым, аш бешерергә плитәм бар, шуға риза булып йәшәргә өйрәнгәнмен, миңә артыҡ бер нәмә лә кәрәкмәй.

**Юнир Сәлим улы:** Мин Баймаҡта интернат-мәктәптә уҡығайным. Һигеҙенсене та-

бында мәктәп директоры булып та эшләгән.

Шулай итеп, урта мәктәпте Юлдыбайҙа тамамларға тура килде. Артабан әрме хеҙмәте, ауылда көтөүсе, шофер булып эшләгәс, яҙмыш мине икенсегә Өфөгә алып килде. Башҡортостан ауыл хужалығы институтының ветеринария факультетында уҡып сыҡтым. Шулай итеп, хәҙер инде мин бына өсөнсөгә Өфөгә йәшәргә килдем...

**Беҙ ҡалала йәшәһәк тә, барыбер ҙә ауылдаштарыбыҙға, туғандарыбыҙға, райондаштарыбыҙға һыйынып, бер ҡорға ойошоп йәшәйбеҙ. Һеҙҙең рухи тамырығыҙ, асылда, бер ауылға - Юлдыбайға барып ялғана. Өфөләге рухи ауылығыҙ ҙа "Юлдыбай" тип аталамы, унда ниндәй йолалар бар, концерттарҙа күрешәһегеҙме, Салауат һәйкәленә бараһығыҙмы, аяттарға, тыуған көндәргә саҡырышаһығыҙмы? Ҡыҫҡаһы, Өфө**

ған телендә һөйләшергә өйрәнһен өсөн шул телдә аралашыу мөхите булыуы тәүшарт. Шундай мөхит була тороп та, сабый телдәренең башҡаса асылыуы тағы ла тәрән уйҙарға һала. Ауылдарҙа күбеһенсә ҡырҡты, иллене үткәндәр ҡала бара, янып торған егерме биш, утыҙ биш йәштәгеләр ситкә китә, йә район үҙәгендә, ҙур ҡалалар янында йорт һала, мегаполистарҙа ипотекаға фатир ала. Беҙ ауылыбыҙға ҡайтып, ҡорбан салып мәжлестәр үткәрәбеҙ, аяттар уҡытабыҙ, шәжәрә байрамдары ойоштораБыҙ. Клуб, мәктәп тирәһенә үҫентеләр алып ҡайтып ултыртабыҙ. Ҡалала йәшәгән хәлле яҡташтарыбыҙҙан аҡса йыйып, зыяраттарҙы тәртипкә килтерәбеҙ, обелисктарҙы, һәйкәлдәрҙе ремонтлайбыҙ. Шуныһы күҙгә ташлана: ауылдарыбыҙ ныҡ үҙгәрә, әлбиттә, ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр ҙә юҡ түгел. Әйтәйек, хәҙер ауылдарҙа ҡала шарттарына тап килерлек итеп, эҫе һыуы,

йырҙарҙың яҡташтар ойошмаһының да төп маҡсаты шуға ҡайтып ҡала бит инде. Юлдыбайҙың 800 йыллығын үткәргәндә лә бер төптән тотоноп эшләү-ҙең файҙаһын ныҡлап тойҙоҡ. Беҙ унда тәүҙә тирмә ҡорорға кәрәк тип уйлағайныҡ. Әммә юбилей саралары үтеп киткәс, тирмәне лә алырға тура киләсәк. Районыбыҙҙан, ауылыбыҙҙан сыҡҡан тарихсылар Юлдыбайҙан ҡырҡ саҡрым алыҫлыҡтағы Айҙаболон тигән яланда ете ырыу вәкилдәренең осрашыуы уҙғанын иҫбатланы. Шул тарихи фактты нигеҙ итеп алып, оло юл өҫтөндәге Юлдыбайҙа обелиск эшләргә ҡарар иттек. Шунда уҡ "Юлдыбай" тигән яҙыуҙы ла ҡуйыуҙы кәрәкле тип таптыҡ.

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Атайымдың тыуған ауылы Ашҡаҙар, шуға күрә ул ауылды ла тыуған ауылым тип һанайым. Фирмамды асҡан ғына мәлдә Ашҡаҙарҙан Мәҙинәне эшкә алдым. Мәҙинәгә эйәреп, тағы

тенә әүерелгәнбеҙ. Әбделнасыр ауылы йәштәренең Өфөгә килеп туған телендә һөйләшергә өйрәнеүе лә шуны раҫлап тора. Төпкөл ауылдарҙа ла телдәре русса асылған балалар үҙҙәре ғәйепле түгел. Әммә уларҙы аңларға ла була. Улар ҡала балаларынан артта ҡалмағанын да күрһәтергә теләйҙер, кем белә инде. Мин тыуып үҫкән Ҡашҡарға бер мәл Өфө яғынан рус телле кешеләр еләккә килде. Улар ауылыбыҙҙың ҡайһы яғында еләк барлығын белергә теләп, беҙҙән һораша башланылар. Мин уларға "еләк унда бик күп" тигәнде аңлатыр өсөн рус телендәге бер һүҙҙе ҡулланып аңлаттым, йәнәһе быны менән уларға үҙемдең артта ҡалмағанымды аңлатырға теләнем. Ә ул һүҙҙе ауылыбыҙға килгән урыҫтарҙан "бик күп" тигән мәғәнәне аңлата икәнен ишетеп белгәйнем. Һуңынан, үҫә төшкәс, ул һүҙҙең тура әйтелгән мәғәнәһен аңлағас, ҡыҙарырға тура килгәйне.

# РУХИ АУЫЛЫБЫҘҘА...

## йәшәүҙе бәхеткә тиңләйбеҙ

мамлағас, мәктәп директоры мине маҡтап: "Һин тырышһың, туғыҙға барғансы, газосварщикҡа уҡы, ул һәйбәт һөнәр. Өфөлә профтехучилищеға һөйләшкәнмен, документтарыңды шунда алып барып тапшыр", - тип өгөтләргә тотондо. Шулай итеп, Һабырҙа һигеҙенсене тамамлаған бер малай менән Черниковкала урынлашҡан ГПТУ-ла уҡый башланыҡ. Өфөгә самолет менән килеп төшөп, "Ағиҙел" ҡунаҡханаһына урынлаштыҡ. Иртәгәһенә Черниковкалағы ГПТУ-ға трамвай менән барҙыҡ. Ул саҡтағы Черниковка мөхитендә беҙгә, ауылдан килгән малайҙарға, бигүк еңелдән булманы. Аҙым һайын малай-шалай бәйләнә. Училищела, асылда, ҡала балалары уҡыны бит. Мин Баймаҡ интернатында уҡығанда бокс секцияһына йөрөгәйнем, шуға бирешә һалып барманым. Иптәшем ике көн түҙҙе, өсөнсө көнгә, ҡайтайыҡ, тип илай башланы. Тегенең яңғыҙ ҡайтҡыһы ла килмәй.

Шулай итеп, беҙҙең тәүге Өфө тормошо өс-дүрт көндән уҙманы. Күмертауға тиклем поезд менән, артабан грузотаксиға һағып, Йылайырға ҡайтып төштөк. Ауылға ҡайтып, әсәйҙәрҙән әрләнге килмәне, шуға Юлдыбайға килдек. СПТУ-ны бер кешенән һораштыҡ, ул ҡайҙан, кем балаһы булыуыбыҙҙы һораша башланы. Мин уға Ашҡаҙарҙан Сәлим менән Мәғәзирәнең улы булыуымды әйткәйнем: "Бәй, Мәғәзирәнең улы тракторсы булмаҫ инде, нишләп унда бараһығыҙ?" - тип үҙе эшләгән Юлдыбай урта мәктәбенә алып китте. Әсәйем илленсе йылдар баштарында

**ҡалаһындағы аралашыу даирәгеҙ нисек?**

**Юнир Сәлим улы:** Көн һайын Өфөлә йәшәгән бер ауылдашыңа шылтыратып, хәлен белешеү ҙә мөһим. Бынан тыш, мөмкинлек булғанда-булмағанда ла ниндәйҙер һылтауҙы сәбәп итеп, осрашып торабыҙ. Ни өсөн тигәндә, беҙ шундай ауылыбыҙ булыуы менән бәхетле лә. Ул ауылыбыҙ тарихы еребеҙгә, телебеҙгә бәйле. Ауылдарҙа булған үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе һаҡлар өсөн дә кәрәк беҙгә рухи ауылыбыҙ Юлдыбай.

санузелы менән йорттар һала башланылар.

Минеңсә, иң мөһиме, беҙҙең күңелдәрҙә ауыл тойғоһо булыуындалыр. Мин ҡайҙа ғына йәшәһәм дә, кем генә булып эшләһәм дә, һаман да үҙемде Юлдыбай, Ашҡаҙар ауылдары кешеһе итеп тоям.

**Ауылдарҙағы хәлдәр бер Йылайырға, бер Башҡортостанға ғына ҡағылмай, тотош Рәсәй кимәлендәге проблемаға әүерелде. Беҙгә Өфөләге Юлдыбай кеүек рухи ауылдарыбыҙ ғәмәлдәге ауылдарыбыҙҙы һаҡлар өсөн дә кәрәк. Хәйбулланың Әбделнасыр ауылында тыуып үҫеп, хәҙер Өфөлә йәшәгән йәштәр менән әңгәмә ҡорғайныҡ. Улар Целинный мәктәбендә уҡып сы-**

ла биш кеше миңә эшкә килде. Улар юғары эш хаҡы алды, барыһына ла фатир алырға ярҙам иттем. Уларға мин үҙемә ышанғандай ышанам, шул тиклем ярҙамсылдар. Күрәһең, шундай ауылдаштарыма ярҙам ҡулы һуҙыр өсөн дә Хоҙай Тәғәлә мине Өфө тигән оло донъяларға алып килгәндер инде.

**Бөгөн беҙҙең алда торған проблемалар үткән быуаттың 90-сы йылдарында беҙгә ағын һыу булып ингән Америка, Европа фильмдарында уҡ сағылыш тапҡайны. Беҙ ул киноларҙа АҠШ-тың, Европа илдәренең эре мегаполистарында барлыҡҡа килгән ҡытай, япон һәм башҡа халыҡтарҙың кварталдары барлы-**

**Юнир Сәлим улы:** Ауылдарҙа һуғым мәле килеп етһә, мин дә тыуған ауылымдағы алдан әйтеп ҡуйған кешенән һуғымға мал һатып алып, һуйып алып киләм. Улым: "Ниңә, атай, йыл һайын ыҙалап ҡайтып һуғым һуяһың. Бында ла бит баҙар, йәрминкәнән һатып алып була", - тип аптырай. Мин уға: "Улым, был мал бит үҙебеҙҙең тыуған яҡта үҫкән үләнде ейгән, беҙ эскән һыуҙарҙы эскән. Икенсенән, һуғым һуйыу үҙе бит милли йолабыҙ. Үҙе бер байрам. Һуйған көндө кис һуғым ашына саҡырабыҙ, иртәгәһенә ҡаҙы эшләйбеҙ, тултырма тултырабыҙ. Үҙ ҡулың менән әҙерләгән ҡаҙыға, тултырмаға бер нәмә лә етмәй...", - тинем.

**Эльмира Рәдиф ҡыҙы:** Шулай ҙа ауыл беҙҙең аң төбөндә ултыра һәм беҙ унан айырылырға теләмәйбеҙ. Мин, мәҫәлән, һәр ваҡыт самауыр ҡуйырға, аш бешерер өсөн ҡаҙан аҫырға тырышам. Һалма йәйәм, ҡул икмәге бешерәм. Әгәр ҙә мин ҡаласа йәшәргә теләһәм, суши ашар инем, ҡытай тәрилкәләрендәге пасталарҙы заказать итер инем. Мин ҡалала торһам да, ауылса йәшәгем килә.

> ***Ҡыҙғаныҫҡа күрә, һуңғы ваҡытта тыуған яҡтарыбыҙҙағы ғәмәлдәге ауылдарыбыҙҙа кешеләр һаны кәмей, мәктәптәр ябыла. Ауылыбыҙҙа бер рус милләте вәкиле лә юҡ, әммә сабыйҙарҙың теле русса асыла. Бала туған телендә һөйләшергә өйрәнһен өсөн шул телдә аралашыу мөхите булыуы тәүшарт. Шундай мөхит була тороп та, сабый телдәренең башҡаса асылыуы тағы ла тәрән уйҙарға һала. Ауылдарҙа күбеһенсә ҡырҡты, иллене үткәндәр ҡала бара, янып торған егерме биш, утыҙ биш йәштәгеләр ситкә китә, йә район үҙәгендә, ҙур ҡалалар янында йорт һала, мегаполистарҙа ипотекаға фатир ала.***

Мин Юлдыбайҙа тыуһам да, үҫкән ауылым Ашҡаҙар. Унда йортом ултыра. Йәйҙәрен шунда ҡайтып, бесән сапҡан, еләк йыйған урман-ҡырҙарҙа йөрөп килһәм, үҙемде бала сағыма ҡайтҡандай тоям, һағыштарым баҫыла, ҡайғыларым онотола. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, һуңғы ваҡытта тыуған яҡтарыбыҙҙағы ғәмәлдәге ауылдарыбыҙҙа кешеләр һаны кәмей, мәктәптәр ябыла. Ауылыбыҙҙа бер рус милләте вәкиле лә юҡ, әммә сабыйҙарҙың теле русса асыла. Бала ту-

**ғып, рус телле булып үҫеп, артабан баш ҡалаға килеп, ундағы башҡорт телле йәштәр мөхитендә туған телендә һөйләшергә өйрәнгән. Ҡалаларҙағы рухи ауылдар бына шуның өсөн дә кәрәк. Рухи ауыл тигәнебеҙ шул уҡ туған телдә аралашыу мөхите лә. Беҙ ауылдарыбыҙҙы ҡайғыртта башлар өсөн баш ҡалала ойошорға бурыслыбыҙ. Шулай түгелме?**

**Юнир Сәлим улы:** Тап шулай. Өфөлә йәшәүсе Йыла-

**ғына шаһит булдыҡ. Шул уҡ ҡытайҙар һәм япондар бер тирәгә ойошоп йәшәп, үҙҙәренең рухи булмышын һаҡлап ҡалырға тырыша. Өфөләге Юлдыбай рухи ауылын шулай уҡ "Юлдыбай кварталы" тип тә атарға кәрәктер...**

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Башта әйткәнемсә: "Нишләп ауылда ҡалманым икән?" - тигән үкенеүҙе юҡҡа сығарыу өсөн дә кәрәк ҡалаларҙағы рухи ауылдар. Ҡалаларға өйрәнгәнбеҙ инде беҙ, күптән ҡала милләге-

**Ә Өфө урамында башҡорт кешеһен осратһаҡ, тәүҙә уның ҡайһы районДан икәнен белешәбеҙ. Икенсе һорауыбыҙ ни өсөн "Ҡайһы ауылдан?" тип яңғырай икән?**

**Эльмира Рәдиф ҡыҙы:** Эйе, шунан ул ауылдағы таныштарҙы һораша башлаһаҡ, ул кеше кәмендә беҙҙең нәҫел йә ҡоҙа булып сыға. Был беҙҙең тамырҙарҙың киң таралған һәм ныҡ булыуы тураһында һөйләй түгелме икән?..

**(Дауамы 10-сы биттә).**

# ЮЛДЫБАЙ ТИГӘН РУХИ АУЫЛЫБЫҘҘА...

## ауылса аралашып, күрешеп йәшәүҙе бәхеткә тиңләйбеҙ

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Беҙҙең ауылдар, асылда, туғанлыҡ принцибы буйынса ҡоролған. Тәүҙә был урынға күсеп килеп, ауылдың нигеҙ һалған кешенең исеме менән аталыуы ла беҙҙә яҡын туғандар итеп яҡынлаштыра. Беҙҙең көсөбөҙ нәҡ туғанлыкта. Ауыл халҡы күпләп ҡалаларға күскән осраҡта ла милләттең цементы булған туғанлыҡ һаҡланырға тейеш. Юҡҡа ғына баҡыйлыҡҡа күсеп, Хоҙай ҡаршыһына барғанда тәүге һорауҙарҙың береһе намаҙ уҡыуың булһа, икенсеһе туғаның менән мөнәсәбәтеңдең һаҡланыуына ҡағылмайҙыр. Был йәһәттән һеҙҙең фекерҙәрегеҙ нисек?**

**Юнир Сәлим улы:** "Ағай-эне талашыр, атҡа менһә, ярашыр" тип әйтелә халыҡ мәҡәлендә. Ысынлап та, тормош булғас, һауыт-һаба шалтырамай тормай. Шуға күрә туғанныңды ғәфү итә белеү мосолман өсөн фарыз. Ырыуҙар хәрәкәтен тәүгеләрҙән булып беҙ 1993 йылда Юлдыбайҙа түңгәүерҙәр ҡорон ойоштороу менән башлап ебәрҙек. Совет дәүерендә бындай ҡорҙар бөтөнләй үткәрелмәне. Шуға күрә үҙгәртеп ҡороуҙар башланып, халҡыбыҙ тәүҙә үҙенең үткәненә ҡараны һәм ырыуын иҫенә төшөрҙө.

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Әле донъяла нимәләр булырын берәү ҙә белмәй. Шуға күрә беҙгә халҡыбыҙҙы һаҡлар өсөн туғанлыҡты нығытырға кәрәк.

**Эльмира Рәдиф ҡыҙы:** Тағы ла бер сәйер күренеш тә бар беҙҙең халыҡта. Кемдер үҙенең тырышлығы менән күтәрелә башлаһа, иң беренсе туғандары, ауылдаштары унан ситләшә башлай. "Эй, әллә кем булып шулайтып йөрөгән була, үҙенең кем икәнен белмәйенсә, беләбеҙ бит инде..." тип әйтәләр ҙә, ауырлыҡ килеп тыуғанда иң беренсе булып уны иҫенә төшөрәләр. Мин бына шундай хәлде, шундай мөнәсәбәтте аңлап бөтә алмайым.

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Миңә лә бындай күренеш менән һирәкләп булһа ла осрашырға тура килә.

**Эльмира Рәдиф ҡыҙы:** Минең бер таныштарымдың улына ата-әсәләре: "Таш менән атҡанға аш менән атып өйрән", тип кәңәш биргәндәр икән, ул быға: "Ниңә, кәстрүлдәге ашты уларҙың өҫтөнә түгергә кәрәкме ни?" - тип көлдөргән.

**Юнир Сәлим улы:** Берәү минең өҫтөмдән туктауһыҙ ялыуҙар яҙҙы. Ул саҡта совхоз директоры булып эшләй инем. Бер мәл уның ҡыҙы мәрхүмә булып ҡалды. Икенсе бер кеше миңә шылтыратып, ялыу яҙыусының машина һорарға унайһыҙланыуы хаҡында әйтте. Баҡһаң, ҡыҙының мәйетен алыҫтағы бер ҡаланан алып ҡайтырға кәрәк икән. Мин уға үҙемдең служебный "Волга" машинаһын һәм ашығыс ярҙам машинаһын бирҙем. Ҡыҙының етеһен уҡыткас, ул миңә илап килеп етте, рәхмәт әйтте.

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Ә мин бындай осраҡта "Һинең туғаныңдың бай булғаны яҡшы, аҡмаһа ла, тама ул", тип әйтә йөрөйөм...

**"Халҡыңды яратып була ул, туғаныңды яратып ҡара" тигән һүҙбәйләнеште нисек аңлайһығыҙ?**

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Туғандарымдың ҙур кеше булып китеүенә, унышҡа өлгәшеүенә һәр ваҡыт ҡыуанып йәшәнем. Егерме йылдан ашыу Нижневартовскиҙа йәшәнем. Бергә эшләгән коллегаларыма тыуған яғымда йәшәгән туғандарым хаҡында һөйләһәм, уларҙың бар йәһәттән камил булыуҙарына һоҡланып, хатта быға ышанып етмәүселәр ҙә табылды. Әлбиттә, идеаль кешеләр булмай, шулай ҙа туғандарың менән ғорурлана белергә лә кәрәк икән.

**Юнир Сәлим улы:** Мин үҙемдең балаларыма ла туғандарҙың ҡәҙерен белергә өйрәтәм. "Булыр илдең балаһы бер-беренә, батыр, тир, бөләр илдең балаһы бер-беренә, бахыр, тир" тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит инде. Маҡтанып һөйләрлек туғаның булғас, һөйләйһең инде. Әгәр ҙә һағыҙ сәйнәп, эт һуғарып йөрөһәң, һинең менән кем маҡтаныр?

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Яубаҫаровтар - аҫыл заттар. Минең ҡайным менән бейемем шулай тиҙәр ине: "Беҙгә ғүмер буйына көнләштеләр, көнләшерлек булғас, балаларыбыҙға ла көнләшәләр, Хоҙайға шөкөр", - тип әйтә торғайнылар.

**Юнир Сәлим улы:** Бер мәл әсәйемә минең өҫтән ялыу яҙыусылар, минең хаҡта ғәйбәт һөйләүселәр күбәйеүе хаҡында әйткәйнем, ул миңә: "Ғорурлан, әгәр ҙә эшкә ашмаҫтай йүнһеҙ кеше булһаң, хатта ялыу ҙа яҙмаҫтар, ғәйбәт тә һөйләмәҫтәр ине", - тип күңелемдә үҫтереп ебәрҙе.

**"Беҙҙән насар булғандар ғына беҙҙең хаҡта насар уйлайҙар, ә беҙҙән яҡшы булғандар беҙҙең хаҡта уйлап та бирмәйҙәр", тигән һүҙҙәрҙе раҫлай һеҙҙең был миҫалдар...**

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Урал ағай Ураҡсинға мин һәр ваҡыт һоҡландым. Ул бер ваҡытта ла бер кемгә лә көнләшмәне һәм башҡалар хаҡында насар һүҙ һөйләмәне. Үҙе шул тиклем ябай булды, мин унан күп нәмәгә өйрәндем. Уның өлгөһөндә ҡул аҫтымда эшләгән кешеләргә яҡшы мөнәсәбәттә булһам, аҙаҡ хеҙмәткәрҙәрем дә үҙемә ҡарата шундай уҡ мөнәсәбәттә була башлай икәнен тойоп йәшәнем гел.

**Юнир Сәлим улы:** Вазифа килә лә китә, кеше булып ҡалыу мөһим.

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Үҙен-үҙе хөрмәт иткән кешене генә башҡалар ҙа хөрмәт итәләр. Йәшәй-йәшәй шуға ла өйрәндем. Ни өсөн тигәндә, үҙен-үҙе хөрмәт иткән кеше башҡаларға насар була алмай.

**Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел, тиҙәр. Быны нисек аңларға була тип уйлайһығыҙ?**

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Урам буйлап китеп барғанда ла ҡаршыңа осраған кешене башаҡ, үҙеңде һалам итеп тойорға кәрәктер.

**Юнир Сәлим улы:** Алама, йүнһеҙ кешегә ҡарап та ғибрәт, һабаҡ алырға була. Әгәр ҙә һин унан һабаҡ алаһың икән, тимәк, насар булмаҫҡа өйрәнәһең.

**Һеҙ бөгөн Өфөлә йәшәйһегеҙ, тормошоғоҙҙа билдәле уңышҡа өлгәшеп, танылыу яулағанһығыҙ. Шулай ҙа ҡасандыр ауылда ҡалған Гүзәл, Юнир һәм Эльмира менән хәҙерге һеҙ араһында ниндәй айырма бар тип уйлайһығыҙ?**

**Юнир Сәлим улы:** Айырма берәү генә - йәштә генә.

**Эльмира Рәдиф ҡыҙы:** Әсәйемдең яулығын башыма бәйләп, һинд киноларындағы героиналар кеүек бейеп, көтөү ҡаршыларға сыҡҡан Эльмира менән бөгөнгөһө айырыла инде ул. Хәҙерге Эльмира байтаҡ ҡына тормош тәжрибәһе туплаған, уның күп кенә күренеш-төшөнсәләргә ҡарата үҙ фекере бар. Бик күпте кисерергә тура килде, шул уҡ ваҡытта бер ҡасан да бирешмәгән үҙем менән ғорурланам да. Үҙемде хөрмәт итәм, сөнки мин рухи яҡтан нығынғанмын, көслөмөн. Был сифаттарым ерҙән, Йылайырҙан, Юлдыбайҙан, шул ерҙә йәшәгән кешеләрҙән килә.

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Минең дә төп айырма йәштә генәләр.

**Яңынан йәшәргә тура килһә, икенсе төрлө тормош юлы һайлар инегеҙме?**

**Юнир Сәлим улы:** Йәшәү - асфальт юлдан ғына барыу түгел. Юлһыҙ ерҙән дә барырға, барыһын да кисерергә тура килде. Бала ҡайғыһы ла ситләп үтмәне. Үкенестәр ҙә бар, әммә бер нәмәне лә үҙгәртергә теләмәҫ инем. Маңлайыңа һыҙылған, Аллаһ Тәғәлә биргән яҙмышты үҙгәртеү ҙә мөмкин түгелдер.

> ***Ай һайын дәүләткә миллионлаған һумдар һалым түләйем икән, тимәк, мин кешеләргә һәм дәүләткә лә кәрәкмен. Бынан тыш, мәрхәмәтлек акцияларында ҡатнашам, Махсус хәрби операцияға гуманитар ярҙам күрһәтәм. Бер һалдатҡа каска ебәрҙем һәм унан шундай йөкмәткеле хат алдым: "Гүзәл Юныс ҡыҙы, әгәр ҙә һеҙҙең каскағыҙ булмаһа, мин тере ҡалмаҫ инем. Һеҙгә оло рәхмәт!" Шундай тормошто нисек итеп үҙгәртәһең инде?***

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Күптән пенсияға сыҡһам да, һаман да эшләйем. Ҙур заказдар килеп сыға, миңә эшкә йөрөүе ҡыҙыҡ. Ай һайын дәүләткә миллионлаған һумдар һалым түләйем икән, тимәк, мин кешеләргә һәм дәүләткә лә кәрәкмен. Бынан тыш, мәрхәмәтлек акцияларында ҡатнашам, Махсус хәрби операцияға гуманитар ярҙам күрһәтәм. Бер һалдатҡа каска ебәрҙем һәм унан шундай йөкмәткеле хат алдым: "Гүзәл Юныс ҡыҙы, әгәр ҙә һеҙҙең каскағыҙ булмаһа, мин тере ҡалмаҫ инем. Һеҙгә оло рәхмәт!" Шундай тормошто нисек итеп үҙгәртәһең инде?

**Эльмира Рәдиф ҡыҙы:** Яҙмыш миңә ниндәй һынауҙар насип итһә, шуға риза булып йәшәйем. Ниндәйҙер эште башлайым да, килеп сыҡмаһа, тукталып торам. Һуңынан барыбер ҡайҙандыр мөмкинлек килеп сығып, ниәттәрем бойомға аша. Эштән кеше үлмәй, тип йәшәйем.

**Әйҙәгеҙ, әҙерәк хыялға бирелеп алайыҡ. Әгәр ҙә Өфө ҡалаһында "Юлдыбай" тигән карауанһарай төҙөргә ҡушһалар, һеҙ уны нисегерәк итеп күҙ алдына килтерер инегеҙ? Унда ҡунаҡ йорто ла, сауҙа рәттәре лә, кафе ла булырға тейеш. Гүзәл Юныс ҡыҙы, һеҙ архитектор булараҡ, ул йортто нисек проектлар инегеҙ? Юнир Сәлим улы, һеҙ ул йорттоң хужалыҡ эштәрен нисек ойошторор инегеҙ? Эльмира, һин үҙеңдең актерлыҡ һәләтеңә ярашлы ниндәй саралар ойошторор инең, аш-һыу оҫтаһы булараҡ, нимәләр әҙерләр инең?**

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Шуға оҡшаған проектты беҙ Питерҙа ла эшләй башлағайныҡ. Ул этноауыл стилендә башҡорт тирмәләренән, биналарҙан ғибәрәт ине. Килеп сыҡманы. Шул проектты саҡ ҡына үҙгәртер инек тә, барыбер эшләп сығарыр инек. Унда ял итер өсөн, йоҡлар өсөн ҡунаҡ бүлмәләре лә кәрәк булыр ине. Ул йорттоң музейында Юлдыбай ауылының, түңгәүер ырыуының, Йылайыр төбәгенең тарихы ла сағылыш табыуы мотлаҡ. Унда "Ишмулла" бүлмәһендә ҡурай моңо ағылып торор ине. Конференц-залды ла планлаштырыр инем мин.

**Эльмира Рәдиф ҡыҙы:** Ул йортта мотлаҡ актовый зал, сәхнә кәрәгәсәк. Минең былай ҙа хыялым бар ине. Әйтәйек, быяланан торған ике ҡатлы йорт. Уның исеме "Башҡорт йорто", "Башҡорт өйө" йәки "Ай ҡыҙында ҡунаҡта". Был йортта аш-һыу әҙерләй торған кухня, шулай уҡ мастер-кластар үткәрә торған урын булыуы ла шарт.

**Гүзәл Юныс ҡыҙы:** Эльмира, ул йорт быяла булмаһын ул. Сөнки быяла йортто йылытыр өсөн таш йортҡа ҡарағанда өс тапҡыр күберәк йылылыҡ кәрәк буласаҡ.

**Эльмира Рәдиф ҡыҙы:** Бәлки, ВДНХ һымаҡ бер йорт, эко-йорт булһын да, уның эсендә "Йылайыр", "Әбйәлил", "Хәйбулла", "Баймаҡ" һ.б. атамалы бүлек-тирмәләр урынлашһын.

**Юнир Сәлим улы, Гүзәл Юныс ҡыҙы төҙөгән, Эльмира Рәдиф ҡыҙы биҙәгән "Юлдыбай" карауанһарайының йәки эко-йортоноң директоры булараҡ эште нисек ойошторор инегеҙ?**

**Юнир Сәлим улы:** Өфөлә унан да шәберәк йорт булмаҫ ине. Унда республика райондарынан ғына түгел, Рәсәй ҡалаларынан, Мәскәүҙән, Питерҙан, сит илдәрҙән ҡунаҡтарҙы ҡабул итер инек.

**Хөрмәтле юлдыбайҙар, ҡыҙыҡлы әңгәмәгеҙ өсөн һеҙгә оло рәхмәт. Ағымдағы Йылҡы йылында ниәттәрегеҙ бойомға ашһын!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Һуңғы 20 йылда аҡылы камил булмаған һәм физик яҡтан ғәрип - зәғиф балалар һаны 10 процентҡа артҡан. Яңы тыуыусыларҙың 80 проценттан күберәге сирле. Мәктәпте тамамлаусы һәр 10 йәш үҫмерҙең береһе генә сәләмәт!***

УЙЛЫҒА - УЙ

# ИҢ ӘҘӘПЛЕ ТЕЛ...

## һүгенеүҙән азат булғаны



**Инглиз ғалимдары бик күп тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң шундай һығымтаға килгән: Гренландия эскимостарының теле доньялағы иң әҙәпле телдәрҙең береһе икән. Был телдә кешене рәнйетә торған бер генә һүҙ ҙә юҡ!**

Әшәке һүҙ әйтеү, ҡарғау, һүгенеү элек-электән бик күп халыҡтарҙа осраған. Әммә һуңғы йылдарҙа ҡолас йәйгән әшәке телмәрҙе донъяның бер генә иле лә хәтерләмәйҙер. Өлкән быуын, һуғышҡа тиклем был ҡәбәхәтлек һирәк осрай ине, тип иҫкә ала. Һүгенеү Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында киң таралған, тип тә иҫәпләй улар.

Рәсәй Фәндәр академияһының Петр Гаряев етәкселегендәге бер төркөм ғалим, кеше үҙенең генетик аппаратын төҙәй йәки емерә ала, тигән шаҡҡатырғыс һығымтаға килгән. ***Йәғни ДНК кеше һөйләмен ҡабул итә икән. Уның тулҡын "ҡолаҡтары" шундай тирбәлештәрҙе ҡабул итеүгә яраҡлашҡан. Кеше хатта эстән генә һүгенеп уйлаһа ла, уның йөкмәткеһе электромагнит каналдары буйынса туҡымаларға (мускулдарға) барып етә. Иң мөһиме - ДНК үҙе алған мәғлүмәткә битараф ҡалмай: бер хәбәр уны терелтә, ә икенсеһе - йәрәхәтләй.*** Намаҙ уҡыу, яҡшы һүҙ һөйләү, күңелдән генә яҡшылыҡ тураһында уйлап йөрөү - генетик аппараттың мөмкинлектәрен арттыра. Ә ҡарғау, һүгенеү - организмдың нормаль эшләүен тәьмин итеүсе программаларҙы емерә. Киләһе быуындың сәләмәтлеге лә һинең ДНК-дың ниндәй йөкмәткеле булыуынан тора. Хатта һөйләшеүҙә үҙең ҡатнашмаһаң да, һүгенеүселәр, яман ғәйбәт, әшәкелек тураһында һөйләшеүселәр эргәһендә генә торһаң да, бының һиңә тәьҫире теймәй ҡалмай.

Йәки, киреһенсә, мәсеттәргә йөрөһәң, ғилемле хәҙрәттәрҙе, остаздарҙы, изге күңелле аҡһаҡал-ағинәйҙәрҙе тыңлаһаң, яҡшы кешеләр менән аралашһаң - һөҙөмтәһе һинең сәләмәтлегең файҙаһына буласаҡ! Ҡайһы ваҡыт бер һүҙ ҙә ауырыуға килтереүе, йәки бер шифалы һүҙ ҙә ауырыуҙы терелтеүе мөмкин.

Түбәндәге һандарға иғтибар итегеҙ әле: беҙҙең илдә һуңғы 20 йылда аҡылы камил булмаған һәм физик яҡтан ғәрип - зәғиф балалар һаны 10 процентҡа артҡан. Яңы тыуыусыларҙың 80 проценттан күберәге сирле. Мәктәпте тамамлаусы һәр 10 йәш үҫмерҙең береһе генә сәләмәт!

Дөрөҫ, был ауырыу балаларҙың сирҙәренең сәбәптәре күп төрлө. Әммә әлеге һандарҙа һүҙҙе үлсәп һөйләмәүҙең, йәғни һүгенеүҙең дә өлөшө бик ҙур!

Әшәке теллелек, һүгенеү, ҡарғау, битәрләү һүҙҙәрен элек йәмғиәттең төбөнә төшкән, түбәнге ҡатламға әйләнгән боҙоҡ, намыҫын юғалтҡан кешеләр генә ҡулланһа, хәҙерге йәмғиәттә, ҡайһы бер мосолмандар араһында ла был күренеш нормаға, ғәҙәти хәлгә әйләнеп бара.

Ҡайһы бер медицина ғалимдары һәм психологтар әшәке һүҙлелекте ауырыу төрҙәренә индерә. Уны улар "копролалия" тип атай. Был атама "копрос" тигән грек һүҙенән алынған, "копрос" - бысраҡ телмәр тигәнде аңлата. Медицинала бер ниндәй сәбәпһеҙ әшәке һүҙ менән һүгенеп һөйләү менән мауығыуҙы шулай атайҙар икән.

Ошо урында беҙҙең башҡорт телендә лә шундай һүҙ булғаны иҫкә төштө. Мин бала саҡта әсәйемдән бер кеше тураһында: "Эргәһенә яҡын барып һөйләшерлек кеше түгел бит ул - шул тиклем буғауыҙ", - тип әйткәнен ишетеп, ундай бысраҡ ауыҙ менән нисек ашай икән, тип аптырағанымды хәтерләйем. Туған телебеҙҙә шундай мәргән әйтелгән һүҙ булғас, тимәк, халыҡ бындай күренеш менән һис тә килешмәгән, ғәйепкә алған. Дин ҡәтғи тыйған. Совет осоро дин тыйылған ваҡыт булһа ла, ололар һүҙенә ҡолаҡ һалалар ине әле.

Кешенең һүгенеп һөйләшеүе үҙенән һәм ғаилә тәрбиәһенән дә киләлер. Һүгенеү күренеше һуғыштан һуң таралды, тиһәләр ҙә, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, 7 йыл армия хеҙмәтендә йөрөп ҡайтыусы атайым тураһында әсәйем күрше апайға: "Беҙҙең Ғәлиаслан һүгенә белмәй бит ул", - тигәне хәтерҙә. Ысынлап та, беҙ бала саҡта атайымдан да, әсәйемдән дә ундай бысраҡ һүҙҙәр ишетмәнек.

Ә хәҙер? Яңы теле асыла башлаған балаларҙы, тиҙерәк һөйләшергә өйрәтәбеҙ, тип, һүгенергә өйрәтеп торған, шунан ҡыҙыҡ табып көлгән ата-әсәне аҙ осратмайбыҙ, ауыҙыбыҙҙан ниндәй һүҙ сыҡҡанына иғтибар итмәйбеҙ. Уҡыусы балаларҙың урамда, хатта уҡыған ерҙәрендә үҙ-ара һөйләшкәнен ҡайһы саҡ яҙа-йоҙа ишетеп ҡалһаң, иҫ китмәле бит. Ә яңыраҡ интернет селтәрҙәренән Әбйәлил районында 13-14 йәшлек ҡыҙҙарҙың 12 йәшлек ҡыҙҙы туҡмаған видеоны ҡарап, кемдең күңеле тыныс ҡалһын! Ул ҡыҙҙарҙың ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙәрҙе, боронғолар әйтмешләй, эт ашамаҫ. Һәм бындай видеолар берәү генә түгел. Ололар араһында ла һүгенеү һүҙҙәре ҡыҫтырып һөйләшеүселәр байтаҡ, йәнәһе, "связка слов". Үҙебеҙҙең ни тиклем бай ҙа, ябай ҙа, наҙлы ла, яғымлы ла туған телебеҙ булғанда, ни сәбәп менән һөйләмебеҙҙе бәйләргә һүҙ тапмайбыҙ, гонаһҡа батып булһа ла әшәке һүҙ эҙләйбеҙ? Беҙҙең халыҡҡа хасмы ни ул? Ҡайҙа барабыҙ?

Ислам динендә әшәке һүҙлелек, кешене әрләү, берәүгә лә ҡағылмаған хәлдә лә, ҡаты тыйылған. Ә кемделер берәүҙе әрләгән кеше әшәке һүҙҙәр, ҡарғау менән бергә һүгенеү һүҙҙәрен дә ҡулланһа, ул кешенең гонаһы тағы ла нығыраҡ арта икәнен билдәләп китеү кәрәк. Аллаһ Илсеһе әйткән: "Тыйнаҡлыҡ - имандан, ә иман - ожмахтан. Ә әшәке һүҙлелеккә килгәндә, ул тупаҫлыҡтан, ә тупаҫлыҡ - тамуҡтан"."Оялсанлыҡ һәм аҙ һүҙлелек - имандың ике тармағы, ә әшәке теллелек һәм таҫма теллелек - ике йөҙлөлөктөң ике тармағы".

Был хәҙистәрҙә тәҡүәле һәм Раббыһынан ҡурҡҡан мосолман кешеһе әрләшеү, һүгенеү, яла яғыу, ҡарғау кеүек әшәке ғәҙәттәренән тартынһын өсөн етерлек дәлилдәр килтерелә. Ысынында, Исламда кеше намыҫына тейеү ҡәтғи тыйылған! "Ислам динендә булған ҡәрҙәшен мыҫҡыл иткән кешегә яза етерлек, һәм шулай уҡ, һәр мосолман өсөн икенсе мосолмандың ғүмере, милке һәм намыҫы тейелгеһеҙ!" - тиелә хәҙистә. Әбү Һөрәйрә тапшырған тағы бер хәҙисте килтермәй мөмкин түгел: "Аллаһ Илсеһе әйткән: "Бер-берегеҙҙән көнләшмәгеҙ, хаҡтарҙы арттырмағыҙ, үҙ-ара нәфрәттән баш тартығыҙ, арағыҙҙы өҙмәгеҙ, сауҙаларығыҙҙы боҙмағыҙ һәм туғандар булығыҙ, иий, Аллаһ ҡолдары! Ысынында, мосолман мосолманға - туған, шуға бер мосолман икенсеһен ҡыйырһытырға, түбәнһетеп ҡарарға, ярҙамынан мәхрүм итергә тейеш түгел, ә Аллаһтан ҡурҡыу бында йәшенгән", - тип өс тапҡыр күкрәгенә төртөп күрһәтә".

Кешеләрҙе, хайуандарҙы, тирә-яҡтағыларҙы әрләү, һүгеү, ҡарғау тураһында Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) тағы шулай тип әйткән: "Мосолман мыҫҡыл итеүсе, ҡарғаусы, әрләүсе, һүгенеүсе булмаҫ".

Ҡарғалған кеше мосолман булһа, был тағы ла ҡурҡынысыраҡ: "Мосолманды ҡарғау уны үлтереүгә тиң", - тиелә хәҙистә.

Шулай уҡ беҙ йыш ҡына шаярабыҙ, көләмәстәр, ҡайһы саҡта анекдоттар һөйләйбеҙ. Бында ла сама белергә кәрәк. "Күп көлмә, сөнки күп көлөү йөрәкте үлтерә", - тигән Бәйғәмбәребеҙ. Был хәҙисте "көлөргә һәм шаярырға һис ҡушылмаған" тип аңларға ярамай. Мосолманға ҡайһы ваҡыт көлөп, шаярып, ҡыҙыҡлы хәлдәр тураһында һөйләп алырға ярай, ләкин быны эшләгәндә, халыҡса әйткәндә, "арттырып ебәрергә" ярамай. "Ҡайғы шундай кешегә: ул кешеләрҙе көлдөрөр өсөн нимәлер һөйләй һәм алдай. Ҡайғы уға, ҡайғы уға, ҡайғы уға!", - тигән Бәйғәмбәребеҙ. Өҫтәүенә, халыҡты көлдөрәм тип нимәлер һөйләгән кеше мотлаҡ кемдәндер көләсәк һәм уны мәсхәрә итәсәк. Шуға Ҡөрьәндә: "Ҡайғы төрлө әрләүсе һәм хурлаусыға!" - тиелгән.

Ауыҙығыҙҙы үлсәп асығыҙ, тик яҡшы һүҙҙәр генә һөйләгеҙ. Һөйләмәҫ борон үҙ һүҙҙәрегеҙгә хужа - һеҙ, ә һөйләп ташлағандан һуң һүҙҙәрегеҙ һеҙҙең хужағыҙға әүерелә. "Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Аллаһтан ҡурҡығыҙ һәм тоғро һүҙ һөйләгеҙ! Ул һеҙҙең эштәрегеҙҙе төҙәк ҡылыр, гонаһтарығыҙҙы кисерер. Кем Аллаһҡа һәм Уның рәсүленә буйһона, шул бөйөк уңышҡа ирешер", - тиелә "Фирҡәләр" сүрәһендә.

Кеше күп ваҡытын һөйләшеп үткәрә, һәм уның һәр һүҙе фәрештәләр тарафынан яҙылып бара: "Ул бер генә һүҙ әйтһә лә, уның эргәһендә күҙәтеүсе әҙер". - тиелә "Ҡаф" сүрәһендә. Шуға күрә һәр нәмәне уйлап ҡына һөйләйек.

Иғтибар иткәнегеҙ бармы? Кешеләр араһындағы бәхәстәр күберәк тел арҡаһында килеп сыға. Ауыҙың әйткәнде ҡолағың ишетмәһә, шулай була, ә һөҙөмтә аяныслы булыуын көт тә тор. Был турала Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) былай тип киҫәтә: "Кем Аллаһҡа һәм Ҡиәмәт көнөнә ышана, хәйерле (файҙалы) һүҙ генә әйтһен, йәки өндәшмәһен".

Был - динебеҙҙә кешеләрҙең үҙ-ара аралашыуының төп ҡағиҙәһе. Әгәр ҙә кем менән булһа ла әңгәмә ҡорорға йыйынһаҡ, һөйләгән хәбәрҙәребеҙҙең донъя йәки ахирәт өсөн файҙалы булыу-булмауын уйлайыҡ. Ә бына мыҫҡыл итеү, рәнйеш, ғәйбәт һәм һүҙ бәйләргә (связка слов) тип ҡайһы берәүҙәр ҡулланырға яратҡан һүгенеү һүҙҙәренән һаҡланырға кәрәк. Был осраҡта һәр һүҙебеҙ өсөн Аллаһ ҡаршыһында яуап тотабыҙ икәнде онотмау мөһим.

Шуға күрә үҙебеҙҙе уратып алғандарға файҙалы, күңелдәренә ятып торған, кәйефте күтәрә торған һүҙҙәр генә һөйләһәк, дуҫтарыбыҙ күбәйер, халыҡ алдында йөҙөбөҙ аҡ булыр. Тел күрке - һүҙ, тип халыҡ бушҡа әйтмәгән.

**Зифа ИЛБАҠТИНА.**
**Сибай ҡалаһы.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЯҠШЫ ҒӘҘӘТ ТӘ БӘХЕТ



Бер риүәйәт иҫкә төштө. Бик борон замандарҙа уҡ физиогномистика менән шөғөлләнеүсе белгестәр булған икән. Шулай бер көн шундай танылған белгесте уҡыусылары үҙҙәренең уҡытыусыһы Сократҡа алып килгән, ти. Был физиогномист Сократтың киң маңлайына, сәкәйеп торған йәмшек танауына, ҡалын ирендәренә ҡарап: "Был бик уҫал, аҡылы самалы, холоҡһоҙ кеше", - тип бәйән иткән. Сократтың уҡыусылары, нәфрәтләнеп, йоҙроҡтарын төйнәп, белгесте туҡмап ташларға ынтылған. Ә Сократ уҡыусыларын: "Ул бөтәһен дә дөрөҫ әйтеп бирҙе. Мин шундай кеше булырға тейеш инем, тик минең ундай булғым килмәне", - тип тынысландырған.

Физиогномистикаға, магияға, йондоҙнамәләргә ышаныу кешене дөрөҫ йәшәтәме? Юҡтыр! Башыңды төрлө юҡ-барға ышаныу, хөрәфәт менән тултырһаң, йәшәүе лә ауырыраҡтыр, тип уйлайым мин. Александр Пушкиндың да:

*"Привычка нам свыше дана*
*Залогом счастья она..."* - тигән шиғри юлдары бар бит. Әгәр яҡшы ғәҙәт, аҡыл туплап ғүмер итһәң, миңдәрең булмаһа ла, йондоҙҙарҙан юратмаһаң да, бәхетле булырһың.

**Айгөл АХУНОВА.**

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҒӘЙБӘТ ҺӨЙЛӘП...
## ҡәнәғәтлек ала кемдер

■ Психологтар фекеренсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 85 проценты башҡаларҙың тормошонда булған хәлде ишетеүҙән ҙур ҡәнәғәтлек ала, ә һәр унынсы гүзәл зат был серҙе башҡаларға ла һөйләй. Һуңғы яңылыҡтарҙы тикшереп алыу кешегә үҙенең тормошон тулыландырырға мөмкинлек бирә, имеш. Доктор Колин Гилл иҫәпләүенсә, ғәйбәт "сәйнәү" серотонин кеүек гормондар бүленеп сығыуына булышлыҡ итә, был гормондар стресс һәм хәүеф күләмен кәметә. Тимәк, ғәйбәт һөйләү - кешегә үҙен бәхетлерәк тойорға ярҙам итә. Гарвард университеты ғалимдары иҫәпләүенсә, ғәйбәт башҡа кешеләрҙең холҡо, характеры тураһында мәғлүмәт тупларға булышлыҡ итә, эволюция күҙлегенән сығып ҡарағанда, был үтә мөһим. Йәғни, кеше башҡалар миҫалында дөрөҫ йәшәргә өйрәнә.

■ Күп тикшенеүҙәр күрһәтеүенсә, хохлатка тигән үлән ауыртыуҙы баҫыу һәләтенә эйә икән. Уның составындағы үҙенсәлекле матдә дегидрокорибульбин кешенең эмоциональ торошо өсөн яуап биреүсе нейрондар әүҙемлегенә йоғонто яһай ала. Был матдәгә организм өйрәнмәй, шуға ла уны киләсәктә медицинала ҡулланырға уйлайҙар. Был үсемлек ҡытай халыҡ медицинаһында йыш ҡулланыла. Ул кешеләрҙе лә, хайуандарҙы ла дауалай.

■ Баланың ғаиләлә нисәнсе булып тыуыуы уның интеллектына йоғонто яһай, имеш. Ғалимдар был йәһәттән күп тикшеренеүҙәр үткәргән. Бәҡтиһәң, бала ни тиклем өлкәнерәк була, уның интеллекты бәләкәс ҡустылары һәм һеңлеләре менән сағыштырғанда 18 йәшкә тиклем юғарыраҡ була икән. Әммә ғаиләләге өлкән балалар һимереү, аллергия менән йышыраҡ ауырый. Уртансы балалар һирәгерәк алдаша, улар фантазияға бирелеп бармай. Улар шулай икенсе яртыларына тоғороҡ була. Өлкән балалар ныҡлы сәләмәтлектәре менән һәм хис-тойғоға артыҡ бирелеп бармауҙары менән айырылып тора.

■ Плимут университеты психологтары яман шеш менән ауырыусы өлкәндәрҙе тикшереп, уларҙың барыһын да бер нәмә берләштереүен асыҡлаған. Тикшеренеү барышында уларҙың яуаптарын астма, диабет, йөрәк ауырыуҙары менән яфаланыусыларҙың яуаптары менән сағыштырғандар. Һөҙөмтәлә, яман шеш менән ауырыусыларҙың 79 проценты бала саҡта физик яҙаларға дусар булыуы билдәле булған. Бындай стрестан һуң организмда яйлап онкологик сир барлыҡҡа килгән. Астма менән ауырыусыларҙың яртыһын ғаиләләрендә кәмһеткәндәр. Тимәк, бала саҡта алған стресс өлкәнәйгәс яман шеш, астма, йөрәк сирҙәренә алып килеүе ихтимал.

■ Йомортҡаның ҡабығы сәләмәтлек өсөн файҙалы. Бәҡтиһәң, ул үҙенең составы буйынса һөйәк туҡымаһына оҡшаған һәм унда эремсек һәм йомортҡаның үҙенә ҡарағанда кальций күберәк. Венгрия тикшеренеүселәре үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, йомортҡа ҡабығында организм өсөн кәрәкле бөтөн элементтар бар. Бынан тыш, ул рахит һәм анемия менән яфаланыусы балаларға файҙалы.

*ШУНДАЙ ФАРАЗ БАР*

# БОРОНҒО БАШҠОРТТАРҘЫҢ...

## Яңы йыл байрамы



**Бына тағы бер йыл (ике меңдә егерме бишенсе йыл) үтеп китте. Әҙәм балалары Яңы йыл ығы-зығыһы менән мәшғүл булып, шыршы биҙәп, үҙҙәре лә битлек (маскалар) кейеп, йәки төрлө ҡиәфәткә инеп биҙәнеп, шау-гөр килде.**

Китаптарҙан уҡып белеүебеҙсә, беҙ, Рәсәй дәүләтендә йәшәүселәр, был байрамды Петр батша әмере буйынса үткәрә башлағанбыҙ, тип беләбеҙ. Ә ысынбарлыҡта был байрамдың бик тәрәндә ятҡан үҙ тарихы бар һәм уны беҙҙең халыҡ, йәғни башҡорттар, элек-электән билдәләгән. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ был байрамды Нардуған тип атаған. Улар уны хәҙерге кеүек 31 декабрҙән 1 ғинуарға күскән көндә түгел, ә иртәрәк башлаған һәм һуңыраҡ тамамлаған. Был байрам боронғо төркиҙәрҙә лә 25 декабрҙа башланып, бер аҙна буйы дауам иткән. Бындай мәғлүмәттәрҙе Л.Н.Гумилев, Морат Аджи һәм сит ил төркиәтселәре хеҙмәттәренән табырға була.

Боронғо башҡорттар йыл башын иң ҡыҫҡа ҡышҡы көн менән бәйләгән. Йылдың 22 декабре - иң ҡыҫҡа көн һәм иң оҙон төн булған тәүлек. Бының шулай икәнен фән күптән аныҡлаған һәм был беҙҙең бөтәбеҙ өсөн дә "ике икең - дүрт", тигән кеүек үк, аңлатыу талап ителмәгән төшөнсә. Ә бына заманса фән формалашҡанға ҡәҙәр боронғо кешеләр, шул иҫәптән боронғо башҡорттар, белдеме икән 22 декабрҙең иң оҙон төн һәм иң ҡыҫҡа көн булған тәүлек икәнен, белһәләр, ҡасаныраҡ беләләр икән? Был туралағы мәғлүмәттәрҙе иң боронғо рухи ҡомартҡыбыҙ - "Урал батыр" ҡобайырынан табырға мөмкин. Сөнки был ҡобайырҙа боронғо башҡорттарҙың астрономик белемдәре лә үҙ сағылышын тапҡан бит.

Кемдәр "Урал батыр" ҡобайырын уҡыған, хәтерләргә тейеш - ағалы-ҡустылы Шүлгән менән Урал ата йортонан сығып китеп, аҡ һаҡаллы ҡартҡа юлығып, унан ике юл барлығын белгәс, Урал уң яҡҡа китә һәм иң тәүҙә Ҡатил батша иленә барып сыға. Был илдең ҡайһы тирәлә икәнен, унда Уралдың ҡасаныраҡ барып сығыуын асыҡларға теләп эҙләнә торғас, батырҙың был илгә йылдың 22 декабре, йәғни ҡыш миҙгеле, йыл башланырға торған саҡта барып сығыуы асыҡланды. Мәҡәләмдә был фактты асыҡлау өсөн ниндәйерәк ысулдар ҡулланыуым тураһында яҙып тормайым. Был турала урыҫ теленән нәшер ителгән "Космогонические воззрения древних башкир" тип аталған китабымда аңлатып яҙғайным. Гәзит уҡыусыларға ни өсөн Ҡатил иленә барған ваҡиғаларҙың Яңы йыл башына, 22 декабргә тап килеүе тураһында ғына яҙып киткәнмексемен. Әле "Яңы йыл байрамы" тураһында һүҙ алып барғанда боронғо ата-бабаларыбыҙҙың календарҙың был көнө тураһында мәғлүмәтле булыуын, "Яңы йыл", "Ҡыш бабай" тигән төшөнсәләрҙең беҙгә урыҫ (киңерәк алғанда - Европа) мәҙәниәте аша ғына түгел, ә борон-борондан билдәле булыуын әйтеп киткем килә. Әлбиттә, боронғо башҡорттар Яңы йылды хәҙерге кеүек шыршылар биҙәп, Ҡыш бабай, Ҡарһылыу булып кейенеп үткәрмәгән. Әммә улар ҙа Яңы йыл башын үҙҙәренсә байрам итеп, билдәләп киткән, сөнки был дата улар өсөн тик астрономик ваҡиға ғына булмаған. Был дата менән боронғо кешеләр бик күп нәмәне бәйләгән. Быны беҙ "Урал батыр" ҡобайырында Ҡатил илендә Урал шаһит булған, ҡатнашҡан ҡанлы йола атҡарыу ваҡиғаларынан күрәбеҙ. Ул ваҡиғаларҙа тасуирланған юлдарҙың серле мәғәнәһенә, символикаһына асҡыс табып, уларҙың мәғәнәһен асыҡлағас, был илдәге ритуалдарҙың йыл аҙағында, йәғни 22 декабрҙә, иң ҡыҫҡа көн менән иң оҙон төн булған көндә, башҡарылыуын аңларға мөмкин булды.

Тикшеренеүҙәрем барышында Уралдың сәйәхәте Ҡояштың бер йыл эсендә үткән маршруты буйынса үтеүе асыҡланды. Бер йыл эсендә Ҡояш күктә ниндәй юлды үтһә, Урал да шул юлды үтә. Боронғолар хәҙергесә "Ер Ҡояш тирәләй әйләнә" тип түгел, ә, киреһенсә, "Ҡояш ер тирәләй әйләнә тип уйлаған. Ер тирәләй әйләнешендә Ҡояш дүрт (тик дүртәү генә - **Авт.**) нөктә аша үтә. Был нөктәләрҙе Ҡояш 22 декабрь, 22 март, 22 июнь, 22 сентябрь көндәрендә үтә. Күреүегеҙсә, был даталар календарҙағы ҡышҡы иң ҡыҫҡа көнгә; яҙғы көн менән төн тигеҙләнгән саҡҡа; йәйге иң оҙон көнгә; көҙгө көн менән төн тигеҙләнгән саҡҡа тап килә. Боронғо кешеләр был дүрт нөктәне бик боронғо дәүерҙәрҙә, беҙҙең эраға ҡәҙәр үк асыҡлай алған, һәм был белемде донъя көткәндә, календарь төҙөгәндә файҙаланған.

Ҡобайырҙа Урал тереһыу эҙләп, төрлө илдәргә барып сыға. Эпоста "Биш ил барын беләм мин", тигән юлдар бар. "Береһендә үҙем тыуҙым, икеһен барып күрҙем, тағын икәүһен күрергә китеп барам мин әле", ти Урал Һомай менән осрашҡас. Был юлдарҙан Уралдың биш илде үтәсәген аңларға мөмкин. Был ысынлап та шулай. Ошо биш илдең береһе - иң тәүгеһе - Урал үҙе тыуған ил, йәғни урталағы үҙәк булһа, ҡалған дүртеһе - әлеге даталар менән бәйле илдәр. Йәғни, үҙ иленән сығып киткәс, Урал да, Ҡояш кеүек үк, донъяны дүрт тарафтан урап сыға һәм уның һәр тарафына ул баяғы даталарға тап килтереп юлыға.

Ҡатил илендә Урал батшаның усал үгеҙе менән көрәшә, уны еңә, Ҡатилдың ҡыҙының ҡулынан алма ала һәм уға өйләнә. Был хәл-ваҡиғаларҙың бөтәһенең дә символикаһы бер үк - Яңы йыл башланыуға ишаралау. Төркиҙәрҙең һәм һинд-иран халыҡтарының мифологияһында үгеҙ (тур, зубр кеүектәр - **Авт.**) йыл символы булып тора. Мәҫәлән, якуттар әле булһа төштәрендә үгеҙ менеп барғандарын күрһәләр, быны йылдың именаман үткәрәсәккә юрайҙар. Сөнки улар өсөн үгеҙ - йыл символы булып тора. Улар шулай уҡ "үгеҙ үҙе менән ҡыш килтерә", тип тә ышанғандар. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа ҡышты үгеҙ менән бәйләгән. Мәҫәлән, бер башҡорт йомағында "ҡыш - үҙ көсө менән маһайыусы үгеҙ", тип һүрәтләнә. Беҙҙең халыҡта әле булһа "ҡышҡы селлә үгеҙ мөгөҙөн һындырыр", тигән ырым йәшәп килә. Боронғо һинд-иран мифологияһында үгеҙ 22 декабрға тап килгән иң ҡыҫҡа көн, йыл башы менән бәйле хайуан, тип ҡарала.

Күп кенә боронғо халыҡтарҙа үгеҙ "Тимер ҡаҙыҡҡа", "Етеген" йондоҙлоғона яҡын, төньяҡ менән бәйле ниндәйҙер бер йондоҙлоҡтоң исеме лә булып торған, ти астрономияны, уның тарихын өйрәнеүсе ғалимдар. Мәҫәлән, боронғо Критта йәшәүсе минойлыларҙа, боронғо эстондарҙа һәм башҡа ҡайһы бер боронғо халыҡтарҙа шулай булған. Боронғо төркиҙәрҙә лә (шул иҫәптән, боронғо башҡорттарҙа ла), күрәһең, үгеҙ төньяҡ менән бәйле ниндәйҙер бер йондоҙлоҡто аңлатҡан булырға тейеш, тип уйларға урын бар, сөнки Урал батыр ҡобайырындағы күп кенә персонаждарҙың йондоҙҙар менән бәйле булыуы асыҡланды. Мәҫәлән, башта исемен атап киткән китабымды яҙған саҡта "Урал батыр"ҙағы ваҡиғаларҙа әүҙем ҡатнашҡан Аҡбуҙат - Сириус йондоҙло, Зәрҡум - Арыҫлан йондоҙлоғо, Айһылыу - Зөһрә йондоҙо (планетаһы), Аҡ һаҡаллы ҡарт - Уҡсы йондоҙлоғо, Ҡәһҡәһә - Ҡош юлы булыуын асыҡлай алдым. Шуға күрә Урал көрәшкән үгеҙҙең ниндәйҙер берәй төньяҡ менән бәйле йондоҙ булыуы бик тә ихтимал, тиергә була.

Боронғо төркиҙәр (улар ғына түгел, ғөмүмән, бөтә боронғо кешеләр

ҙә) ҡышты - иң ҡурҡыныс ваҡыт, тип уйлаған. Ҡыш етеү менән тәбиғәт ҡышҡы йоҡоға тала һәм был ваҡытта яуыз көстәр (дейеү, аждаһа, ен-пәрей кеүектәр) ҡоторона. Йыл бөтөүгә табан бара, ә яңыһы әле тыумаған. Урал ҡояш символы булараҡ шул яуыз көстәрҙе, йыл аҙағын, ҡышты һынландырыусы үгеҙ менән көрәшеп, уны еңә. Был - көндәрҙең оҙайыуға ҡарай боролоуын, ҡыштың яҙға ҡарай ауышыуын аңлатҡан. Ысынлап та, әле көндәр һыуыҡ торһа ла, 22 декабрҙән һуң көндәр оҙая башлай. Яңы йыл башлана. Быны беҙгә боронғо ата-бабаларыбыҙ Уралдың Ҡатил ҡыҙының ҡулынан алма алыуы аша ла символлаштырып аңлатҡан. Боронғо күп кенә халыҡтарҙың мифологияһында алма - ваҡыт яңырыу символы булып торған. Аллалар, ҡартая башлаһалар, алма ашап, үҙҙәрен йәшәрткәндәр. Башҡорт ҡобайырында Ҡатил ҡыҙының Уралға алма биреп ымлауын да шулай тип аңларға кәрәк. Йәғни, ваҡыт инде ҡартайыуҙың һуңғы (22 декабрь) нөктәһенә еткән, артабан яңырыу башланырға тейеш. Һәм был шулай була ла - көндәр оҙайыуға китә.

Ҡобайырҙағы Ҡатил батшаның йыл да бер ҡат бөтә халыҡты йыйҙырып, ритуал үтәп, ата-бабалары рухына ҡорбан (шул иҫәптән кеше ҡорбаны ла) килтереүенең дә мәғәнәһе шул уҡ - йыл ахырын билдәләү. Борон бик күп халыҡтар йыл аҙағында, иң ҡурҡыныс саҡта, ата-бабаларҙы иҫкә алып, ҡорбан салып, әрүәхтәрҙән тереләргә ҡарата миһырбанлыраҡ булыуҙарын үтенгән. Сөнки улар "йыл ахырына яҡынлаша, ваҡыт бөтөп бара, уның дауамы әллә булыр, әллә юҡ", тип шомланған. Ваҡыт һәм уның менән ҡуша Донъя ла бөтөп ҡуймаһын өсөн төрлө саралар күргәндәр. Шул сараларҙың береһе ҡорбан килтереү булған. Бына шул Ваҡытты һәм Донъяны яңыртыу өсөн ҡүрелгән сараларға тап була ла инде беҙҙең Урал батыр Ҡатил илендә. Ошо сараларҙың иң олоһо, кеше өсөн иң ҡурҡынысы, тик һуңғы сара булараҡ ҡулланыла торғаны - кеше ҡорбаны булып торған.

Ҡышын, Яңы йыл ритуалдарын үтәгәндә кешеләрҙе ҡорбанға килтереү йолаһы - боронғо дәүерҙә бөтә кешелек үткән этап. Былдай сараға боронғолар тик һуңғы, ахыр сиктә генә, мәжбүри мөрәжәғәт иткән. Ҡорбандарҙың ата-бабалар рухына булыуы ла оло мәғәнәгә эйә. Сөнки, боронғолар уйлауынса, ҡарттар - үткән ваҡыт, йыл аҙағы, ҡыш менән бәйле заттар тип һаналған. Беҙ әле булһа ҡышты ҡартлыҡ менән бәйләп, "Ҡыш бабай", тип атайбыҙ. Бында урыҫ мәҙәниәте аша ингән Яңы йылды байрам итеүҙең бер ҡыҫылышы ла юҡ. Ҡыш бабай башҡорттоң борон-борондан килгән, уның боронғо донъяуи ҡараштары менән бәйле үҙе тыуҙырған персонажы. Төрки халыҡтарында ҡыш ваҡыты ҡарттар, үткән заман менән бәйле ваҡыт. Беҙҙең халыҡтың ауыҙ-тел ижадында ла ҡарттар йыш ҡына ҡыш менән бәйләп телгә алына. Мәҫәлән, Башҡорт халыҡ ижадында баҫылған:

*- Бабайым килә һағынып,*
*Аҡ толобон ябынып.*
*- Бер ҡарт килә һағынып,*
*Ауа-түнә абынып,*
*Аҡ сәкмәнен ябынып.*
*- Аҡ бабай, аҡ бабай,*
*Аҡ тунынды ҡаҡ бабай",* - тигән юлдарҙан был бабайҙарҙың ҡыш менән бәйле персонаждар икәнен күрергә мөмкин.

Боронғо ата-бабаларыбыҙ уйлауынса, йыл аҙағында яҡты донъянан теге донъяға, йәғни, фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күскән туған-тыумасалары менән аралашыу мөмкинлеге барлыҡҡа килә, улар беҙҙең арағa үтеп инәләр, ваҡыт һәм аралар бутала. Шул саҡта донъяны киренән иплә, рәткә килтереү өсөн ҡорбаны килтереп, уттар яғып, доға ҡылырға мәжбүр булған боронғолар.

Шулай итеп "Урал батыр" ҡобайырында Уралдың Ҡатил иленә барып сыҡҡан мәлен, ул унда күргән-ишеткән хәл-ваҡиғаларҙы башҡорттарҙың ата-бабаларының боронғо замандарҙағы календарь ҡараштарының символдар, кодтар аша тасуирланыуы тип аңларға кәрәк. Теүәлерәк әйткәндә, Яңы йылды ҡаршылау ритуалы үткәрелеп ятҡан саҡҡа тап килә, тип аңларға тейешбеҙ был ваҡиғаларҙы.

Бала саҡтағы инде хәтерҙән юйылып бөтә яҙған ҡайһы бер ваҡиғалар күҙ алдына килә. Уларға инде илле йылдарҙан ашыу ваҡыт үтеп киткән. Атайымдың ҡарындашы Мәхмүзә апайым һәм тағы ла кемдәрҙер Яңы йыл етмәҫтән алдараҡ тундарын әйләндереп кейеп, биттәренә ҡором һөртөп, һепертке тотоп, ырғаннап, шаярып йөрөй торғайны. Был ваҡиғаларҙың мәғәнәһен элек боронғо башҡорттарҙың Яңы йыл башын билдәләп үткәргән ритуалдарының беҙҙең көндәргә килеп етә яҙған ярсығы, тип аңларға кәрәк. Был хәтирәләр айҡанлы, ошондайыраҡ ритуалдарҙың Кавказ төркиҙәре балҡарҙарҙа, ҡумыҡтарҙа һәм уларҙың күршеләре Дағстан халыҡтарының ҡайһы берҙәрендә барлығы фәнни сығанаҡтарҙа теркәлгәнен лә әйтеп китергә кәрәк. Уларҙа ла был ритуалдар Яңы йыл менән бәйле үткәрелә. Тунды, кейемдә әйләндереп кейеү, битте ҡоромға буяу - былар бөтәһе лә символик рәүештә теге донъя персонаждарын ҡабатлау булып тора. Сөнки боронғо башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, теге донъяла бөтәһе лә киреһенсә - аҡ төҫ ҡараға әйләнә, кейемдәр эс ягын тышҡа әйләндереп кейелә, имеш. Был турала ғалимдар йыйған этнографик материалдар ҙа раҫлай. Тундың тиҫкәре яғын әйләндереп кейеү, битте ҡором менән буяп, төрлө төҫтәге сепрәк-сапраҡ өҫтәп бәйләнгән сыбырткы менән кешеләргә һелтәнеп, төрләсә ҡыланыуҙар тыуған районым Баймаҡта йәштәр өйләнешкәндә туй йолаһының бер мәҙәк йолаһы булараҡ әле лә үткәрелә. Ике йәш кешенең өйләнешеүе шул уҡ яңырыу, яңы донъя барлыҡҡа килеү менән бер үк мәғәнәлә һәм шуға күрә туйҙың аҙағында "сыбыртҡы йолаһы" үткәреү менән йыл ахырында тундың тиҫкәре яғын әйләндереп кейеп, ҡурҡыныс ҡиәфәткә кереп ҡыланыуҙар икеһе лә бер үк мәғәнәле.

Үҙәрәк яҙғанымса, йыл аҙағында теге донъя менән был донъя ҡушылып, донъялар бутала башлай һәм әрүәхтәр был донъяла йәшәгәндәр менән аралаша ала. Быны ошо ҡараштар сағыла ла инде, йыл ахырында, Яңы йыл алдынан кейемдәрҙең тиҫкәре яғын кейеп, биттәрен ҡара ҡоромға буяп йөрөгән кешеләрҙең ҡыланыштарында. Был да шул уҡ беҙ хәҙер бал-маскарад тип атаған нәмәнең башҡортса бер һынланышы.

Әле үҙә яҙғандар беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың астрономик, календарь белемдәренең бик боронғо дәүерҙәргә барып тоташҡанын күрһәтә. Бүтән халыҡтар кеүек, беҙҙең башҡорт та Яңы йылды көтөп алған, уны үҙенсә бик матур итеп үткәрергә тырышҡан, сөнки был мәлдә ҡылған гәмәлдәре киләсәккә тәьҫир итә, тип уйлаған һәм был тәьҫирҙең тик ыңғай ғына булыуын теләгән. Шуға күрә башҡортҡа Яңы йылды ата-бабаларҙан ҡалған рухи мираҫ, әҙерәк заманса модернизация шауҡымы ҡағылһа ла, боронғо үҙ байрамыбыҙ, тип аңлап ҡабул итергә һәм үткәрергә генә ҡала.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Ҡоҙғон
**(Ворон)**



Ҡарғанан яҡынса ике тапҡырға ҙурыраҡ. Төҫө - ҡап-ҡара, күгелйем булып сағылып тора. Суҡышы ҡеүәтле, ҡойроғоноң осо шына рәүешендә, был айырыуса осҡан саҡта яҡшы күренә, ҡоҙғон ала һәм ҡара ҡарғанан шунын менән айырыла. Тамағындағы ҡауырыйҙары ослайып, тырпайып тора. Ҡарға-ҡоҙғондар төркөмөнә ҡараған башҡа ҡоштарҙан айырмалы, осҡан саҡта ҡанаттарын һирәк елпей, уларҙы йәйгән килеш өйөрөлөп йөрөй.

Көслә, тамаҡ төбөнән сыҡҡан тауыш менән "курк" тип ҡысҡыра, шулай уҡ төрлөсә ҡарҡылдай, барабан һуҡҡан кеүек тауыштар сығара.

Рәсәйҙә киң таралған. Башҡортостанда ғәҙәти, әммә һирәк осрай торған ҡош. Урманлы, урманлы-далалы райондарҙы үҙ итә.

Ояһы ҙур, диаметры 80 см-ға етә, уны ул ағастарға, ҡаяларға, электр бағаналарына ҡора. 2006 йылда Өршәк станцияһы эргәһендә электр бағанаһында ҡоҙғондар оя яһап, 2 бала сығарҙы. Ғәҙәттә, парҙар бер-берееһенән 1 саҡрым тирәһендәге алыҫлыкта оя ҡора. 4-6 йомортҡа һала. Инә ҡош баҫа, ата ҡош суҡышында һәм тел аҫтына һалып, ризыҡ ташый. 20-21 көндән бәпкәләр сыға. Был иртә яҙ мәлендә булғанлыҡтан, инә ҡош тәүге ике аҙнала уларҙы тәне менән йылыта, ата ҡош ашата. 5-6 аҙналыҡ бәпкәләр үҙҙәре оса башлай.

Тере ризыҡ (кимереүселәр, ҡоштар, йомортҡа, себештәр, тәлмәрйендәр, кеҫәртқеләр), шулай уҡ емтек менән дә туҡлана. Беҙҙең ҡоҙғондоң тауыҡҡа ташланып, уның башын соҡоғанын күргәнебеҙ ҙә булды. Ауыл, ҡала тирәһендә йәшәгән ҡоҙғондар тулыһынса сүп-сарҙа тамаҡ туйҙырыуға күсә. Ит эшкәртеү комбинаттары янында, мал үләкһәләрен күммәйенсә ташлай торған урындарҙа ҡоҙғондар күмәкләп йәшәй. Һунарсыларҙың тотҡан йәнлегенең ҡайһы бер ташлап киткән өлөштәрен ашай.

Өлкән ҡоҙғондар ояһында ҡышлай, ә йәштәре бер урындан икенсеһенә күсеп йөрөй, төнгөләккә бер урынға йыйылып төнәй. Оя ҡорор мәл еткәнгә тиклем үк парлаша. Ҡыш аҙағында ҡоҙғондарҙың туйы башлана: һауала түңәрәктәр яһап өйрөлә, арҡаһына ятып осалар, нығ тауышланып ҡысҡырышалар. Тәбиғәттә ҡоҙғон 69 йәшкә тиклем йәшәй ала.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# НИМӘ УЛ КЕШБЭК?

**Инглиз теленән cashback һүҙе "ҡулаҡса ҡайтарыу" тип тәржемә ителһә лә, ул һатып алғанда тап карта менән түләгән осраҡта сығымдарҙың бер өлөшөн ҡайтарыуҙы аңлата.**

Кешбэк механизмы банк менән сауҙа нөктәһенен үҙ-ара эш итеүенә бәйле. Һатып алыусы карта менән түләгән осраҡта магазин банкка операцияны үткәргән өсөн комиссия (эквайринг комиссия) түләй. Шул комиссияның бер өлөшөн банк һатып алыусыға кире ҡайтара. Һөҙөмтәлә, һатып алыусыға ниндәй ҙә булһа файҙа, ә банк клиенттарын тап уның картаһы менән актив ҡулланыуға дәртләндерә.

Кире ҡайтарыуҙар төрлө формала булырға мөмкин. Иң киң ҡулланылғаны - карта иҫәбенә күсерелгән аҡса. Икенсе вариант - бонус балдар йәки банктың үҙенең эске балдары. Уларҙы, ғәҙәттә, партнерҙарҙа ташламаға йә берәй тауарға алмаштырырға мөмкин. Шулай уҡ программа сиктәрендә авиабилеттар һәм ҡунаҡханаларҙа бүлмә өсөн түләү мөмкинселеге биргән миля формағындағы кешбэктар бар.

Кешбэк размеры программа шарттарынан ғибәрәт. Ғәҙәттә, кире ҡайтарыуҙың иң бәләкәй проценты яҡынса 1 процент тәшкил итә, әммә айырым категорияларҙа 5-10 процентҡа етеүе һәм унан да юғарыраҡ булыуы ихтимал. Йыш ҡына юғары ставкалар сығымдарҙың айырым төрҙәренә: кафе һәм рестырандар, транспорт, онлайн һатып алыуҙар һ.б. бәйле була. Кире ҡайтарыу суммаһы сикләнгән бер осор эсендә арттырылған ваҡытлыса акциялар ҙа булып тора.

Кешбэк та, ташлама ла сығымдарҙы кәметергә ярҙам итә, ә нимәһе менән айырыла һуң улар? Ташламалар тауар хаҡын шунда уҡ, һатып алғанда уҡ кәметә, аҡсаның күскәнен көтөргә кәрәкмәй. Ә кешбэк менән ҡулланғанда клиент тәүҙә тулы сумманы түләй, ә инде һуңынан уға шул сумманың күпмелер проценты кире күсерелә. Ташламаны магазиндар үҙҙәре тәҡдим итә, ә кешбэк банк картаһына һәм программаларға бәйле. Ҡыҫҡаһы, кэшбэкты банк тарафынан бирелгән кисектерелгән ташлама тиһәң дә була.



## 26 ЯНВАРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30 Х/ф "Высоцкий. Спасибо, что живой". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.40, 14.20, 16.45, 17.15, 22.40 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Капкан на судью". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Омут". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.40 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Асыш. [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 20.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Д/с "Большое кино". [16+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**21.00 Хоккей. "Динамо" (Минск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.00 Х/ф "Остров исправления". [12+]**
**1.30 Спектакль "Прерванная свадьба". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 27 ЯНВАРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Капкан на судью". [16+]
0.00 Д/ф "Бродский не поэт". Памяти Иосифа Бродского. [16+]
1.50, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Омут". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.40 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**18.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Д/ф О чем говорят Памятники. [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 Генералы Башкортостана. [12+]**
**23.45 Х/ф "8 бусин на тонкой ниточке". [12+]**
**1.30 Спектакль "Зятья Гюргюри". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 28 ЯНВАРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Капкан на судью". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Омут". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.40 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 20.15 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Формула здоровья. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Креативный код. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.50 Хоккей. "Ак барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.00 Х/ф "Война и мир супругов Торбеевых". [12+]**
**1.45 Спектакль "Крах и отчаяние". [12+]**
**3.15 Д/ф О чем говорят Памятники. [12+]**
**3.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 29 ЯНВАРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Капкан на судью". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.20, 3.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Омут". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.40 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Сулпылар. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Башкортостан#вместе. [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Формула здоровья. [12+]**
**21.15 Бизнес-обзор. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Авантюристы". [12+]**
**1.45 Спектакль "Ах, Сапатера". [12+]**
**3.00 Генералы Башкортостана. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 30 ЯНВАРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.15, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Х/ф "Мажор в Сочи". [16+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Райский". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Дуэты". [12+]
0.50 Х/ф "Легенда №17". [6+]
3.15 XXIV Торжественная церемония вручения Национальной кинематографической премии "Золотой Орёл". Прямая трансляция.
Пятница, 30 января
5.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Непридуманная жизнь". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**16.45 Формула здоровья. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры представляет". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Полет. Три дня после катастрофы". [16+]**
**1.30 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**3.15 Колесо времени. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 31 ЯНВАРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Пророчества". К 115-летию со дня рождения Ванги. [16+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.15, 1.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
13.45 Д/ф "Несломанный свет". К 70-летию со дня рождения Веры Глаголевой. [12+]
14.50 Х/ф "Выйти замуж за капитана". [12+]
16.35 Х/ф "Ковчег". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Ледниковый период". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
0.00 Д/ф "Герой с душой клоуна". История Вэла Килмера. [18+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
Суббота, 31 января
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 Д/ф "Анатомия геноцида. Мы пришли вас уничтожить". [16+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Шоу Золотой Рыбки". [16+]
0.40 Х/ф "Верить и ждать". [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.45 "Аль-Фатиха". [12+]**
**9.15 Сәләм представляет... [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 Преград. Net. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Торпедо" (Нижний Новгород). КХЛ.**
**19.00 Новости (на баш. яз).**
**19.30 Генералы Башкортостана. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 "Башҡорт йыры представляет". [12+]**
**0.15 Караоке по-башкирски. [12+]**

**0.45 Х/ф "Башмачник". [12+]**
**2.30 Спектакль "Два берега бытия". [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 1 ФЕВРАЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.30 Премьера. "Дорогою добра". Концерт к 90-летию Юрия Энтина. [0+]
16.15 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат России по прыжкам 2026. [0+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "Три аккорда". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30, 2.35 Х/ф "Жена Штирлица". [16+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Д/ф "Предательство". [12+]
23.55 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 "Читаем с Грамотейкой". [6+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Асыш". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15, 3.00 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Преображение. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Х/ф "Башмачник". [12+]**
**19.30 Квадратные метры. [12+]**
**19.45, 3.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.45 Х/ф "Униженные и оскорбленные". [12+]**
**0.45 Спектакль "Дама без камелий". [12+]**
**4.30 Колесо времени. [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Ғинуар - Февраль (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (7) дүшәмбе | 7:23 | 9:16 | 13:30 | 15:49 | 17:40 | 19:26 |
| 27 (8) шишәмбе | 7:22 | 9:15 | 13:30 | 15:51 | 17:42 | 19:28 |
| 28 (9) шаршамбы | 7:20 | 9:13 | 13:30 | 15:53 | 17:44 | 19:30 |
| 29 (10) кесе йома | 7:19 | 9:12 | 13:30 | 15:55 | 17:46 | 19:31 |
| 30 (11) йома | 7:18 | 9:10 | 13:30 | 15:57 | 17:48 | 19:33 |
| 31 (12) шәмбе | 7:16 | 9:08 | 13:30 | 15:59 | 17:50 | 19:35 |
| 1 (13) йәкшәмбе | 7:15 | 9:06 | 13:30 | 16:01 | 17:52 | 19:36 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

АФАРИН!

# БАШҠОРТСА БИАТЛОН ШУЛАЙ БУЛА!



**Уҙған шәмбе Белорет районының Манышты ауылында башҡорт һунарсыһы Биғарслан Солтанов исемендәге Милли һәм этник спорт төрҙәре ярышы - Башҡорт биатлоны буйынса 4-се республика турниры уҙҙы.**

Башҡорт биатлонының ғәҙәтиенән айырмаһы шунда: ҡатнашыусылар һунар сандығында дистанцияны таяҡһыҙ үтергә һәм винтовканан, уктан атырға, шулай уҡ йыртҡыс фигураһына һөңгө ташларға, быймала һәм милли кейемдә ике саҡрым самаһы йүгерергә кәрәк.

Был юлы бәйгелә Башҡортостандың 25 районынан һәм ҡалаһынан 120-нән ашыу спортсы ҡатнашты. Күптәр ғаиләһе менән килгәйне. Дистанцияла ла балаларҙың күпләп ҡатнашыуы күҙәтелде. Иң йәш спортсыға 8 йәш булһа, иң өлкәненә, Белорет районының Үсманғәле ауылынан Рәйсә Фәткетдиноваға 75 йәш ине, унын трассаны ауырлыҡһыҙ үтеүе барыһын да һоҡландырҙы.

Манышты халҡы ҡунаҡтарҙы ҡабул итеүгә яҡшы әҙерләнгән: сәхнә эшләгәндәр, санғы юлы һалғандар һәм йыһазландырғандар, йылытылған тирмәләр ҡуйғандар. Ауыл ағинәйҙәре бөтәһен дә усаҡта бешерелгән былау һәм самауырҙан хуш еҫле үлән сәйе менән һыйланы. Көн бик һалҡын булды, әммә сәмле бәйге, берҙәмлек, күңелле аралашыуҙар, йыр-моң йөрәктәрҙе йылытты. Турнирҙың иң ҡыҙыу мәлендә тауҙар өҫтөндә һирәк күренеш - ҡышҡы йәйғор барлыҡҡа килеүе был көнгә айырыуса ҡот өҫтәне.

Был бәйгелә Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты, Башҡортостандың "Ир-егеттәр ҡоро" рәйесе Зариф Байғускаров инде өсөнсө тапҡыр ҡатнаша. "Халыҡ Маныштыны айыҡ ауыл тип иғлан иткән, магазинда алкоголь һатылмай. Маныштылар үҙ көстәре менән Яугир паркы, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға һәйкәл һәм аллея, мәсет төҙөгән. Һәр кемгә Маныштыны барып күрергә кәңәш итәм. Бында илһөйәрҙәр, үҙ еренең ысын хужалары йәшәй", - тип тәьсораттары менән уртаҡлашты Зариф Закир улы.

**Гүзәл БИКМӘТОВА.**

ЯҢЫ КИТАП

# БАТЫРҘАРЫБЫҘҘЫ БЕЛӘЙЕК



**Күптән түгел З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтенең фирма магазинында Р.Н. Рәхимов һәм Г.Г. Ҡолһарина авторлығындағы "Башкортостан. Герои специальной военной операции" китабының исем туйы үтте.**

Биографик очерктар жанрында донъя күргән был әҫәрҙәр йыйынтығы тыуымыштары менән Башҡортостандан булған Украиналағы Махсус хәрби операцияла Рәсәй Федерацияһы Геройы исеменә лайыҡ булған яҡташтарыбыҙға бағышланған.

"Беҙҙең бындай тематикалағы баҫмаларҙы сығарыуҙа бер ни тиклем тәжрибәбеҙ бар. Беренсе Чечен операцияһы яугирҙары хаҡында китаптар булды. Был китап өҫтөндә эш башлар алдынан Рәмил Нәсибулла улы менән беҙ тәүҙә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың яҡындарын: ата-әсәләрен, ҡатындарын йыйып әңгәмәләшергә булдыҡ. 8 Март алдынан булған ине был хәл. Һәм "Ҡатын-ҡыҙ - милләт әсәһе" конкурсы сиктәрендә ҡатын-ҡыҙҙар менән һөйләшеп, геройҙарыбыҙ хаҡында мәғлүмәт йыйып, ошондай китап менән уларҙың хәтерҙәрен мәңгеләштерергә тигән ҡарарға килдек. Мөмкинселектәре булған яугирҙар мәғлүмәт, фотолары менән үҙҙәре бүлеште. Бәлки, был китап һуңғыһы ла булмаҫ әле", - тип сығыш яһаны Гөлнур Ғәлинур ҡыҙы.

Иле өсөн йәнен дә, тәнен дә аямаған улдарын яҡындары ғына түгел, илебеҙ ҙә онотмаҫ, ә тап ошондай эстәлекле китаптар - уларҙың исемдәрен мәңгелеккә һаҡлап ҡалыусы хәтер һандығы ул.

ХӘТЕРЛӘП...

# ХӨРМӘТЛЕ ШӘХЕСКӘ АРНАП



**Өфөлә 2023 йылдың октябрендә арабыҙҙан киткән танылған телсе-ғалим - филология фәндәре докторы, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Башҡортостандың мәғариф министры, Башҡортостан Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры, М. Аҡмулла исемендәге университетының почётлы профессоры Фирҙәүес Хисаметдинова хөрмәтенә мемориаль таҡтаташ асылды.**

Таҡтаташ асыу тантанаһында абруйлы ҡунаҡтар, Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙының туғандары, уҡыусылары һәм коллегалары ҡатнашты. Башҡортостандың мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙының республикала рәсми телдәрҙе һаҡлау һәм үҫтереү буйынса дәүләт программаһын эшләүҙә һәм формалаштырыуҙа ныҡлы фәнни нигеҙ һалыуын билдәләне. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Аҡмулла исемендәге университет ректоры Салауат Сәғитов Фирҙәүес Хисаметдинованың БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультетының беренсе деканы булыуын иҫкә төшөрҙө. "Бөгөн факультет Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы билдәләгән йүнәлеш буйынса эшләй һәм үҫешә. Был донъяла берҙән-бер башҡорт филологияһы факультеты булып тора, - тип билдәләне Сәғитов. - Республика мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнеүҙе һәм уны Башҡортостандың дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы ҡайғыртып йәшәне ул. Урыҫлашҡан милләттәштәребеҙгә башҡорт телен өйрәтеү өсөн дәреслектәр, пособиелар һәм методик ҡулланмалар төҙөгән тәүге автор һәм методистарҙың береһе ине".

Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙының улы Тимур Мөхтәров мемориаль таҡтаташ ҡуйыу башланғысы менән сығыш яһаусыларға һәм тантанаға йыйылыусыларҙың барыһына ла рәхмәт белдерҙе.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**23 ғинуар "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш, Ф. Ғарипов), музыкаль комедия. 12+
**24 ғинуар "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+
**25 ғинуар "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, инсц. Ш. Ғилманова), драма. 16+
**29 ғинуар "Заятүләк менән Һыуһылыу"** (М. Ғафури, М. Малухина, И.Ҡаҙаҡбаев). 6+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 ғинуар "Гарнир по-французски"**, (М. Камолетти, А. Шрайнер), комедия. 16+
**24 ғинуар "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев, В. Виткович, М. Ҡулбаев), комедия. 12+
**25 ғинуар "Сказание о семи батырах"** (Д.Йосопов, Р.Хәкимов), фэнтези. 12:00. 6+
**25 ғинуар "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Ҡулбаев), драма. 18:00. 12+
**28 ғинуар "Батыр йөрәк"** (Р. Хәкимов), әкиәт. 12:00. 6+
**28 ғинуар "Отец"** (М. Горький, Д. Хәснийәров), ғаилә драмаһы. 19:00. 12+
**29 ғинуар "Сказание о семи батырах"** (Д.Йосопов, Р.Хәкимов), фэнтези. 11:00. 6+
**29 ғинуар "Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айтматов, Ә. Ишбулдина, Р. Хәкимов), драма. 19:00. 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**24-25 ғинуар "Щелкунчик"** (Ю. Ким). 12:00 һәм 15:00. 0+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 ғинуар "Урман башҡорто"**, шағир Ғәли Соҡоройҙың тыуыуына 200 йыл айҡанлы әҙәби-музыкаль кисә. 19:00. 6+
**25 ғинуар "Гадкий утенок. Сказки дядюшки органа"** бөтә ғаилә өсөн ял концерты. 15:00. 6+
**29 ғинуар "Алтын коллекция. Башкортостан композиторҙары"** БР милли халыҡ инструменттары оркестры концерты. 19:00. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**24 ғинуар "Три поросенка"** (З. Сөләймәнова инц.), музыкаль әкиәт. 13:00. 0+
**27 ғинуар "Голубцы"** (А.Финк), комедия. 16+
**29 ғинуар "Тогролоҡ"** (М.Ҡунафин, З.Бураҡаева инц.), драма. 16+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**24 ғинуар "Өлкән улым"** (А. Вампилов), притча. 16+
**25 ғинуар "Золотой осел Насретдина"**, музыкаль әкиәт. 0+
**28 ғинуар "Ты, Моцарт, бог, и сам того не знаешь"** музыкаль-әҙәби лекторий. 6+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**23 - 24 ғинуар "Как лиса счастье под елкой нашла"** Яңы йыл әкиәте. 10:00. 0+

## БР Милли музейы

**23 ғинуар "Зимние истории насекомых"** мәғәни-ағартыу сараһы. 15:00. 6+
**29 ғинуар "Музей на кончиках пальцев"** грант проектары һөҙөмтәләрен презентациялау. 15:00. 0+

✔ Үҙ хәлен еңеләйтеү өсөн ул тағы ла башҡаларҙы талай, тағы ла юғалта. Ғүмер ахырында үлем түшәгендә ыңғырашып ятҡанда ла ул барыһын да - Аллаһты ла, тормошто ла, кешеләрҙе лә ҡарғап ятыуын дауам итә...



МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# БАЛАЛАР ЙЫЙЫЛА

**2026 йылдың 23-27 июнендә Башҡортостанда балалар ижады форумы ойошторола.**

Бөтә Рәсәй балалар фольклориадаһында 10-18 йәшлектәр ҡатнашырға мөмкин. Солистар һәм ансамблдәр халыҡ йыры, халыҡ бейеүе, халыҡ музыка ҡоралдары һәм традицион мәҙәниәт кеүек номинацияларҙа сығыш яһай. III Бөтә Рәсәй балалар фольклориадаһына әҙерлек тулы көскә бара, тип хәбәр иттеләр Республика халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтенән. Эш кәңәшмәһендә күләмле сараны ойоштороу һәм үткәреүҙең төп мәсьәләләре тикшерелде. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар Фольклориаданы уңышлы үткәреүҙе тәьмин итеүгә йүнәлтелгән әҙерлек этаптарын, бурыстарҙы бүлеүҙе һәм сараларҙы ентекле ҡараны.

Саралар форматы, ижади өләштән тыш, йәмәғәтселек һәм дәүләт власы вәкилдәре ҡатнашлығында белем биреү буйынса оҫталыҡ дәрестәрен һәм фекер алышыу майҙансыҡтарын үҙ эсенә ала. Фестивалде асыу һәм ябыу тантаналары, ҡатнашыусыларҙың Башҡортостан етәкселеге менән ижади осрашыуҙары, ҡатнашыусылар парады һәм дуҫлыҡ әйлән-бәйләне иҫтә ҡалырлыҡ ваҡиғалар булмаҡсы. 2026 йылда Балалар фольклориадаһы өсөнсө тапҡыр үткәрелә.

# ХАЛЫ-АРА БӘЙГЕЛӘ...



**Өфөнән йәш баянсы Халыҡ-ара конкурста еңеү яуланы. Талантлы яҡташыбыҙҙың еңеүе тураһында баш ҡаланың Киров районы башлығы Илвир Нурдәүләтов хәбәр итте.**

"Нариман Сабитов исемендәге 1-се балалар музыка мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Вилдан Хөрмәтуллин Түбәнге Новгородта үткән 28-се "Волга сувенирҙары" халыҡ-ара конкурсында уңышлы сығыш яһаны һәм II дәрәжә лауреат булды. Вилданды һәм уның уҡытыусыһы Айнур Искәндәровты лайыҡлы наградa менән ихлас ҡотлайым. Һеҙҙең хеҙмәт һәм талант йәнә яҡшы һөҙөмтә бирҙе. Яңы еңеүҙәр һәм ижади уңыштар теләйем", - тип ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе Илвир Нурдәүләтов.

Әйткәндәй, 2008 йылда булдырылған "Волга сувенирҙары" проекты киң экскурсия программаһы менән берләштерелгән абруйлы халыҡ-ара балалар һәм үҫмерҙәр ижады фестиваль-конкурстары системаһына инә. Конкурс мирәге дауамында донъяның төрлө ҡалаларында фестиваль-конкурстар үткәрелә. I дәрәжә лауреаттар "АртКон" суперфиналында ҡатнаша.

# АРТИСТ КӨНӨ ЛӘ БАР

**Рәсәйҙә тәүге тапҡыр рәсми рәүештә Артист көнө билдәләнде. 17 ғинуар осраҡлы һайланмаған, сөнки был көндә СССР-ҙың беренсе халыҡ артисы, күренекле педагог һәм актер оҫталығы системаһын булдырыусы Константин Станиславский тыуған.**

Байрам уңайынан Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара конкурстар лауреаты, "Тауыш" телепроектында ҡатнашыусы, "Яңы йондоҙ" һәм "Йәшлек-шоу" проекттары финалисы Илдар Абдуллин үҙен сәхнәгә илткән юл тураһында бер кәлимә һүҙе менән бүлеште: "Мин бала саҡта сәхнә тураһында түгел, ә футболсы, һуңынан водитель булырға хыялландым. Әммә мин һәр саҡ йырланым, сәхнәне яраттым. Бер ваҡыт йыр түңәрәгенә йөрөй башлағайным, үҙемә оҡшап китте. Беҙ шәп номерҙар ҡуйҙыҡ, концерттар менән сығыш яһаныҡ. Мәктәптән һуң кем булырға, тип уйланған саҡта дуҫыма иптәшкә тип йыр конкурсында ҡатнашырға булдым. Әгәр еңһәм, музыка колледжына уҡырға барырға ҡарар иттем. Мин еңдем. Быны бөхетле билдә итеп ҡабул иттем! Тау йүнәлеше буйынса белем алаһы урынға билдәһеҙлекте һайланым. Мине унда бер кем дә көтөп торманы, әммә мин уҡырға индем һәм ошо эшкә ғашиҡ булдым!"

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӨЙӨК ХӘҠИҠӘТ ЗАКОНЫ

Ҡойошҡаны көмөштөр - ҡолдоң аты ҡол булыр, ҡойошҡаны йүкәлер - бейҙең аты бей булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ярлы кеше бер байға хеҙмәткә яллана. Бай уны баҫыуына алып барып, ни эшләргә икәнен һәм күпме түләйәсәген әйтә. Ярлы эштең көс еткеһеҙ икәнен аңлай, әммә түләүе арыу ғына булғас, ризалаша. Шул аҡса менән ул ғаиләһенең хәлен бер аҙ ғына булһа ла еңеләйтәсәген уйлап ҡыуана. Ләкин бай ҡушҡан эш шул тиклем ауыр була. Һауа торошо ла шәптән булмай: йә ҡоролоҡ тора, йә ямғыр ҡоя, йә көслө дауыл башлана, ти. Хеҙмәтсенең йоҡоһо ла, ялы ла булмай. Ул ҡайһы саҡта ултырып илап алғылай, әммә эшен туҡтатмай, аслыҡ әсеһе ауыр хеҙмәт әсеһенән яманыраҡ икәнен яҡшы белгән була ул. Бына уңыш йыйып алыу ваҡыты килеп етә. Хеҙмәтсе үҙенең әсе тир емештәрен күреп, беренсе тапҡыр кинәнеү кисерә. Хеҙмәтенә лайыҡлы баһа алыр өсөн бай эргәһенә килә. "Һин минең ышанысты аҡламаның, - тип ҡаршы ала уны бай. - Уңыштың күбеһе ҡоролоҡтан юҡҡа сыҡты, күпмелер өлөшө ямғырҙа серене, күпмелер уңышты дауыл алып китте. Был юғалтыуҙарҙың барыһы өсөн дә мин һинең эш хаҡыңдан тотоп ҡалам, бар ҡатыным эргәһенә, аҡсаны ул түләр". Хеҙмәтсе байҙың ҡатыны янына бара, уныһы бер нисә тинлек сығарып, хеҙмәтсенең усына һала. Тинлектәргә ҡарап алғас, хеҙмәтсенең күҙҙәренән йәш бәреп сыға, ғәрләнеүе бәғерен өтә. Хәлдән тайған һәм ауырыған килеш ул ас ултырған ғаиләһе янына йүнәлә...**

**Байтаҡ ваҡыт үтә, был ваҡиға онотола. Ләкин берҙән-бер көндө байҙың малдары ҡырылыуы, йорто яныуы, балалары ауырып китеүе, ҡатыны вафат булыуы тураһында хәбәр тарала. Ҡайғынан бөлөп, бай Аллаға мөрәжәғәт итә: "Әйт әле, Хоҙай, мин ниндәй ҡылығым менән Һине асыуландырҙым? Мин һин ҡушҡандарҙың барыһын да үтәйем, һиңә табынам, доғалар ҡылам, ә Һин мине язалайһың". "Кеше доғалар менән түгел, үҙенең эше менән үҙ яҙмышын булдыра. Һин кешенекен күпме үҙләштерһәң, шул ҡәҙәре юғылттың", - ти Хоҙай. "Ләкин минең юғалтыуҙарым бит кешенекен үҙләштергәнгә ҡарағанға мең тапҡырға күберәк", - тип ҡаршы төшә бай. "Һиңә эшләгән хеҙмәтселәрҙең юғалтыуҙарын иҫәпләгән аныҡ үлсәү бармы һуң? Һин уларҙың күҙ йәштәрен, тәнен ташлап киткән һаулығын, мохтажлыҡтарын һәм аслығын, йән әрнеүҙәрен иҫәпкә алдыңмы?"- ти Аллаһ. "Миңә ҡарата бындай ғәҙелһеҙлек күрһәткәс, һин Аллаһ түгел! - тип ҡысҡыра бай ярһып. - Һин мин түләп еткермәгәндән күберәкте тартып алдың минән". "Ә бит һин хеҙмәтсенән түгел, үҙеңдән тартып алдың. Ошоно аңламай тороп, һин юғалтыуҙарҙан туҡтамаясаҡһың", - ти Хоҙай. Байҙың күңелен асыу һәм ҡарғыш ялмап ала. Хәҙер инде уның күҙҙәре йәш менән тулыша. Әммә бар байлығын юғалтҡандан һуң да аҡыл алмай, тағы байығыу тураһында хыяллана. Үҙ хәлен еңеләйтеү өсөн ул тағы ла башҡаларҙы талай, тағы ла юғалта. Ғүмер ахырында үлем түшәгендә ыңғырашып ятҡанда ла ул барыһын да - Аллаһты ла, тормошто ла, кешеләрҙе лә ҡарғап ятыуын дауам итә. Ул шулай Бөйөк Хәҡиҡәт законын аңламай теге донъяға күсә..."**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАШҠОРТ ҒАИЛӘЛӘРЕ - БӘЙГЕГӘ!

**"Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" асыҡ республика конкурсына ғаризалар ҡабул ителә. Конкурстың маҡсаты - башҡорт халҡының бай мәҙәниәтен, телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм йолаларын һаҡлаған һәм үҫтергән ғаиләләрҙе асыҡлау һәм дәртләндереү.**

Конкурста республикала һәм Рәсәй төбәктәрендә йәшәгән, башҡорт телендә һөйләшкән ғаиләләр ҡатнаша ала. Ойоштороусылар әйтеүенсә, ҡатнашыусыларға өс номинация тәҡдим ителә: "Ғаилә ижады"; "Ғаилә кәсебе"; "Ғаилә традициялары һәм ҡиммәттәре". Шулай уҡ "МХО геройы ғаиләһе", "Күп балалы башҡорт ғаиләһе" тигән махсус номинациялар бар.

Конкурс өс этапта үткәрелә. Беренсе муниципаль этап - 23 ғинуарға, икенсе зона этабы - 23 ғинуарҙан 10 февралгә, өсөнсө республика этабы 11 февралдән 20 февралгә тиклем ойоштoрола. Еңеүселәрҙең исемдәре 1 мартта Стәрлетамаҡта Башҡорт ғаиләһе көнөндә финал барышында иғлан ителә. Конкурсты ойоштороусылар: Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы, Мәҙәниәт министрлығы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Стәрлетамаҡ бүлексәһе, Халыҡтар дуҫлығы йорто, Стәрлетамаҡ хакимиәте, Стәрлетамаҡтың дәүләт концерт-театр берекмәһе. Ғаризаларҙы "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе-2026" билдәһе менән 23 ғинуарға тиклем ебәрергә мөмкин.

ТЕЛҺӨЙӘР

# ҠЫМЫҘЫҢ ШИМЛӘНГӘНМЕ?

**Шарҙыуанлыҡ күрһәтмәй, телмәребеҙҙе онотола барған һүҙҙәр менән байытыуҙы тыныс ҡына дауам итәбеҙ .**

**Шарҙыуан. 1.** Шарҙыуан, тимәк, үҙен иркен тотҡан, ҡысҡырып көлөргә, һөйләшергә ятҡан. *Шарҙыуан кеше. Ҡунаҡта шарҙыуанлыҡ хуплаимай.* **2.** "Шарҙыуан"дың тағы бер мәғәнәһе сер йәшерә белмәүгә, асыҡ холоҡ-фиғелгә ишаралай. *Шарҙыуан мөнәсәбәт. Шарҙыуан ҡылыҡ.*

**Шаукал. 1.** "Шаукал" тип эре һөйәкле, ҡаҡса булыу тураһында әйтелә. *Шаукал кәүҙә. Шаукал ат - көслө, шаукал һыйыр һөтлө.* **2.** Ҡулдың бармаҡ төбө тоташҡан быуыны ла шаукал була. *Шаукалды ыуыу. Шаукалға дауалы май һөртөү.*

**Шешәк. 1.** Ике йәшлек ваҡ малға һәм ҡаҙға ҡарата ҡулланылған һүҙ. *Шешәк кәзә. Шешәк ҡаҙар.* **2.** Айыуҙың өс йәшлек икәнен дә "шешәк" һүҙе менән белдергәндәр. *Һунарсылар урманда шешәк тайыш табанды күргән.*

**Шиуа.** "Оҙон аяҡлы" тигән һүҙбәйләнеште "шиуа" тигән бер һүҙ ҙә алыштыра. *Шиуа ҡоралай. Шиуа үҫмер.*

**Шим. Шимләү.** Балды, ҡымыҙҙы тәмләткес. *Ҡымыҙға шим һалыу. Балды шимләү.* Бал ҡортон ашатыу өсөн өҫтәмә шәкәр йәки балды ла шим тиҙәр. *Умартасы ҡортҡа шим биреүҙе лә хәстәрләй.*

**Шулай итеп, ошо һүҙҙәр ҙә телебеҙгә үҙенсәлекле шим йоҡторһон.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 26003

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** **253-25-44**
**Хәбәрселәр** **252-39-99**
**Матбуғат таратыу** **252-39-99**

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 22.01.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 22.01.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 23.01.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы — **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 126